ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 ғинуар (һыуығай) 2024

№2 (1095)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Айығабыҙмы?**

Айығабыҙ!




6

**Беләккә лә ҡара, йөрәккә лә ҡара**



8-9

**Тамашасымы?**

Ул тамаша ҡылыусы ғына түгел!



11

**Иң тәүҙә башҡорт теле,**

шунан - инглиз, ҡытай телдәре...



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Һарандар үҙ байлығы өсөн шул тиклем ҡалтыранып тора, әйтерһең дә, ул уныҡы, әммә ул шул байлығы менән бик аҙ файҙалана, әйтерһең дә, ул уныҡы түгел.*

*(Бион Борисфенит).*

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# АТА-ӘСӘ АҢЛАЙ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**




***Айгөл ШАҺИСОЛТАНОВА, Стәрлетамаҡ ҡалаһының Ж. Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназияһы директоры:*** Республиканың иң ҙур ҡалаларының береһендә башҡорт гимназияһында эшләгән кеше булараҡ, төп борсоған мәсьәлә - ул туған телебеҙҙең киләсәге, балаларыбыҙҙың башҡорт телен белеп үҫеүе, әлбиттә. Был юҫыҡта беҙҙең белем усағы көсөнән килгәнсе барыһын да эшләй, гимназия эргәһендә мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн төркөмдәр асып, бәләкәйҙән башҡортса белгән рухлы балалар үҫтереүҙе маҡсат иткәнбеҙ. Хәҙер йәш ата-әсәләр балаларына туған телде өйрәтеп үҫтереүҙең әһәмиәтен аңлай, улар беҙҙең мәктәпкәсә йәштәге балалар төркөмдәренә лә Стәрлетамаҡ ҡалаһының төрлө сиктәренән теләп йөрөй. Был балалар менән башҡорт телен яҡшы белгән тәрбиәселәр эшләй һәм башланғыс класс уҡытыусылары менән берлектә уртаҡ саралар, дәрестәр ойоштороп, ясленән үк үҙебеҙгә рухлы, телһөйәр уҡыусылар үҫтереп алабыҙ. Бына шул йәштә туған телгә һәм милли мәҙәниәткә, сәнғәткә ҡарата һалынған һөйөү, ҡыҙыҡһыныу бер ҡасан да юғалмай, артабан үҫә генә килә. Был инде гимназияның тағы бер изге маҡсаты - милли кадрҙар әҙерләүгә лә булышлыҡ иткән төп нигеҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

БАШ ҠАЛАМ

# КҮҢЕЛГӘ ЯТЫШЛЫ УЛ...

**Республикабыҙҙың йөҙөк ҡашы - Өфө тураһында күп фекерҙәр булды гәзит битендә һәм әле лә донъя күрә. Уларҙың барыһын да иғтибар менән уҡып барам һәм үҙемдең күҙәтеүҙәрем менән дә уртаҡлашырға булдым.**

Эшем буйынса республика буйлап та, ил буйлап та йыш йөрөргә тура килә. Был эш сәйәхәттәре барышында мотлаҡ ваҡыт табып, ҡалалар менән танышып сығам. Уларҙың төрлөләре бар: ҙурҙары, бәләкәйҙәре, матурҙары, төҙөк һәм төҙөкләндереүҙе талап иткәндәре һәм башҡалар. Өфөнө башҡа ҡалалар менән сағыштырып ҡарайым да, уның күпкә яҡшыраҡ икәнлеген аңлайым.

Ҡаланың дөйөм мөхите яҡшы. Шулай уҡ һуңғы йылдарҙа ҡала ҙур тиҙлек менән үҫә, ҙурая, киңәйә. Шәхсән минең өсөн ҡала юлдарында иҫке, бысраҡ ПАЗ-дар урынына ҙур, бөтә уңайлыҡтары булған, бер төрлө стилдәге автобустарҙың йөрөй башлауы ҡыуандыра. Салондарында хатта телефонға зарядка йыйҙырыу өсөн махсус ҡорамалы булған йылы автобустар өфөләр һәм ҡала ҡунаҡтары күңеленә хуш килеүенә шик юҡ. Ә ябыҡ автобус туҡталҡалары ниндәй уңайлыҡтар булдыра пассажирҙар өсөн! Транспортты ҡышын йылы, йәйен елләткесе эшләп торған туҡталҡаларҙа көтөүе күпкә яҡшыраҡ. Ошондай уҡ туҡталҡаларҙы трамвай пассажирҙары өсөн эшләгәндә лә яҡшы булыр ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЙӘШ ЯРЫМҒА ТИКЛЕМ...

**Рәсәй Президенты "Рәсәй Федерацияһы Хеҙмәт кодексының 256-сы статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" Федераль законға ҡул ҡуйҙы.**

Ғәмәлдәге закон буйынса бала менән отпускыла булған атай йәки әсәй эшкә сыҡҡан осраҡта 1,5 йәшкә тиклемге балаһына пособие бирелмәй, ярты ставкала йәки өйҙә эшләгән осраҡта ғына түләнә. Яңы законға ярашлы, 1,5 йәшкә тиклемге балаһы булған әсә эшкә сыҡҡан осраҡта пособие түләнәсәк. Үҙгәрештәр шулай уҡ ауырлы ваҡытта, декретта саҡта ойошма юҡҡа сыҡҡан өсөн эштән киткән ҡатын-ҡыҙҙарға ла ҡағыла. Айлыҡ пособиены 1,5 йәш тулмаған балаһы менән өйҙә ултырғанда дистанцияла эшләгән әсәләрҙең дә алыуы ҡарала.

Документҡа ярашлы, айлыҡ пособиены балаға йыл ярым тулғансы шулай уҡ сит илдәрҙә Рәсәй Федерацияһы хәрби формированиеларының граждан вазифаларында эшләгән әсәйҙәр һәм атайҙар ҙа алырға хоҡуҡлы буласаҡ. Бындай хоҡуҡ шулай уҡ контракт буйынса хәрби хеҙмәт үткән, эске эштәр органдары, милли гвардия ғәскәрҙәре, дәүләт янғынға ҡаршы хеҙмәтенең рядовой һәм етәксе составында хеҙмәт иткән ата-әсәләргә, енәйәт-башҡарыу системаһы учреждениелары һәм органдары, РФ мәжбүри башҡарыу органдары, таможня органдары хеҙмәткәрҙәренә лә ҡағыла.

12+

***✓ Ҡабатлау таблицаһын пенсия йәшендәге кешене уятып һораһаң да дөрөҫ яуап бирә, ә хәҙерге балалар бик ауыр ятлай, ятлаһа ла нишләптер онота. Шул телефонға артыҡ ныҡ ышаныуҙан түгелме икән был?***



БАШ ҠАЛАМ



# КҮҢЕЛГӘ ЯТЫШЛЫ УЛ...

**(Башы 1-се биттә).**

Күпләп юлдар төҙөкләндерелә, яңы күперҙәр эшләнә. Әле генә бына Зинин юл үткәргесе буйлап хәрәкәт асылды. Уны халыҡ күптән көтә ине. Был юлда ике сәғәттән ашыу тығында ултырыуҙары тураһында ишетә-күрә йөрөнөк. 1850 метр оҙонлоҡтағы юл үткәргесе менән дүрт һыҙатлы яңы юл Нуғай шоссеһында автомобиль хәрәкәтен һиҙелерлек бушатасаҡ, автомобилистарға был йүнәлештән, тимер юлды кисмәйенсә сығыры мөмкинлек бирәсәк, тимәк, был участкала юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген арттырасаҡ, тиҙәр. Шулай булһын! Шулай уҡ оҙаҡламай асыласаҡ Көнсығыш тоннеле лә баш ҡала өсөн ҙур уңыштарҙың береһе.

Ҡайһы берәүҙәр ҡалала күпләп сауҙа комплекстары төҙөләүҙе хупламай, ләкин мин был фекер менән килешмәйем. Бындай үҙәктәр бары тик сауҙа алып барыу эшмәкәрлегенә генә йүнәлтелмәгән. Мәҫәлән, ундай ерҙәрҙә күпләп балалар өсөн үҙәктәр һәм түңәрәктәр, уйын бүлмәләре эшләй, тимәк, уларҙың рухи һәм физик үҫеше өсөн шарттар булдырыла.

Ҡалала мәҙәни тормош гөрләп тора. Концерт, спектаклдәр күпләп ҡуйыла, төрлө музейҙар һәм башҡа мәҙәни усаҡтар эшләй, Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан да гастролдәр килә. Илдең төрлө төбәктәрендә йәшәгән дуҫтарым фекеренсә, төрлө телдәрҙә ижад иткән коллективтарҙың күп булыуы Өфөгә һәм, ғөмүмән, республикаға мәртәбә өҫтәй. Мәҙәниәт кеше өсөн ҙур әһәмиәткә эйә, сөнки ул дәртләндерә, йәшәйеште сағыуыраҡ итә, рухи көс бирә. Шуға күрә Өфөбөҙҙә мәҙәни усаҡтар артабан да уңышлы эшләһен, тигән теләктә ҡалам.

Баш ҡаланың тағы ла бер өҫтөнлөгө - төрлө өлкәләге эш урындарының күп булыуы. Теләге булған һәр кем үҙенең һөнәри кимәленә тура килгән эш урыны таба ала, сөнки Өфөлә ҙур ойошмалар ҙа бар, шәхси компаниялар ҙа бихисап.

Һаулыҡ - ҙур байлыҡ икәнлеген күҙ уңында тотоп һүҙ йөрөткәндә лә Өфөбөҙгә һүҙ тейҙерерлек түгел. Ҡалала дәүләт дауаханалары ла, шәхси медицина үҙәктәре лә бихисап һәм унда үҙ эштәрен яҡшы белгән табиптар эшләй. Әгәр ҙә шулай булмаһа, илдең башҡа төбәктәренән һаулыҡтарын нығытыу өсөн Өфөгә килерҙәр инеме ни? Был да Өфөнө тағы ла бер баҫҡысҡа юғарыға күтәргән яҡшы күрһәткес.

Өфө - минең яратҡан ҡалам һәм нәҡ ошонда йәшәүемә ифрат шатмын. Миллионлы ҡала булыуына ҡарамаҫтан, ул ыҡсым, күркәм, тәү күреүҙән күңелгә ятышлы ҡала.

**Ринат АҠНАЗАРОВ.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ҠУРҠҠАНҒА ҠУШ КҮРЕНӘ

**...Иҫкесә Яңы йыл иртәһе шаңҡыуҙан башланды. Таң менән уянғас та телефонға йәбешеп, тәүҙә ваҡытты, унан һауа торошон, артабан яңылыҡтарға күҙ йүгертеп сығырға ғәҙәтләнгәнбеҙ. Әллә ни борсолорлоҡ хәбәрҙәр булмаһа, еңел һулап, шөкөр итеп ҡуйбыҙ ҙа - яңы көн башлана. Ә яңы көндөң тыуыуы яҡшылыҡҡа, изгелеккә, ҡыуаныстарға өмөт өҫтәгәндәй.**

Был тойғолар айырыуса танһыҡ, һағындырҙы бөгөн. Инде бөгөн, бөгөн булмаһа, иртәгә ниндәйҙер сиселеш булыр донъя хәлдәрендә, йорт-илебеҙгә именлек килер, ковид, грипп, пневмониялар йәйлап юҡҡа сығыр, иркен һулар көндәр башланыр, күңелдән ҡурҡыу китер, тип өмөтләнәһең көн дә... Ләкин бөгөнгө хәбәрҙән тағы йөрәк ҡысылды, ҡалҡып килгән ҡояш томаланды кеүек: һәләкәт һаны буйынса тажзәхмәттән 20 тапҡырға зәһәрерәк, әлегә булмаған, әммә тоҡанып китеүе ихтимал ниндәйҙер "X сире" тип аталған абстракт патоген хаҡында кемуҙарҙан яҙып яталар яңылыҡтар таҫмаһында. Был ни хәл булыр? Был мәсьәлә хатта ки 15-19 ғинуарҙа Давоста булып үткән Бөтөн донъя иҡтисад форумының көн тәртибенә лә ҡуйылған хатта: "X сире"нә әҙерлек. Форум сессияһы бөтөн системаларҙы, шул иҫәптән һаулыҡ һаҡлау өлкәһенең тотороҡлоғон тәьмин итеүгә бағышлана. Унда әлегеләй эпидемия көрсөгө төрҙәренә ҡаршы тороу саралары буйынса фекер алышыу була, тип хәбәр ителгәйне. Осрашыуҙы алып барыусылар сифатында Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы директоры Тедрос Гебрейесус, Бразилияның һаулыҡ һаҡлау министры, Британияның Astrazeneca фармацевтика компанияһы идараһы рәйесе Мишель Демаре ҡатнашты.

Әйтеп кителеүенсә, "X сире" әлегә билдәһеҙ патоген, уның пандемия йә булмаһа эпидемия сәбәпсеһе булып китеүе ихтимал, имеш. Әлегә Конгола ауыҙынан, танауынан, ҡолағынан ҡан китеүсе бер генә ҡатын геморрагик биҙгәккә оҡшаш ошондай билдәләр менән дауаханаға һалынған, тип хәбәр итә MKRU сайты. 1976 йылда Эбола вирусын асыусы профессор Жен-Жау Тамтуф яңы билдәһеҙ йоғошло сир хаҡында иғлан итте. Ғалим фаразлауынса, "X сире" тигән шартлы атама бирелгән был патоген Эбола менән COVID-19-ҙың үҙенсәлекле берләшмәһе. Дөрөҫ, Эболаны асыусы профессор, ғөмүмән, "икс сире"нең барлығына үҙе ышанып та етмәй, әлбиттә. Шуныһы ғәжәп: ошо хәлдә лә уның бөтөн кешелекте үҙенең хәүефле фаразы менән шаҡ ҡатырыуы етмәгән, яңы вирус пандемияһы донъяны баҫып алыуы мөмкин, тип тәкрарлай.

Ә бына Алыҫ Көнсығыш федераль университетының Халыҡ-ара биологик хәүефһеҙлек үҙәге етәксеһе Михаил Щелканов "яңы вирус" сәбәпле тыуҙырылыусы янауҙарҙы алармизм, тип атай, йәғни, халыҡ теленә күсергәндә, был "ҡурҡҡанға ҡуш күренә" тигәнде аңлата. Конголағы яңы вирус төрөндә бер ниндәй ҙә яңылыҡ юҡ, ти Рәсәй ғалимы. Уның фекеренсә, Африкала асыҡланған яңы сир тәбиғи сығанаҡлы вирус төрөнә ҡарай. Бындай патогендар кеше ҡатнашлығынан тыш тарала. Эксперт 1918 йылда "испанка" атамаһы алған ҡош киҙеүе вирусын иҫкә төшөрә. Уның фекеренсә, 20-се быуатта булып үткән бөтөн грипп эпидемияларының да сығанағы - ҡош киҙеүе; тимәк, ти ул, коронавирустың сәбәпсеһе ярғанаттар, имеш. Ә бит тажзәхмәттең кеше факторы, йәғни йәшерен биолабораторияларҙа эшләп сығарылған вирус штамдары хаҡында ниндәй генә фаразлар, хатта раҫлауҙар булманы!

Давоста яңы вирус мәсьәләһен - әлегә булмаған, раҫланмаған "сир"ҙе тикшереүселәрҙең һаман да шул кешелек йөрәгенә хәүеф һалып, вәсвәсә һатыусы Гебрейесус менән Бөйөк Британияның биофармацевтика компанияһы хужаһы кеүек финанс йәһәтенән ҡыҙыҡһыныусыларҙың ҡатнашыуы үҙе үк шикле "эшмәкәрлек" булып тойола. Ни өсөн тигәндә, уларҙың осрашыуында яңы пандемияларҙы өйрәнеүсе донъя ғалимдары һәм эксперттарының ҡатнашыуы ҡаралмаған. Роспотребнадзор фекеренә ҡарағанда, "икс сире" хаҡындағы нигеҙһеҙ белдереүҙәр сит илдәрҙең эре фармацевтика компаниялары файҙаһына инвестицияны арттырыу маҡсатын ҡайғырта. Роспотребнадзор белдереүенсә, Рәсәйҙә телә ниндәй биологик янауҙарға ла ҡаршы тора алырлыҡ саралар бар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# АТА-ӘСӘ АҢЛАЙ

**(Башы 1-се биттә).**

Икенсе борсоған күренеш, ул да булһа, бөтәһенең дә телефондарҙан, компьютерҙарҙан айырыла алмауы, интернетка һалышыуы. Был бик уңайлы, әлбиттә, барлыҡ эшебеҙҙе телефон ярҙамында ғына хәл итәбеҙ, шунда бөтә мәғлүмәт тупланған. Уҡыусыларға ла дәрестә телефон ҡулланыуҙы тыйып, йыйып алһаң да, сумкаларында икенсе-өсөнсө запас телефондары ятыуы ихтимал. Телефонды дәрестә ҡулланыуҙы тыйған яңы федераль закон был мәсьәләлә эшебеҙгә асыҡлыҡ индерер, тип өмөтләнеп торабыҙ. Сөнки дәрестә генә түгел, өйгә эш әҙерләгәндә лә ҡайһы бер бала тиҙ арала интернеттан яуабын таба һалып, күсереп эшләп ҡуйыуы ихтимал. Был рәүешле улар уҡытыусыны түгел, тик үҙҙәрен генә алдай. Төплө белем алам тигән кеше улай итмәй, тик быны балаларҙың барыһы ла йәшене күрә аңлап етмәүе ихтимал. Ҡайһы бер уҡыусы шундай уйҙа: "Быны ни өсөн ятлап йәки уҡып торорға ти, кәрәк саҡта телефонды асам да ҡарайым". Үҙҙәренсә шулай уйлайҙар, тик тормошта гел генә телефондан ҡарап йәшәп булмай бит, яҡшыны насарҙан айырыу өсөн фекерләй белеү, үҫеш өсөн уҡырға, баш мейендә эшләтергә кәрәк. Бына шул даими рәүештә телефонға һылтаныу баланың фекерләү ҡеүәһенә, хәтеренә уғата насар йоғонто яһай.

Педагогик кәңәшмәләрҙә йыш ҡына уҡыусыларҙың хәтере насарайыуын телгә ала коллегалар. Оҙаҡ йылдар эшләгән уҡытыусылар алдараҡ уҡыған быуын балалар менән сағыштырып та, аптырау ҡатыш уйланыуға ҡала. Мәҫәлән, ҡабатлау таблицаһын берәй пенсия йәшендәге кешене йоҡоһонан уятып һораһаң да дөрөҫ яуап бирә ала, ә хәҙерге балалар бик ауыр ятлай, ятлаһа ла күпмелер ваҡыттан нишләптер онота. Шул телефонға артыҡ ныҡ ышаныуҙан түгелме икән был? Енелгә өйрәнеп, баштарын эшләтергә теләктәре юҡтыр, ахыры. Юғары кластарға еткәс, быуның насар әҙемтәһен аңлайҙар улар үҙҙәре лә, шуға уртансы кластарҙа уҡыған саҡтағы арауыҡты үткәреп ебәрергә ярамай. 5-8-се класҡа тиклемге арауыҡта балаға айырыуса иғтибар бүлергә, аңлатыу эше алып барырға, төрлө әүҙемлектәргә йәлеп итергә кәрәк.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда беренсе тапҡыр сәнәғәт умартасылары халыҡ-ара съезы үтә. Унда ғалимдар, профилле умартасылар, экологтар, депутаттар ҡатнаша. Рәсәйҙең 20 төбәгенән килтерелгән умартасылар инвентары һәм техникаһы күргәҙмәһе был форумдың төп сараларының береһе. Шулай уҡ ошондай форумдар февралдә Краснокама, Күгәрсен, Иглин райондары территорияларында ла ойоштороласаҡ. Башҡорт балы брендын таратыу маҡсатында августа баш ҡала бал фестивале уҙғарыу ҙа ҡаралған.

✓Анна Карабанова рәсми рәүештә Благовещен районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Ул уҙған йылдың көҙөнән, элекке башлыҡ Олег Голов тәүҙә Дәүләт Йыйылышында, һуңынан Федерация Советында эшләй башлағас, ваҡытлыса етәксе вазифаһын башҡарҙы. 2019 йылдың октябренән Анна Карабанова бизнес-шериф, Благовещен районы хакимиәте башлығының иктисад һәм эшҡыуарлыҡ буйынса урынбаҫары булып эшләне.

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республика етәксеһе Радий Хәбиров Вито Сабировтың Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнеүе тураһында хәбәр итте. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ведомство етәксеһе Яна Гайдук үҙ теләге менән вазифаһын ҡалдырҙы.

✓"Иң яҡшы муниципаль тәжрибә" Бөтөн Рәсәй конкурсы һөҙөмтәләре буйынса, илдең 33 төбәгенән 49 муниципаль берәмек призлы урынға сыҡҡан. Улар араһында Башҡортостандан Октябрьский, Учалы, Стәрлетамаҡ ҡалалары һәм Асҡын районының Ҡашҡа ауыл советы төрлө номинацияларҙа еңеп сыҡты. Республикаға бүленәсәк 82 млн һум аҡсаны еңеүсе муниципалитеттар матди-техник базаны нығытыу өсөн ҡуллана ала.

✓2023 йылда Башҡортостандың урман фондына 64 млн һумлыҡ зыян килтерелгән, тип белдерә "Росприроднадзор" башлығы Светлана Радионова. Былтыр законһыҙ урман ҡырҡыу тураһында 96 енәйәт эше ҡуҙғатылған һәм республикала бындай енәйәт эштәре 1,8 тапҡырға артҡан. Ғәйеплеләр килтерелгән зыянды ҡапларға тейеш, улар шулай уҡ РФ Енәйәт кодексының ике статьяһы буйынса яуап бирәсәк.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ЯРҘАМ КИЛЕРМЕ?

**Һуңғы осор Украинаның "бағыусылары" тарафынан Киев проблемаларына мөнәсәбәттең һыуына төшөүе Зеленскийҙы сығырынан сығара: Украина эшмәкәрҙәре лә, уларҙың Көнбайыш ҡурсалаусылары ла бер ни тиклем паника хәлендә, ти хәрби эксперт, РФ Эске эштәр министры кәңәшсеһе, генерал-майор В.Овчинский.**

Рәсәй менән хәрби бәрелештең Украина өсөн, йомшаҡ итеп әйткәндә, уңышһыҙ боролош алыуын хәҙер Украинала ла, Көнбайышта ла яҡшы аңлайҙар. АҠШ Дәүләт департаменты башлығы Мэттью Миллерҙың белдереүенсә, АҠШ хакимиәте лә Киевҡа хәрби ярҙам йәһәтенән 2022-2023 йылдарҙағыса йомартлыҡ күрһәтергә йыйынмай. The Guardian баҫмаһы авторы Петр Зауэр үҙенең мәҡәләһендә, Рәсәй тарафынан ракета һөжүменең әүҙемләшеүе Украинаны ниндәй киләсәк көтөүе хаҡында күңелһеҙ уйҙарға һала, тип яҙа. Лондондың Короллек институты аналитика үҙәге Украина контрһөжүменең уңышһыҙлыҡҡа дусар ителеүе сәбәптәрен энәһенән ебенә тиклем теҙеп һанап сыҡты ла инде. Әммә НАТО башлығы урынбаҫары Мирча Джоане иһә Украина конфликтының әле генә тамамланмаясағына иҫәп тотоуын һәм блок тарафынан Киевҡа ярҙамдың туҡтатылмаясағын белдерҙе. Хәйер, был аңлашыла ла. "Проблема Украинала түгел, ә Украина ҡулдары менән Рәсәйҙе юҡ итергә маташыусыларҙа. Бына проблема нимәлә. Ләкин уларҙың был маҡсаты барып сыҡмаясаҡ", - тигәйне В. Путин 1 ғинуарҙа Вишневский исемендәге госпиталдә дауаланыусы хәрбиҙәр менән осрашыуында.

Зеленскийҙың белдереүенсә, Украина яҡын арала хәрби кампанияны туҡтатырға йыйынмай. Ул ғына ла түгел, уға яҡын сығанаҡтар мәғлүмәттәре буйынса, Зеленскийҙың командаһы Рәсәйгә ҡаршы ике ҙур яһиллыҡ ҡылырға әҙерләнә, имеш. Беренсеһе - үҙ территорияны ҡарамағындағы ҡалаларҙа ҡыйралыш ойошторол, быны Рәсәйгә япһарырға һәм икенсенән, Рәсәй ҡалаларында емергес террористик акттар булдырыу планы. Быйын менән ул, йәнәһе, Көнбайыштың "кайнар һөйөүен" һәм ҡурсалауҙарын яңынан ҡайтармаҡсы, тип яҙа Запорожьеның "Беҙ - бергә" йәмәғәт хәрәкәте башлығы Владимир Рогов.

Джо Байдендың салланған башы яңы яһиллыҡтар уйлап ҡайнай: Израиль менән Палестина бәрелешен файҙаланып, ул хәрби конфликты артабан Яҡын Көнсығыш тарафына йәйелдермәксе. Ҡайҙа ғына оронһа ла, ошондай яһиллыҡҡа ҡоролоп, башҡалар ҡулы менән "сәйәсәт" яһаусы АҠШ властары өсөн был оятһыҙ һәм күнегелгән шөғөл. Бына быны ысын мәғәнәһендә хәсәт тимәй ни тиһең инде! 12 ғинуар төнө АҠШ Бөйөк Британия менән берлектә Йәмендағы 16 хуситтар ("Ансар Аллаһ" хәрәкәте төркөмө) объектына бомба яуҙырҙы. Был акт "Ансар Аллаһ" төркөмөнөң Израилгә һәм уға ярҙам итеүсе илдәргә яуап рәүешендә уларҙың Ҡыҙыл диңгеҙ аша йөрөүсе хәрби караптарына ҡарата 27 тапҡыр башҡарылған һөжүме өсөн Американың ҡон ҡайтарыуы тип аңлатыла. Әйткәндәй, 12 декабрҙә үк әле БМО Израилдән Газаға ҡаршы һуғышты туҡтатыуын талап иткән резолюция сығарғайны һәм уны яҡлап, ойошманың 153 вәкиле тауыш бирҙе. Ә ҡаршылар кем тип уйлайһығыҙ? Әлбиттә, АҠШ һәм уның 9 эйәрсәне. Был тауыш биреүҙән бөтөн донъя кимәлендә Израилгә ҡаршы фекерҙәштәрҙең арта барыуын асыҡ сағылдыра. Президент Джо Байдендың да электораты араһында ризаһыҙлыҡтар арта бара, сөнки уның Газа секторындағы башбаштаҡлыҡтар сәбәпсеһе Нетаньяху менән әшнәлеге ғәфү итерлек хәл түгел. Шуға күрә лә Израиль агрессияһын ауыҙлыҡлауҙа булышлыҡ күрһәтмәһә, күптәр быйыл ноябрҙә буласаҡ президент һайлауҙарында Байден өсөн тауыш биреүҙән баш тартасаҡтарын белдерә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!

**Яңы йортҡа, фатирға күскәндә һәр кем яҡты өмөттәр менән аяҡ баҫа: яҡшыраҡ йәшәр өсөн пландар ҡора, яңы белем алырға, тормошон үҙгәртергә хыяллана.**

Минең күршем дә элекке тормошонан ваз кисеп күскән булған беҙҙең йортҡа. Фатирының ишеген асып торғанда тап иттем уны. Ҡара сәсле, ҡара ҡашлы булғанға уны башҡорт тиеп уйланым һәм башҡортса иҫәнләштем. Ул тыйнаҡ ҡына йылмайҙы ла урыҫса яуап бирҙе. Ошо йылмайыуы күңелемдә йәйғор төҫтәре уятты ла инде. Мин дә икенсе тормош башлар өсөн был ҡалаға яңыраҡ ҡына күсеп килгән кешемен. Бер кемде лә белмәйем тиерлек.

Тик иртән иртүк эшкә сығып китеү, һуң ҡайтыу сәбәпле, күршемде оҙаҡ ҡына ваҡыт осрата алмай йөрөнөм. Ял көндәрендә күберәк атай-әсәй янына ҡайтырға, икенсе ҡалала йәшәгән бәләкәй улым янына барырға тырышам.

Шулай бер көн эштән ҡайтып, ашарға ултырырға ғына йөрөнәм, ишек туҡылдатҡан һымаҡ булдылар. Минең бында йәшәгәндә бер кем дә белмәй, яңылыш ишетелгәндер, тинем дә, тәрилкәмде алып, телевизор янына барып ҡына ултырғайным, туҡылдатыу тағы ҡабатланды. Барып асһам, теге ҡара ҡашлы күршем тора. "Ғәфү итегеҙ, минең ҡыҙыма башҡорт теленән өйгә эш эшләргә ярҙам итеп ебәрмәҫһегеҙме икән?" - тине ул.

Шулай танышып киттем күршем һәм уның ҡыҙы менән. Аҙнаһына бер тапҡыр йә улар минә, йә мин уларға инеп, башҡорт теленән дәрес эшләнек. Һөйләмдәр төҙөнөк, тәржемә иттек, диктант яҙҙыҡ. Өсөнсөлә уҡыған ҡыҙыҡай өйгә эш менән генә мәрхәтһенмәне: һүрәттәргә ҡарап, инша яҙырға ятатты. Ул яҙа, мин тикшерәм, хатта билдә лә ҡуям. Ә бер көндө ул минән башҡортса һөйләшергә өйрәтеүемде үтенде. Ярты йыл тирәһе дәреслектәрен ҡарап, ундағы күнегеүҙәр, тәржемәләр менән баланы башҡортсаға өйрәтеп булмауын аңлағайным инде. Башҡорт теле дәресенең маҡсаты ошо бәләкәс ҡыҙҙарҙы һәм малайҙарҙы башҡортса һөйләшергә өйрәтеү түгелме икән ни, тип аптырай башлағайным. Дәрес әҙерләгәндә гел генә эргәлә ултырған әсәһе лә ҡыҙының тәкдименә ҡушылды:

- Әйҙә, тик башҡортса ғына һөйләшәйек! - тине.

Тәүҙә вата-емерә, һуңынан апаруҡ тәҙөк кенә итеп, көләшә-шаяра башҡортса һөйләшә башланылар.

Тап ошо башҡорт теле аша беҙҙең арала бер-беребеҙгә йылылыҡ, хөрмәт уянды һәм ике йылдан беҙ бер ғаиләбулып йәшәй башланыҡ. Өйҙә тик башҡортса ғына һөйләштек. Тиҙҙән әҙәби китаптарҙы ла уҡый башланы ҡыҙ. Олимпиадаларҙа еңеүсе булды, тәүге никахтан тыуған улымдың иң яҡын кешеһенә әйләнде. Улар хәҙер икеһе лә ҙур үҫте инде. Башҡортса һөйләшәләр, мәркәҙдә уҡып йөрөйҙәр. Ҡайтҡан саҡтарында туған телдең ҡулланыу даирәһен нисек үҫтерергә икән тип фекер алышҡандарын ишеткәнем бар.

Мин башҡорт теле уҡытыусыһы түгел, әммә балалар бәләкәйҙән үк башҡортса телмәрҙе ишетеп үҫергә тейешлеген беләм. Быныһ өсөн мультимедия йүнәлешен үҫтерергә кәрәк. Югиһә, теле туған телдә асылһа ла, кескәйҙәр йәнһүрәт ҡарап, уны онота. Баланың аң-фекерҙе үҫтереүсе уйындарҙы тап үҙ телендә алыуы яҡшыраҡ. Башҡорт телен өйрәнеү буйынса ютуб-каналдар булдырыу мөһим. Шул сағында уларҙа телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуыр һәм "Әйҙәгеҙ, башҡортса ғына һөйләшәйек!" - тип әйтеүселәр күберәк булыр!

**Өлфәт СӘМИҒУЛЛИН.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ УЙЫНДАРҘЫ...

**Былтыр "Академик инициативаларға ярҙам итеү үҙәге" автономлы коммерция булмаған ойошмаһының (директоры социология фәндәре кандидаты А. Кәримов) "Башҡорт халыҡ уйындарына өйрәтеүсе видеороликтар" проекты БР Башлығы гранттары фондынан ярҙам алғайны.**

Был грантты тормошҡа ашырыуҙа Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының этнология бүлеге хеҙмәткәрҙәре - тарих фәндәре кандидаттары Ю. Әбсәләмова, Э. Миңһранова, Р. Баязитова, география фәндәре докторы А. Псәнчин ҡатнашты. Хәҙерге балалар һәм үсмерҙәрҙең тормошона гаджеттарҙың әүҙем үтеп инеүен инҡар итә алмайбыҙ. Уларҙың иһә баланың сәләмәт булып үҫеүенә булышлыҡ итмәүен дә беләбеҙ. Шуға ла йәш быуында халыҡ уйындарына ҡыҙыҡһыныу уятыу, улар аша гармониялы физик һәм менталь үҫеш тәьмин итеү маҡсатынан башлангайны был эш. Бөгөн халыҡ уйындарына бөтөнләй иғтибар булмаһа ла, борон-борондан тап ошо уйындар баланы тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнаған. Бер яҡтан, уларҙа мөһим мәҙәни кодтар йәшеренгән, икенсе яҡтан, уйын шәхесте төрлө яҡтан үҫтерергә - таҫыллыҡ, тиҙлек, мәргәнлек, зирәклек, фаразлау, хыяллана белеү тәрбиәләгән.

Проект сиктәрендә бер нисә сара ойошторолдо. "Уфимскийтракт" документаль фильмдар студияһы булышлығында башҡорт уйындары буйынса 10 дәрес видеоролик төшөрөлдө. Уларҙа 122-се Башҡорт гимназияһы уҡыусылары ҡатнашты, директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Илсиә Дилмөхәмәт ҡыҙы Ғарифуллина ныҡ ярҙам күрһәтте. Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусылары ла видеороликтарҙа төштө. "Атайсал" мәҙәни үҙәгенең художество етәксеһе Зилә Мәһәр ҡыҙы Лира ярҙамында "Биш ашыҡ", "Ямғыр таш" кеүек онотолоп бөткән уйындар тергеҙелде. Былarҙан тыш, балалар коллективтары араһында башҡорт уйындарына видеоҙмалар конкурсы барҙы. Республиканың төрлө төбәктәренән 175 гариза килде, 77 уйынды мәктәп уҡыусылары, 52-һен балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәре ебәрҙе, Ырымбур өлкәһенән дә ҡатнашыусылар булды. Коррекция учреждениелары тәрбиәләнеүселәре ҡатнашлығында 23 эш алдыҡ. Һөҙөмтәлә, башҡорт уйындары мәҙәниәтен тергеҙеү бөгөнгө көндә бик әһәмиәтле икәненә төшендек. Шулай уҡ социаль селтәрҙәрҙә проектҡа арналған махсус бит тә булдырылды.

**Эльза МИҢҺРАНОВА, тарих фәндәре кандидаты.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда халыҡты социаль яҡлау дәүләт программаһы яңыртылды. Уның төп маҡсаты - ғаилә институтын нығытыу, профилле дәүләт хеҙмәттәре эшмәкәрлеге кимәлен һәм халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү өлкәһе сифатын күтәреү. Документта ғаиләлә бала тыуыуға бәйле финанс ярҙам күрһәтеү, етемдәргә һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы, өлкәндәргә һәм инвалидтарға иғтибар арттырыу кеүек мәсьәләләр телгә алынған.

✓Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы ҡотҡарыусылары Иглин районының Ясная Поляна ауылы боролошо янында йылыныу пункты асты. Бынан тыш, Туймазы районында Р-240 һәм М-5 трассаларында Башҡортостан Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының оператив төркөмдәре эшләй. Унда Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетынан мобиль йылыныу пункттары ојатылған, уларҙың берәүһе - Мәләүеҙҙең урау юлына.

✓Белорет районының олимпия резервындағы спорт мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Полина Коноплина ҡаяға үрмәләү буйынса Бөтә Рәсәй ярыштарында бронза призер булды. Был хаҡта республиканың Спорт министрлығы хәбәр итә. Турнир Воронежда уҙҙы. "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына билдәле булыуынса, Полина Коноплина 18-19 йәшлек спортсылар араһында боулдеринга (төрлө ҡатмарлыҡтағы ҡыҫҡа трассалар буйлап үрмәләү) өсөнсө урынды алды.

✓Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ ширҡәттәренә республика ҡаҙнаһынан Башҡортостан Башлығы грантына ғаризалар ҡабул ителә. Һайлап алыу 2024 йылдың 1 февраленә тиклем бара. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса һайлап алынған иң яҡшы 10 баҡсасылыҡ ширҡәтенең һәр береһенә 500 мең һумлыҡ грант бирелә. Һайлап алыуҙа ҡатнашыу өсөн документтар менән заявканы Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығына тапшырырға кәрәк. Адресы: Пушкин урамы, 106, 321-се бүлмә.

✓Башҡортостан спортсыһы Эдуард Латипов биатлон буйынса Рәсәй чемпионатында көмөш миҙалға лайыҡ булды. Был хаҡта Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов социаль селтәрҙә хәбәр итте. Ярыштар 14 ғинуарҙа Пермь крайының Чайковский ҡалаһында үтте.

ҠЫҪҠАСА

# ҒАИЛӘЛӘР ЯРЫША

**Башҡортостанда "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" асыҡ республика конкурсына ғаризалар ҡабул ителә.** Конкурс Башҡортостан һәм Рәсәйҙең башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәре халҡы араһында башҡорт халҡының мәҙәниәтен, туған телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын һаҡлаған һәм үҫтергән өлгөлө ғаиләне асыҡлау һәм ғаилә институтын нығытыу өсөн ойоштоола. Конкурс өс номинацияла үткәреләсәк: "Ғаилә ижады", "Ғаилә кәсебе", "Ғаилә традициялары һәм ҡиммәттәре" һәм муниципаль, зона, республика этаптарынан тора. Сараны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы; Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Стәрлетамаҡтағы бүлексәһе, Башҡортостан Республикаһының Халыҡтар дуҫлығы йорто, Стәрлетамаҡ хакимиәте ойоштора.

✓ **Башҡортостанда пилотһыҙ осоу аппараттарын сериялы етештереү үҫешә.** 2023 йылда республика предприятиелары меңдән ашыу БПЛА сығарһа, 2024 йылда тағы 4 меңгә яҡын етештереү көҙәллана. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республика Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев хәбәр итте. Шул уҡ ваҡытта пилотһыҙ осоу аппараттарын ҡулланыу өсөн инфраструктура ла үҫешә. 2026 йылда уларҙы ергә төшөрөп ултыртыу өсөн ике майҙансыҡ булдырыу күҙаллана, 2030 йылға был һан 10-ға етергә тейеш. Сибайҙа һәм "Первушин" аэродром комплексында, шулай уҡ дронопорттар майҙансыҡ булып хеҙмәт итергә мөмкин. Уларҙы ҡулланыу өлкәһе лә киңәйә. Пилотһыҙ аппараттар ярҙамында гербицид һибеүҙе һынап ҡарағандар, барыуы ауыр булған райондарға медицина изделиеларын ташыу өсөн БПЛА файҙаланыу тураһында мәсьәлә өйрәнелә. Бынан тыш, республикала пилотһыҙ аппараттар флоты ярҙамында хеҙмәт күрһәтәсәк төбәк операторын булдырыу планлаштырыла.

✓ **Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙары ла Рәсәйҙең Оборона министрлығы менән махсус хәрби операция зонаһында хеҙмәт итеү өсөн контракт төҙөй.** Шундай ҡыйыу гүзәл заттарҙың береһе "Снайпер" позывнойлы хәрби - үҙенең подразделениеһында берҙән-бер ҡатын-ҡыҙ. Уның контракт буйынса хеҙмәт итеү тәжрибәһе бар. "Снайпер" элек сик буйы ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткән, уның профессиональ әҙерлеге махсус операция зонаһында ла бик кәрәк: яҡташыбыҙ эре тоннажлы "Урал" һәм хатта танктар менән оҫта идара итә. "Мин бер ҡасан да илдең төрлө төбәктәрендә йәшәгән балаларҙың хаттары беҙгә ышаныс, көс бирер тип уйламағайным: "Беҙ һеҙгә ышанабыҙ, барыһы ла яҡшы булыр!" - тигән һүҙҙәр бар унда. Быуна ошо балаларҙың киләсәге өсөн унда булырға тейешбеҙ", - тип "Снайпер"ҙың һүҙҙәрен килтерә Башҡортостан юлдаш телеканалы.

✓ **Башҡортостанда йөклө ҡатындарҙы, бала имеҙгән әсәләрҙе һәм өс йәшкә тиклемге балаларҙы бушлай аҙыҡ менән тәьмин итеү тәртибенә үҙгәрештәр индерелде.** Хәҙер документтарҙы Дәүләт һәм төбәк хеҙмәттәре порталы аша тапшырырға була, шулай уҡ уларҙы ҡарау ваҡыты 10 эш көнөнә тиклем ҡыҫҡартылған. Һөт кухняларын асыу тураһында ҡарар өс йыл элек Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбировтың тәҡдиме буйынса ҡабул ителде. "Һөт кухняһы" продукцияһын бушлай алырға хоҡуҡлылар исемлегенә 3 йәшкәсә балалар, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән имеҙгән әсәләр һәм йөклө ҡатындар, шулай уҡ махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләре инә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙОРТОНДО ГАЗ ЙЫЛЫТАМЫ?

**2027 йылға Башҡортостанда 181 ауылға газ үткәреү планлаштырыла. Республика Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәһендә ошо хаҡта яҙа. Уның һүҙҙәренсә, төп маҡсаттарҙың береһе - социаль объекттарҙы, шулай уҡ "Шүлгәнташ" музей комплексын зәңгәр яғыулыҡҡа тоташтырыу.**

"Башҡортостанда газ үткәреү кимәле юғары, әммә халыҡтың һорауҙары бар әле. Мин республика буйлап күп йөрөйөм, халыҡ йыш ҡына газ һуҙыуҙарын һорай. Беҙҙә "Газпром" менән 2027 йылға тиклем иҫәпләнгән программа бар. Уның буйынса 2021 йылдан 5 ҡасаба-ара газ үткәргес төҙөнөк, Мишкә, Күгәрсен, Балаҡатай һәм Мәсетле райондарында 10 ауылға газ үткәрҙек. Башҡортостанда 38 мең йорт биләмәһен газға тоташтырыу программаһы буйынса эш башҡарылды. Уны, хәтерегеҙгә төшөрөп үтәм, Рәсәй Президенты Владимир Путин тәҡдим иткәйне. Уның асылы - әгәр ауылға электән газ үткән булһа, йортҡа торбалар бушлай һуҙыла", - тип яҙҙы Хәбиров.

Башҡортостан Башлығы билдәләүенсә, газға тоташтырыу программаһы буйынса республикала 65,5 мең йортҡа газ һуҙыу мөмкинлеге бар. Ғаризаларҙың 52 меңе ҡабул ителгән дә инде."Ғаризаны Рәсәй Федерацияһының Берҙәм газ үткәреү операторы порталында, компанияның сайтында шәхси кабинетта һәм "Газпром газ бүлеү Өфө" берҙәм клиент үҙәктәрендә, күп функциялы үҙәк офистарында, "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында ҡалдырырға мөмкин", - тип асыҡлыҡ индерҙе республика етәксеһе. Бынан алдараҡ Радий Хәбиров урындағы ҡаҙанлыҡтарҙы газға күсереү эшен әүҙемләштерергә ҡушҡайны.

# БӘЙГЕ ЕҢЕҮСЕЛӘРЕ

**Ошо көндәрҙә Өфөнөң Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиадаға йомғаҡ яһалды. Унда Башҡортостандан, Силәбе, Ырымбур, Һамар өлкәләренән, шулай уҡ Татарстан Республикаһынан 9-11-се класс уҡыусылары ҡатнашты.**

Олимпиадала 77 уҡыусы призер булды, уларҙың һәр береһенә Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығының дипломы һәм аҡсалата приз тапшырылды. Бынан тыш, 11 уҡыусы "Аманат" журналының, Өфө фән һәм технологиялар университетының һәм Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фондының махсус призлары менән бүләкләнде. Төбәк-ара олимпиадала Силәбе, Ырымбур, Һамар өлкәләренән, Татарстандан 19 уҡыусы ҡатнашты. Улар араһынан еңеүселәр ҙә Мәғариф министрлығының дипломдарына, аҡсалата призларға һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының иҫтәлекле бүләктәренә эйә булды.Төбәк-ара олимпиада еңеүселәрен һәм призерҙарын Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева сәләмләне. Ул Дәүләкән, Бөрйән, Әбйәлил, Баҡалы, Өфө райондарынан, Сибай һәм Өфө ҡалаларынан 15 еңеүсегә ведомство наградаларын тапшырҙы.

Уҡытыу башҡорт телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары уҡыусыларынан Дәүләкән ҡалаһынан Сыңғыҙ Хәбиәхмәтов, Бөрйән районынан Илтимер Мырҙағолов, Сибай ҡалаһынан Әлмира Ҡаҙаҡбаева; уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары уҡыусыларынан Әбйәлил районынан Азалия Ғәлиуллина, Баҡалы районынан Миләүшә Дусиева, Өфөләге 2-се "СМАРТ" республика полилингваль күп профилле гимназияһынан Лиана Ҡарабаева еңеүсе булды.

# МЕТАЛЛ ҺЫНЫҠТАРЫН...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың ғинуарҙағы пленар ултырышында металл һыныҡтарын йыйыу һәм эшкәртеү буйынса компанияларға физик шәхестәр менән аҡсалата иҫәпләшеүҙе тыйған закон ҡабул итеү күҙаллана. Закон проектының беренсе уҡыуы октябрҙә үткәйне.**

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында билдәләүҙәренсә, металл һыныҡтарын йыйыу һәм эшкәртеү - иҡтисадтың мөһим секторы, ул сеймал ғына түгел, ҡалдыҡтарҙы эшкәртеүҙе лә тәьмин итә. Шул уҡ ваҡытта уның үҫеше ҡулаҡса әйләнешенә бәйле ҡыйынлаша: статистика буйынса, иҫәп-хисаптың 5 проценты ғына ҡулаҡсаһыҙ башҡарыла. "Тармаҡ компаниялары һыныҡ һатыусылар менән иҫәп-хисап өсөн ҙур күләмдә аҡса ала. Ул иһә аҡсаның йәшерен схемаларын үҫтереүгә этәргес бирә, был контроль органдарының һаҡлығын һәм банктарҙың ышанысын ҡаҡшата. Намыҫлы ҡатнашыусылар тармаҡ өсөн дөйөм репутация сығымдарын, шул иҫәптән ҡиммәтерәк банк хеҙмәтләндереүе рәүешендә, күтәрә. Физик шәхестәр менән иҫәп-хисап итеүҙән баш тартып, компаниялар кредиторҙар өсөн дә, контроль-күҙәтеү органдары өсөн дә аҡса хәрәкәтен асыҡ итә. "Күләгәләге" аҡса ағымын сығарыу тармаҡ үҫешенә булышлыҡ итәсәк", - тип белдерҙе Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев.

Уның фекеренсә, был законды ҡабул итеү металл һыныҡтарын килтереү йөнәтенән енәйәтселекте кәметәсәк. "Металл һыныҡтарын йыйыу пункттары сеймал һатып алыу менән ҡыҙыҡып, уның килеп сығышы тураһында уйламай, - тине Константин Толкачев. - Шуға күрә еңел аҡса эшләр өсөн яратыусылар унда зыярат ҡоймалары, канализация люктары, сүп-сар бактарын алып килә. Аҡсаны алғас, улар юҡҡа сыға, һәм юғалтыуҙы асыҡлағанда уларҙы яуаплылыҡҡа тарттырыу мөмкин түгел тиерлек. Ҡулаҡсаһыҙ иҫәп-хисап яһағанда бындай килешеүҙәр үҙ эҙен ҡалдырасаҡ. Шулай итеп, һатыусылар менән ҡулаҡсаһыҙ иҫәп-хисап алып барыу мөлкәтте урлауҙарҙы масштабын кәметеү өсөн дә файҙалы".

# АРАЛАР ЯҠЫНАЯ

**РИА Новости М-12 трассаһының схемаһын күрһәтте һәм Рәсәйҙең эре ҡалаларынан Мәскәүгә юл ваҡытын нисек ҡыҫҡартыуҙы иҫәпләп сығарҙы.**

Мәҫәлән, Өфөнән Мәскәүгә 4 сәғәткә тиҙерәк барырға мөмкин буласаҡ. "Восток"М-12 автомобиль юлы Европа - Көнбайыш Ҡытай халыҡ-ара транспорт маршрутына инә. М-12 Мәскәү - Ҡаҙан - Екатеринбург - Төмән автомобиль юлы Мәскәү, Владимир, Түбәнге Новгород өлкәләре, Сыуаш Республикаһы һәм Татарстан Республикаһы территорияһы аша үтә.

Быға тиклем маршруттың оҙонлоғо 800 км-ҙан ашыу булла тип фаразланғайны: яҡын арала был мәғлүмәт янырыласаҡ. Хөкүмәт ҡарарына ярашлы, трасса М-7 "Волга" Ҡаҙан-Дүртөйлә участкаһын уның составына индереү иҫәбенә оҙайтыласаҡ. Бынан тыш, М-12 составына төҙөлөп ятҡан Дүртөйлә-Әсет участкаһын, Р-242 Пермь-Екатеринбург автомобиль юлының Әсет-Екатеринбург участкаһын, шулай уҡ Р-351 Екатеринбург-Төмән трассаһын үҙ эсенә аласаҡ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө хакимиәте етәксеһе Ратмир Мәүлиев 2023 йыл йомғаҡтары буйынса Рәсәй төбәктәре баш ҡалалары мэрҙарының милли рейтингында 12-се урынды алды. Муниципалитетта хәбәр итеүҙәренсә, ҡала башлығы 2022 йыл менән сағыштырғанда үҙенең позицияларын дүрт баҫҡысҡа яҡшыртҡан. "Рейтинг" мәғлүмәт коммуникациялары үҙәгенең Рәсәй Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты менән берлектә әҙерләгән тикшереүенә илдең 88 ҡалаһы башлығы ингән. Бынан алдараҡ Башҡортостан төбәктәрҙең фәнни-технологик үҫешенең милли рейтингы лидерҙары иҫәбенә ингәйне.

✓Өфөлә Балалар онкологияһы һәм гематологияһы үҙәге асыла. Яман шеш, ауыр гематологик сирҙәр менән яфаланған балалар өсөн бында юғары технологиялы медицина ярҙамы күрһәтеләсәк, шул иҫәптән юғары дозалы химия терапияһы, елек күсереп ултыртыу кеүек ҡатмарлы операциялар яһаласаҡ. Молекуляр-биологик тикшеренеүҙәр ҙә ошонда уҡ башҡарыласаҡ. Ул 92 урынға иҫәпләнгән, тәүге операция ошо арала яһаласаҡ.

✓Баш ҡала хакимиәте Яр буйы урамының бер өлөшөн Өфө ҡалаһының 450-йыллығы урамы тип атау тәҡдиме буйынса халыҡ араһында һорау алыуҙы дауам итә. Был исемде урамдың Ағиҙел йылғаһы аша күперҙән Салауат Юлаев һәйкәле яғына киткән өлөшөнә бирергә тәҡдим итеlә. Шулай уҡ Нуғай ҡасабаһының яңы урамына Советтар Союзы Геройы Василий Утин, Ленин районындағы яңы урамды балерина Тамара Хоҙайбирҙина исеме менән атау буйынса ла хакимиәт сайтында фекерҙәрегеҙҙе белдерә алаһығыҙ.

✓Өфөлә донъя кимәлендәге вуз-ара студенттар кампусында БПЛА, авиамодель, ракеталар эшләү, программалау һәм робот техникаһы буйынса "Аврора" таланттарҙы үҫтереү үҙәге лабораториялары урынлаштырыласаҡ. "Аврора" таланттарҙы үҫтереү үҙәгендә балалар лабораторияларҙа ракета, самолет һәм пилотһыҙ осоу аппараттары моделдәрен иҫәпләп сығара, уларҙың моделдәрен конструкциялай, уҡытыусы-остаз етәкселегендә Максимовка һәм Первушин аэродромдарында һынау осороуҙары үткәрә.

✓26 ғинуарҙан Башҡортостанда йәшәүселәр Грузияның баш ҡалаһына оса ала, тип хәбәр итә Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәте. Тура рейстар йома көндө урындағы ваҡыт менән иртәнге 7 тула 10 минутта башҡарыла. Юлға өс сәғәт ваҡыт талап ителә.

"Башинформ" материалдары файҙаланылды.

✓ *Башҡортостан Фәндәр академияһы Беренсе Президент тураһында биографик энциклопедия әҙерләй. Тираждың беренсе партияһын 2024 йылдың икенсе кварталында баҫтырып сығарыу күҙаллана.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ТӘҮГЕ ПРЕЗИДЕНТҠА - ҺӘЙКӘЛ

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтай бинаһы ҡаршыһында Башҡортостандың тәүге Президенты Мортаза Рәхимовҡа һәйкәл асыла. Монументтың авторы - Рәсәйҙең халыҡ рәссамы Салауат Щербаков. Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе Максим Забелин уҙғарған республика ойоштороу комитеты ултырышында ошо һәм башҡа юбилей сараларына әҙерлек тикшерелде.**

Мортаза Рәхимовтың тыуыуына 90 йыл тулған көндә, 7 февралдә, баш ҡалабыҙҙа Мортаза Рәхимов йәшәгән һәм эшләгән ике йортта - Энгельс һәм Беренсе май урамдарында мемориаль таҡтаташ асыу ҙа планлаштырыла. Республиканың барлыҡ мәктәптәрендә Беренсе Президенттың тормошона һәм эшмәкәрлегенә арналған берҙәм тематик дәрес үткәрелә. Башҡортостан Фәндәр академияһы Беренсе Президент тураһында биографик энциклопедия әҙерләй. Тәүге даналары уның 90 йыллығына нәшер ителә. Ә бер мең китаптан торған тираждың беренсе партияһын 2024 йылдың икенсе кварталында баҫтырып сығарыу күҙаллана. Мортаза Рәхимовтың тыуған төйәгендә - Күгәрсен районының Тәүәкән ауылында уның музейы ойоштороласаҡ. Экспозицияны ауыл китапханаһында асыу планлаштырыла. Бынан тыш, юбилей саралары сиктәрендә уҡыусылар араһында "Рәхимов уҡыуҙары" тәбәк-ара ғилми-ғәмәли конференция, хоккей буйынса ярыштар һәм башҡа саралар көтөлә.

# УҢАЙЛЫ ЮЛ... КӨНСЫҒЫШТА

**Өфөнөң Көнсығыш сығыу юлында юл буйы фонарҙары тоҡандырылды, тип хәбәр итте үҙенең телеграм-каналында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Ошо өр-яңы юл объекты кистәрен һәм төндәрен 14 километрға еткән арауыҡта фонарҙар менән яҡтыртыла.**

Өфө ҡалаһының ғына түгел, башҡа ҡала-райондарҙан баш ҡалабыҙға килеп йөрөүсе барса транспорт саралары өсөн бик тә уңайлы буласаҡ ошо төҙөлөш "Хәүефһеҙ һифатлы юлдар" милли проектына ярашлы ғәмәлгә ашырыла. Төҙөлөш подрядчигы илебеҙҙә етештерелгән диод лампалары менән юлды яҡтыртыу маҡсатында барлығы 787 мачта ҡуйҙы. Бындай электр лампалары энергияны аҙыраҡ тотона, улар оҙаҡҡараҡ та етә. Уларҙы хеҙмәтләндереү өсөн сығымдар ҙа кәмерәк китәсәк. Тоннель эсен яҡтыртыу автоматика менән көйләнә. "Дөйөм алғанда, Көнсығыш сығыу юлында эштәр тамамланыуға табан бара. Беҙ уны 2024 йылдың беренсе кварталында уҡ тапшырырға тейешбеҙ. Хәҙер бында барлығы 1,8 мең белгес һәм 134 техника берәмеге эшләй. Был Волга буйы федераль округындағы иң ҙур инфраструктура проекты. Уны ғәмәлгә ашырыу Өфө агломерацияһының юл селтәренә тура килгән йөкләмәне кәметәсәк һәм Өфө йылғаһы арьяғы территорияларының үҫешен тиҙләтәсәк", - тине Радий Хәбиров.

Билдәләнеүенсә, Көнсығыш сығыу юлы өс өлөштән тора: 1,2 км оҙонлоғондағы тоннель участкаһы, Өфө йылғаһы аша һалынған күпер һәм эстакада - 2,7 км, М-5 "Урал" федераль трассаһына тиклем 10 км оҙонлоғондағы тиҙ йөрөй торған автомобиль юлы. Тоннелдә автомобилдәрҙең йөрөү тиҙлеге - 80 км/сәғ, асыҡ юлда - 110 км/сәғ. Ошо юл сафҡа индерелгәс, автомобиль йөрөтөүселәргә Өфөнән трассаға тиклем күпкә тиҙерәк барып етеү мөмкин буласаҡ.

# ХАЛЫҠ ҮҘЕ ЭШЛӘЙ

**Баш ҡалабыҙҙа йәшәүселәр 2024 йылда Урындарҙағы инициативаларға булышлыҡ итеү буйынса республика программаһы проекттарын ғәмәлгә ашырыуға әүҙем әҙерләнә. Йыйылыштар уҙғарыла, унда сығыш яһаусылар үҙҙәренең тәҡдимдәре менән уртаҡлаша, инициатив төркөмдәр һайлана.**

Был программаға ярашлы, 2023 йылда Башҡортостанда ошондай эштәргә башҡарыу өсөн дөйөм алғанда 889 млн һум, шул иҫәптән республика бюджеты иҫәбенән 600 млн һум, 140,59 млн һум муниципаль бюджеттарҙан, 77,35 млн һум бағыусыларҙан һәм 71,01 млн һум халыҡтан йыйылған аҡса тотонолдо. Өфөләрҙең бер нисә төркөмө балалар баҡсалары территорияларын төҙөкләндереү йүнәлешендә эш алып бара. Мәҫәлән, 10-сы һанлы белем биреү үҙәге проектында майҙансыҡтарҙы травма алыу хәүефһеҙлеген тәьмин иткән резина балаҫтар менәнябыу һәм юлдарҙы асфальтлау ҡаралһа, 11-се һанлы баҡсала уйын зонаһында күләгә биреүсе яңы урам япмаларын ҡуйыу күҙаллана. Инициатив төркөмдәр ошо эштәрҙе финанслауҙан алып уларҙы ғәмәлгә ашырыуға тиклем контролдә тота. Бындай проектта ҡала кешеләре туғыҙынсы йыл рәттән ҡатнаша, ә башланғыстар күләме арта бара. Ошо программаның һөҙөмтәлелеге Өфөнөң барса районтарында яңынан-яңы балалар һәм спорт майҙансыҡтары барлыҡҡа килеүендә, юлдар һалыныуында һәм йәшәйешебеҙ мөхитенең даими төҙөкләндерелә барыуында асыҡ күренә.

# ЛЕНИН ПАРКЫН...

**Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе барышында Башҡортостан Башлығы Өфөнөң Ленин исемендәге паркын төҙөкләндерергә әҙерләнеүҙәре хаҡында әйтте. Эштәр яҙ көнө башлана.**

Быйыл, былтырғы кеүек үк, "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль проекты сиктәрендә республикала 123 объектты төҙөкләндереү бурысы тора, тип иҫкә төшөрҙөләр Башҡортостандың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығында. Ленин исемендәге парк - Өфөнөң әһәмиәтле объекттарының береһе. Ул туғыҙынсы быуаттың 60-70-се йылдарында булдырылған, тәүҙә Ушаков тип аталған. Революциянан һуң Азатлыҡ паркы тип үҙгәртелгән. 1950 йылда Александр Матросовҡа һәйкәл ҡуйылғас, парк Бөйөк Ватан һуғышы геройы исемен алған. 80-се йылдарҙа КПСС-тың өлкә комитеты йорто төҙөлгәндән һуң Ленин исеме бирелгән.

**"Башинформ"дан.**

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## ВАҺАПОВ САБИР ӘХМӘТЙӘН УЛЫ

Хужалыҡ, партия һәм дәүләт эшмәкәре. 1904 йылдың 10 майында Өфө губернаһы Златоуст өйәҙе, хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Мәсетле районы Дыуан-Мәсетле ауылында тыуған. Ата-бабалары дыуан-әйле ырыуынан.

Тәүҙә ауыл мәҙрәсәһендә, һуңынан яңы ойошторолған совет мәктәбендә белем ала. 1936 йылда Свердловск ҡалаһында Сәнәғәт академияһының Урал филиалын тамамлаған.

1924 йылдан башлап Дыуан-Мәсетле олоҫо, һуңынан Мәсәғүт кантоны башҡарма комитеттары рәйесе булып эшләй. 1931 йылдан Егәҙе-Комаров геологик разведка базаһында директор урынбаҫары, директор вазифаларын башҡара. 1936 - 1939 йылдарҙа Баймаҡ баҡыр иретеү заводында мастер, цех начальнигы, управляющий була.

1939 йылда ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетының бүлек мөдире итеп тәғәйенләнә. 1940 - 1946 йылдарҙа - Башҡорт АССР-ы Халыҡ Комиссарҙары Советы Рәйесе. 1946 - 1953 йылдарҙа ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетының беренсе секретары. 1953 - 1960 йылдарҙа "Башнефть" етештереү берләшмәһендә һәм Башҡортостан совнархозында эшләй.

Вәкәләтле органдарҙағы вазифалары:

1950 - 1954 йылдарҙа СССР, РСФСР һәм БАССР-ҙың 1-3-сө саҡырылыш Юғары Советтары депутаты, СССР Юғары Советы Президиумы ағзаһы.

Наградалары: дүрт Ленин (1943, 1944, 1948, 1949), Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1972) һәм Ҡыҙыл Йондоҙ (1945) ордендары кавалеры, 10 миҙал менән бүләкләнгән.

**(Дауамы. Башы 48-се һанда).**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡан баҫымы

❖Ҡан баҫымы күтәрелһә 1 стакан картуф ҡабығын ваҡлап турап, 3 стакан һыу ҡойорға һәм йомшарғансы бешерергә. Шунан һөҙөп алырға һәм көнөнә 2 тапҡыр - иртәнсәк һәм кис яртышар стакан эсергә. Был сара ҡан баҫымын ҡапыл түбәнәйтә.

## Псориаз

❖ Был ауырыуҙы дауалағанда мәрүәрҙе (бузина) ҡулланырға була. Мәрүәр ботаҡтарын (ҡыш һәм йәйгеһен), йәки сәскә һәм япраҡтарын (йәйгеһен) ваҡлап, өҫтөнә сыҡҡансы ғына һыу ҡойоп, 20-30 минут ҡайнатырға. Шунан псориаз менән зарарланған тән өлөштәрен етерлек эсәлектәге ошо һыуға тығып, 20 минут ултырырға. Был рәүешле көнөнә 2 тапҡыр дауаланырға. Ботаҡ һәм япраҡтарҙы һөҙөп алып, ҡайнатманы киренән йылытып, тағы бер нисә тапҡыр ҡулланырға була.

## Тарҡау склероз

Был сирҙә тарығанда комплекслы дауаланыу талап ителә. Шуға бәйле бер нисә файҙалы дауаланыу ысулы бар:

❖ Ҡан тамырҙарын киңәйтеүсе был дауа баш мейеһендәге ҡан тамырҙары һәм йөрәк ҡапыл ныҡ ҡыҫылғанда ярҙам итә: уртаса ҙурлыҡтағы бер баш һарымһаҡты таҙартып, бутҡа итеп иҙергә. Шуны быяла һауытҡа һалырға ла, өҫтөнә сыҡҡансы таҙартылмаған көнбағыш майы (нерафинированный) ҡойорға. Һыуыҡҡыҫҡа урынлаштырырға. Икенсе көнөнә 1 балғалаҡ ошо майға 1 балғалаҡ лимон һуты ҡушып, ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 3 тапҡыр эсергә. Был рәүешле ай ярым буйына дауаланғас, 15 көнгә туҡталып тороп, яңынан ҡабатларға.

❖ Һығып алынған 1 стакан һуған һутына 1 стакан яңы айыртылған май балы ҡушырға. Был дауаны ашарҙан 1 сәғәт алда йәки 2-3 сәғәт үткәс көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

❖ Эсе һыу ҡан тамырҙарын яҡшы таҙарта. Шуға көн һайын иртәнсәк ас ҡарынға 200-300 мл эсе һыу эсеү ғәтә файҙалы.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ ***Ваҡыт - хазинаға тиң. Йәшәргә өйрәнгәнсе ғүмер уҙып та китә. Төп байлыҡ машиналар, фатирҙар, банктағы шәхси иҫәп тә түгел һәм улар 40 йәшкә еткәс, мөһимлеген дә юғалта.***



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Керелдәк сөрәгәй**

**(Чирок-трескунок)**



Һыҙғыраҡ сөрәгәйҙән саҡ ҡына ҙурыраҡ. Яҙын көрән башында күҙенең өҫтөндә барлыҡҡа килгән аҡ һыҙаты ныҡ күренеп тора. Ҡанаттары зәңгәрһыу-көл төҫөндә, осҡан саҡта аҡһыл булып күренә. Түше ҡараһыу, ҡорһағы - аҡ. "Көҙгө"һө - йәшел. Инә ҡош сыбар, "көҙгө"һө тоноҡ, ялтыр түгел. Ата ҡоштоң тауышы тоноҡ, "ҡрыр", "ҡрыррырр" тип ишетелә, һыуҙан да, осоп барғанда ла тауышлана. Инә ҡоштоң тауышы ҡалтырауыҡлы ҡыжғылдау.

Рәсәйҙең урманлы, урманлы-далалы төбәктәрендә йәшәй, тауҙарҙа осрамай. Асыҡ ландшафтлы һыу ятҡылыҡтарын үҙ итә. Күлдәр, йылға үҙәндәренә, таулы райондарҙа ташландыҡ заводтарҙың быуаларында, хатта коллектив баҡсалар, кешеләр йәшәгән урындарҙа ла күрергә була.

Урал алдында керелдәк сөрәгәйҙәр апрелдең өсөнсө декадаһында күренә башлай. 4-6 ҡош бергә тупланып осалар. Майҙың башы, урталарына килеп бөтәләр.

Ояны һыу ятҡылығынан ситтә, ҡамышлыҡтар араһына ҡора. Ояһының төбөнә күп итеп үлән түшәй, йөнөн ҡоя. Майҙа йомортҡа һала ла, 21-24 көн баҫа. Башлыса 8-10, һирәгерәк 7-12 йомортҡа һала. Июндең ундарынан ай аҙағына тиклем бәпкәләр күренә башлай. Уларҙы ҡарға, һаҙ көйгәнәге, эре аҡсарлаҡтар күпләп тотоп ашай. Төрлө сәбәптәр арҡаһында барлыҡ яңы сыҡҡан бәпкәләрҙең 20-35 проценты һәләк була. 6-10 август тирәһенә бәпкәләрҙең ҡанаты нығына, улар бәләкәй күлдәр һәм һыу ятҡылыҡтарына туплана башлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*ШУНДАЙ ХӘЛДӘР!*

**Рәсәй Хөкүмәтендә 2030 йылға тиклем алкоголь ҡулланыуҙы кәметеү концепцияһы раҫланды. Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған документта билдәләнеүенсә, илдә алкоголдән ваҡытһыҙ үлем кимәле юғары. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, 2016 йылда алкоголдән 407,8 мең, 2018 йылда 196 мең кеше вафат булған. Федераль һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә 1,1 миллиондан ашыу кеше алкоголизм һәм алкоголь психозынан яфалана.**

# АЙЫҒАБЫҘМЫ?

## Айығабыҙ!




Был проблеманы хәл итеү маҡсатында 2009 йылдан 2020 йылға тиклем илдә алкоголде артыҡ ҡулланыуҙы кәметеү һәм алкоголизмды иҫкәртеү буйынса концепция тормошҡа ашырыла. Был осорҙа индерелгән иң мөһим сараларҙың береһе - киске 11-ҙән иртәнге 8-гә тиклем спиртлы эсемлек һатыуҙы тыйыуҙы атарға мөмкин. Әгәр 2009 йылда йән башына алкоголь ҡулланыу 18 литр тәшкил итһә, концепцияны тормошҡа ашырыу аҙағына күрһәткес 8,62 литрға тиклем кәмене. Алкоголизм менән сирләү осрағы ла 55 процентҡа аҙайҙы, үлем 24 процентҡа, спирт менән осраҡлы ағыуланыуҙан үлем осраҡтары 62 процентҡа кәмене. Концепцияның мөһим өлөшө булып спиртлы продукция баҙарын легализациялау тора. 2017 йылдан этил спиртына һәм алкоголь продукцияһына акциздар кереме күләме 11,8 процентҡа, 363 миллиардтан 405,1 миллиард һумға тиклем артҡан. Был күрһәткес концепцияның үҙ маҡсатына өлгәшеүен күрһәтә.

Дөйөм федераль сараларҙан тыш, Башҡортостанда айыҡлыҡты пропагандалауға йүнәлтелгән төбәк саралары ла бар. 2019 йылда уҡ Радий Хәбиров алкоголизмға ҡаршы көрәш уның сәйәсәтенең өҫтөнлөклө бурыстарының береһе тип билдерҙе. "Алкоголь ғаиләне емерә, мин булған район-ҡалаларҙа ҡатын-ҡыҙҙар миңә "йәшел йылан"ға ҡаршы алып барылған көрәш өсөн рәхмәт белдерә. Тимәк, беҙ дөрөҫ юлда! Әлбиттә, эсергә йәки эсмәҫкә һәр кем үҙе хәл итергә хоҡуҡлы, әммә аныҡ ҡына әйткәндә, спирттан алған бер минутлыҡ эйфория бер кеше ғүмеренә лә лайыҡ түгел, бигерәк тә һәр эсемлек - ул, асылда, кредитҡа алынған яҡшы кәйеф, һәм уны артабанғы көндәрҙә процент менән бирергә тура килә", - тип проблеманы билдәләне Башлыҡ.

Башҡортостан Башлығы ҡушыуы буйынса бөтә муниципалитеттарҙа ла контрафакт алкоголь етештереүселәргә һәм һатыусыларға ҡаршы көрәш көсәйтелде. "Республикала суррогат алкоголь әйләнешен иҫкәртеү буйынса бөтә сараларҙы күреү мөһим. Бөтә легаль булмаған һатыу нөктәһен тиҙ арала асыҡларға һәм бөтөрөргә кәрәк", - тине Радий Хәбиров Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәләрҙең береһендә.

Легаль булмаған һатыу нөктәләре буйынса рейдтар даими үткәрелә. Һөҙөмтәлә әйләнештән меңәрләгән литр шикле сифатлы эсемлек алынды. Контрафакт менән көрәш үҙ һөҙөмтәһен күрһәтте. Башҡортостанда 2022 йылда һуңғы 20 йылда алкоголь менән ағыуланыуҙан үлемдең минималь күрһәткесенә өлгәшелде. 12 ай эсендә республикала 52 кеше һәләк булған. Сағыштырыу өсөн: 2018 йылда алкоголь 211 кешенең ғүмерен өҙһә, 2019 йылда - 102, 2020 йылда - 73, 2021 йылда - 57 кеше. Бынан тыш, Башҡортостан Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында айыҡлыҡ рейтингын етәкләне, ә дөйөм Рәсәй таблицаһында дүрт йыл эсендә 32-се урындан 16-сы урынға күтәрелде.

Байрам көндәрендә алкоголь һатыуҙы сикләү тәжрибәһе уңышлы үҙләштерелде. Республика биләмәһендә һабантуй, "Һуңғы ҡыңғырау", Йәштәр көндәрендә һәм ошо байрамға арналған саралар үткәрелгән осорҙа, Белем көнөндә, Яңы йыл каникулында һатыу тыйылды. Радий Хәбиров белдереүенсә, был ҡарар Яңы йыл байрамдарын мәҙәни, спорт, ижтимағи ваҡиғалар менән тулыландырыуға һәм алкоголде законһыҙ һатыуҙы контролдә тотоуҙы көсәйтеүгә бәйле.

Алкоголизм менән көрәш йәһәтенән Башҡортостанда "Айыҡ ауыл" республика конкурсының әһәмиәте артты. 2022 йылда унда 1120 тораҡ пункт ҡатнашты. Сағыштырыу өсөн: 2019 йылда ҡатнашыусылар һаны ни бары 464 ине. Еңеүсе ауылдар 3-6 миллион һум күләмендә аҡсалата бүләк алды. Дөйөм приз фонды - 40 миллион һум. Проект Башҡортостан Башлығы грантына тормошҡа ашырыла. Аҡсаны төҙөкләндереүгә тотонорға мөмкин, шуға күрә республикала юлдар, балалар һәм спорт майҙансыҡтары барлыҡҡа килгән тораҡ пункттар күбәйҙе. Ә буш ваҡытты файҙалы үткәреү мөмкинлеге булғанда, эсергә ваҡыт юҡ. Конкурс сиктәрендә 4 йыл эсендә Башҡортостан ауылдарында 30 яңы балалар һәм спорт майҙансығы, 12 парк һәм йәмәғәт биләмәһе барлыҡҡа килде. 9 урам, 6 йәмәғәт биләмәһе, 4 ауыл мәҙәниәт йорто, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға 2 һәйкәл төҙөкләндерелгән. Шулай уҡ ауылдарҙа техника, һыу башняһы һәм хатта янғын һүндереү депоһы барлыҡҡа килде.

Шулай итеп, быйыл ноябрҙә Башҡортостанда 2023-2024 йылдарҙағы "Айыҡ ауыл" конкурсының муниципаль этабы тамамланды. Район һәм ҡалаларҙа лидерҙар билдәләнде, улар яңы йылда республика кимәлендә көрәште дауам итәсәк. Был төбәктә айыҡлыҡ модаһы тағы ла популярлашасаҡ тигәнде аңлата.

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ЗАЯҒА ҮТКӘРМӘЙЕК!

**Йыш ҡына үҙемә: "20 йыл элек бөгөнгө аҡылым булһа, тормошом ниндәйерәк булыр ине икән?" тигән һорауҙы бирәм. Эйе, 20 йыл элек мин былар тураһында уйламай ҙа инем, ә хәҙер башҡаларға кәңәш итә алам.**

**Эсмә, тартма, ҡалғанына өлгәшеп була!** Алкоголь, наркотиктар тураһында уй бөтөнләйгә башыңа инеп тә сыҡмаһын.

Сиктән тыш ауыр ваҡыттарҙан башҡа, **бер ҡасан да үтескә аҡса алма.** Шәхси эшҡыуарлыҡ башлауға ла, машинаға ла, телефонға ла, яҡын кешеңә бүләк эшләү өсөн дә. Аҡса юҡ икән - уны эшләп табыуҙың башҡа юлдарын эҙлә, йәки бөтөнләйгә ҡул һелтә. Кредит - хәйерселеккә илткән беренсе һәм иң ҙур аҙым.

**Һиңә береһе лә бурыслы түгел,** быны ла хәтереңдә тот. Дәүләт тә, атай-әсәйең дә, йәмғиәт тә һине тәьмин итергә тейеш түгел. Үҙең эшләп тапмаһаң, бер нәмә лә ҡулыңа буштан төшмәҫ.

**Үҙеңде сикләй бел.** "Был ғүмерҙә бер тапҡыр йәшәйбеҙ!" тигәнгә оҡшаш бөтә һүҙҙәр ялған, улар артына хурлыҡ һәм унан да ауырыраҡ эҙемтәләрҙән башҡа бер ниндәй ҙә мәғәнә йәшерелмәгән. Ҡулланыусылар ҡарашынан баш тарт, аҡыллыраҡ бул.

**Үҙеңде ихтирам ит.** Ялған ҡиммәттәргә алданма, маҡтанма, алдашма. Үҙ баһаңды белеү телефон маркаһына, ҡиммәтле кейемһалымға йәки машинаға бәйле булмаһын.

**Намыҫ һәм абруй төшөнсәләрен берәү ҙә юҡҡа сығармаған.** Һәр осраҡта ла кеше булып ҡала бел, выжданыңды һатма. Хаҡлыҡ һинең яҡта икән - бер низән дә ҡурҡма.

**Башҡа кешеләрҙе ихтирам ит.** Хатта кемдер быға лайыҡ түгел булып тойолһа ла, хөрмәт күрһәтеү - тәртипле кешегә хас һыҙат.

**Үҙеңде ҡулда тота бел.** Итәғәтле, тыныс һәм әҙәпле була белеү бөйөклөктөң төп билдәһе. Был сифаттар шәхси эшҡыуарлыҡта ла ярҙам итә.

**Кәрәкмәгән әйберҙәр һатып алыуҙан тыйыл,** аҡсаң әлегә артығы менән етһә лә йыйып бар. Был һаранлыҡты аңлатмай, ни бары ошо әйберҙе һатып алырға кәрәкме-юҡмы - шуны алдан уйла.

**Эшеңә яуаплы ҡара.** Бөйөк ҡаҙаныштар юлы хеҙмәттән башлана, йыш ҡына түбән хаҡлынан. Бындай эште илке-һалҡы ғына башҡарырға ярай, тип уйлама.

**Аҡсаңды нимәгәлер һалырға тырыш.** Пирамида һәм дуҫтарыңдың "стартап"тарына түгел. Күсемһеҙ милек, ҡиммәтле ҡағыҙҙар, банкта депозитҡа, мәҫәлән.

**Белем ал.** Интернет бының өсөн уғата уңайлы. Аҡса телен аңларға өйрән (бының өсөн бухгалтерҙар курсын үт), бизнес өлкәһен энәһенән ебенә тиклем төшөнөп өйрән.

**Ялҡауланма.** Буш ваҡытыңды уйындар менән һәм интернетта үткәреүҙе туҡтат, бының урынына берәй китап уҡы, балыҡ тоторға бар йә саф һауала йөрөргә сыҡ, бассейнға булһа ла барып кил.

Бер нәмә лә белмәй тороп, фараздарға ғына нигеҙләнеп, **бизнесты "нулдән" башлама.** Үҙең бер нисә йыл эшләгән һәм яҡшы белгән өлкәлә бизнес башлау иң отошлоһо.

**Ваҡыт - хазинаға тиң.** Йәшәргә өйрәнгәнсе ғүмер уҙып та китә. Төп байлыҡ машиналар, фатирҙар, банктағы шәхси иҫәп тә түгел һәм улар 40 йәшкә еткәс, мөһимлеген дә юғалта. Хобби, туғандарың өсөн ваҡытыңды йәлләмә.

**Был ун биш кәңәште тулыһынса үтәп йәшәүгә ышаныуы ауыр, беләм. Әммә тормошҡа ашырыр ниәттәрең, сәмең бар икән - тырышлыҡ һалып ҡара. Кәңәштәремде тотҡан берәү ҙә үткән ғүмеренә зарланып ултырмаҫ, тип вәғәҙәләйем.**

**Бер аҡыллы кеше.**

✓ *Ҡаласыҡта йыйып алынған кушнаренко һыҙатлы керамика табылдыҡтары, Көнбайыш Урал буйы аналогтары кеүек үк, ҡаласыҡтың VI - VIII быуаттарҙан да алдараҡ булмаған тарихын сағылдыра.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа

#### Бахмут мәҙәниәте ҡәбиләләре

Бахмут ҡәбиләләренең ерләү йолаһында яңы һыҙаттар барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, Бөрө ҡәберлегендә,VI-VII быуаттар сиктәренән башлап, барса үлгән кешеләр янына ҙур балсыҡ һауыттарҙа күп итеп итле шыйыҡ аҙыҡ (бутҡа, һурпа) ҡуйыла; ябай формалы ҡәберҙәр менән бер рәттән, ҡатмарлы формалылары - тар ғына төньяҡ стеналарында соҡоп яһалған уйымдары һәм оҙон яғында ырмау-киртләстәре булғандары барлыҡҡа килә. Шул уҡ ваҡытта бахмутлылар ҡәберҙәр янына аттарҙы (уларҙың тиреләрен, башын, аяҡтарын) ритуаль күмеү йолаларын гәмәлгә индерә. Ҡәберҙәрҙә, Бөрө һәм Бахмут ҡәберлектәре материалдары күрһәтеүенсә, турбаҫлы һәм кушнаренко мәҙәниәттәренә ҡараған балсыҡ һауыт-һаба күпләп табыла, уларҙың ҡайһы берҙәре бахмутлыларға хас булған кескәй генә түңәрәк уйымлы орнамент менән биҙәлгән. Быларҙың барыһы ла килмешәк турбаҫлы һәм кушнаренко ҡәбиләләренең, бер-береһе менән тығыҙ ҡатыша барып, урындағы халыҡ вариҫтарын тулыһынса ассимиляциялауының сағылышы булып тора.

VI-VIII быуаттарҙағы бахмут, турбаҫлы һәм кушнаренко мәҙәниәттәренең барса материалдарын сағыштырып ҡарағанда, Ағиҙел һәм Урта Кама йылғалары бассейнына көньяҡ сығышлы күп һанлы халыҡ төркөмдәре килеүе һәм ошо территорияла тороп ҡалыуы һөҙөмтәһендә мәҙәни һәм этник яҡтан бик ныҡ буталған яңы халыҡ формалашыуын күҙаллап була.

Ошо төбәктең артабанғы этник һәм ижтимағи тарихы үҫеше планында башҡорт халҡының IX-X быуаттарҙа этнос булараҡ формалашыуын һәм мәҙәниәтен VI-VIII быуаттар эпохаһының төп һөҙөмтәһе итеп ҡарап була.

#### V-VIII быуаттарҙа Көнсығыш Урал арьяғы ҡәбиләләре

Көнсығыш Урал арьяғы халҡының этник составы әле ҡаралған дәүерҙә бик сыбар булған, һәм уның тарихы, Көнбайыш Урал буйындағы кеүек үк, яҡынса бер үк схемаға ярашлы гәмәлләшкән. V-VIII быуаттар ҡомартҡылары аҙ өйрәнелгәнгә күрә төбәк ҡәүемдәренең көнкүрешен һәм тарихын әлегә ентекле рәүештә һүрәтләп булмай.

Тупланған материалдарға нигеҙләнеп, бакал мәҙәниәте ҡәбиләләренең бында компакт төркөм булып, Тобол, Исәт һәм Ишем йылғалары ярҙары буйында йәшәүен билдәләп була. Уларҙың мәҙәниәтен ялан яғынан валдар һәм йырындар менән нығытылған йылға мороңдарындағы ҡаласыҡтар күрһәтеп тора. Ҡаласыҡтарҙа торлаҡ эҙҙәре ҡалмаған, күрәһең, улар ер өҫтөнә һалынған булған. Ҡаласыҡтар материалдары муйыны буйлап уйымдар, тәре формаһындағы һәм кыя һыҙыҡтар менән биҙәлгән түңәрәк төплө балсыҡ һауыт-һабанан тора. Ошондай типтағы һауыт-һабаны хронологик яҡтан аныҡ билдәләп булмай, һәм ул, быны алдараҡ күрәсәкбеҙ , Көньяҡ Уралда X-XII быуаттарҙа тиклем ҡулланылышта була.

Малсылыҡ бакал ҡәбиләләренең төп хужалыҡ итеү тибы булған, тип күҙалларға була. 2008 йылда бакал мәҙәниәте ҡомартҡылары хаҡындағы мәғлүмәт С.Г. Боталовтың һәм уның коллегаларының Ҙур Бакал ҡаласығындағы яңы ҡаҙыныу материалдарын баҫып сығарыуы һәм Тобол буйы ҡомартҡыларында морфологик яҡтан кушнаренкоығына яҡын булған һауыт-һаба табылыуы һөҙөмтәһендә байтаҡҡа тулыланды. А.В. Епимаховтың ике бакал ҡаласығының абсолют датаһын (йәшен) радиокарбон методы менән тикшереү һөҙөмтәләре хаҡындағы мәҡәләһе айырыуса ҡыҙыҡһыныу уята. Фортификация ҡоролмаларынан алынған ағас күмере өлгөләре анализ объекты итеп алына. Һөҙөмтәлә ҡомартҡыларҙың даталары б.э. тиклем I быуаттан алып б.э. VI быуатына тиклем тип билдәләнә.

Әлегерәк, сағыштырмаса анализ һөҙөмтәләренә таянып, Ҙур Бакал ҡаласыһы һәм башҡа ошондай ҡомартҡылар (мәҫәлән, Логинов ҡаласығы) VI-VII быуаттарҙан алып II мең йыллыҡ баштарына тиклем йәшәгән тигән фекер өҫтөнлөк итә ине, ошо йәһәттән яңынан аныҡланған абсолют дата көтөлмәгәнсәрәк булды. Моғайын, быны ҡомартҡының күп ҡатламлы булып, анализ өсөн алынған өлгөләрҙең иртәрәк осорҙан ҡалған объекттарҙан булыуы менән аңлатып булалыр. Ҡаласыҡта йыйып алынған кушнаренко һыҙатлы керамика табылдыҡтары, Көнбайыш Урал буйы аналогтары кеүек үк, ҡаласыҡтың VI - VIII быуаттарҙан да алдараҡ булмаған тарихын сағылдыра тип фекер йөрөтөргә кәрәк.



*VIII быуаттағы һыбайлы ирҙең ҡойоп яһалған бронза һыны. Бөрө ҡәберлеге.*

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**




*Бахмут мәҙәниәтенә ҡараған ҡатын-ҡыҙ ҡәберҙәре материалдары:*
*1-3 - һырғалар;*
*4 - сикә сулпыһы (бахмут тибы);*
*5, 6, 9 - ҡаптырма-фибулалар;*
*7 - һөйәк тараҡ;*
*8, 10-15, 19, 20 - төрлө формалағы сулпылар;*
*16 - ебәк туҡыма киҫәге һәм энә һалынған бронза ҡап;*
*17 - бронза көҙгә;*
*18 - бронза беләҙек.*

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН

### Боронғо төрки теле... тәү телгә илтә



**Әл Ҡашғари: "Us (ус) - изгелек менән яуыҙлыҡты айыра белеү, уғыҙҙар шулай әйтә. Әйтәләр: "ol us boldi" - ул изгелекте яуыҙлыҡтан айырҙы".**

Башҡорт телендә ошо варианттағы һәм мәғәнәләге һүҙ осрамай, әммә телебеҙҙәге "үс" һәм "ыҫ" һүҙҙәре килеп сығышы яғынан ошо боронғо төрки теле менән бәйле булыуы бар. Боронғоса "ус булыуҙы йәиһә ус итеүҙе" кемдеңдер яуызлыҡ ҡылыуы һөҙөмтәһе итеп аңларға кәрәк. Тимәк, беҙҙенсә "үс" (шулай уҡ "ыҫ") яуызлыҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән тойғо, ә был ысынлап та изгелек һәм яуыҙлыҡ төшөнсәләрен айыра белеүҙе талап итә.

**Әл Ҡашғари: "Ош - киҫәксә, мәғәнәһе "бына шулай". Әйтәләр: "Ош мундағ кыл" - "бына шулай ҡыл (эшлә)".** Боронғо төркиҙәрҙең "ош" тигәненә телебеҙҙәге "ошолай", "шулай" һүҙҙәре тура килә. "Мундағ" - былдай формаһында ҡулланыла, диалекттарыбыҙҙа "мында" һүҙе лә бар.

Ҡашғари һүҙлегендә "ош" киҫәксәһенең тағы ла бер варианты килтерелә: **"Ош - әле генә тигәнде аңлатҡан киҫәксә. Ош келдүгүм бу - мин әле генә килдем".** Башҡорт телендә был киҫәксә һаҡланмаған, шул уҡ мәғәнәлә "бит" киҫәксәһе ҡулланыла: "әле генә килдем бит", - тибеҙ. Шул уҡ ваҡытта ҡаҙандар "килдем ич" тиҙәр, бында "ош - ич" күсәгилешлеге күҙәтелә.

**"Уш уш - өндәү, ҡуҙғытыу киҫәксәһе, үгеҙҙе эсергәндә ошолай әйтәләр".** Күрәһең, был һүҙҙәр беҙҙең "эс, эс" йә иһә шул уҡ ҡаҙандарҙың "эч, эч" тигәненә тап килә. Ошо уҡ "уш" һүҙенең тағы ла ике мәғәнәһе булыуы теркәлгән. **"Уш" - теләһә ниндәй ағастың, ботаҡтарҙың, мөгөҙҙөң үҙәге: "мүнүз уши" - мөгөҙ үҙәге. "Уш" һүҙе менән ҡоштарҙың һәм аттарҙың умыртҡаһының ҡойроҡ һөйәген дә атайҙар".** Төүгеһе беҙҙенсә шул уҡ "эс", "эске яҡ", "үҙәк" тигәнгә тура килһә, икенсеһе телебеҙҙә фонетик яҡтан бер ни тиклем үҙгәргән килеш ныҡынып ҡалған: был осраҡта һүҙ малдың "оса"һы (арт һаны), "оса һөйәге", кешенең ултырышы хаҡында бара. Ҡаҙаҡтар һимеҙ ҡуй малының ныҡ майлы ҡойроғон да "оса", тип атайҙар. Йәнә, башҡорт диалекттарында осраған "үшән" һүҙен, башлыса, аяҡтарын саҡ ҡуҙғатып атлаған атҡа ҡарата әйтәләр, был һүҙҙең этимологияһы боронғо төркиҙәрҙең шул уҡ "уш" һүҙе менән бәйле булыуы бар.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Украинаның уң яры буйындағы һәм Көнсығыш Польшалағы алыштарҙа

**Люблин-Брест һөжүм итеү операцияһында**

Вепш йылғаһы ярҙарында немецтар оборона тоторға һәм ҡаршылыҡ күрһәтергә маташа. Әммә 32-се танк һәм 58-се гв. атлы полктары Вепш йылғаһын сигенеүсе немецтарҙан алдараҡ кисеп сыға. Пяски ҡалаһына етәрәк, дошман 32-се танк полкының алға барыуын бер аҙға ғына тотҡарлап торорға ҡарар итә. Беҙҙең танкистар, дошман һалдаттары пәйҙә булған яҡҡа тиҙ арала борола һалып, ҙур тиҙлек менән немецтарҙы атакалай, уларҙың ике ротаһын юҡ итә. Һөҙөмтәлә Пяски ҡалаһы һәм Правники тимер юл станцияһы дошмандан азат ителә.

23 июлдә дивизия Люблин ҡалаһының көньяҡ яғына сығырға һәм немецтарҙың көньяҡҡа табан сигенеү юлдарын ябырға теләйеш була, ә 32-се танк полкы алдына, ҡаланың көньяҡ-көнсығыш сигенә сығып, тимер юл станцияһын алыу һәм дошмандың йөк тейәлгән эшелондарын ҡулға төшөрөү бурысы ҡуйыла. 32-се танк полкының хәрби хәрәкәттәре журналынан: "23.07.1944 йыл. Полк, дошманды Войцехув районында атакалап, бер ротаға яҡын пехотаһын юҡ итте һәм туҙҙырып ебәрҙе. Пяски ҡалаһы янында беҙҙең 4 танк өс "Фердинанд"ты атакаланы, уларҙың 2-һе юҡ ителде, тәҙәк ҡалған бер үҙ йөрөшлө орудие ҡулға төшөрөлдө һәм полк уны алышта ҡуллана башланы. Кискә табан полк Бискупице - Бжезице районында дошмандың бер төркөмөн туҙҙырҙы, шоссе юлына сыҡты һәм авангардта барған 60-сы гв. атлы полкына тупланыу районына - Бжезицеға сығыу мөмкинлеген бирҙе. Бер көн эсендә полк тарафынан дошмандың 120 һалдаты һәм офицеры юҡ ителдә йә иһә туҙҙырып ебәрелде. 23 июлдә төнгә ҡаршы полк Бжезице - Люблин - Праведники маршруты буйынса хәрәкәт итте. 24 июлдә ул Люблин ҡалаһы өсөн алышҡа сығып, уның көньяҡ өлөшөн азат итте. Автоматсылар һәм полктың ПТР взводы немецтарҙың айырымланған төркөмдәрен эҙәрлекләүҙе дауам итте. Дошмандың 26 пулемет нөктәһе, 4 танкыға ҡаршы пушкаһы, 200-гә яҡын һалдат һәм офицеры юҡ ителде. 2 яғыулыҡ-майлау материалдары, 3 аҙыҡ-түлек келәте, автомашиналар тейәлгән 2 эшелоны ҡулға төшөрөлдө.

Люблинға 8-се гвардия һәм 2-се танк армиялары частары бәреп инде. Ҡаланың көньяҡ һәм көнсығыш сиктәрендә беҙҙең корпустың бөтөн частары ла ныҡышмалы алышты. 16-сы гв. атлы дивизияһы полктары урам һуғыштарында немецтарҙың 300-гә тиклем һалдат һәм офицерын юҡ итте, 150-һен әсиргә алды. Ҡала урамдарына совет танкылары үтеп ингәс, дошман рәттәрендә паника башланды. Шулай итеп, 1-се Белорус фронтының һул ҡанаты частары Польшаның эре сәнәғәт һәм административ үҙәге булған Люблин ҡалаһын штурмлап алды. Люблиндан йыраҡ булмаған урында "Майданек" тигән концлагерҙа 10 меңдән ашыу әсирлеккә төшкән совет хәрбиҙәре тотҡонлокта йәшәй. Уларҙы тотҡонлоҡтан 2-се танк армияһы һәм 7-се гвардия атлы корпусы яугирҙары ҡотҡара. Улар Майданек концлагеренда фашистар ҡылған вәхшилек эҙҙәрен үҙ күҙҙәре менән күрә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Телевизорҙан "Ҡатын-ҡыҙ 50 йәштән һуң ҡулланыуҙа булған материал" тигән күңелгә ятмаған һүҙ ишеттем. Йәнәһе, бала таба алмағас, уның ғаилә, йәмғиәт, тәбиғәт өсөн кәрәге лә юҡ һымаҡ.*



# БЕЛӘККӘ ЛӘ ҠАРА,

**Интернет сәхифәләрендә "17-18 сентябрҙә Екатеринбургта пауэрлифтинг буйынса "Алтын Юлбарыҫ-16" донъя чемпионатында ҡатнашҡан Гөлнара Вахитова бицепсҡа штанга күтәреүҙә беренсе урын алып, рекорд ҡуйып, спорт мастерлығына кандидат нормативын үтәгән" тигән яҙманы уҡығас, ул ҡыҙ менән гәзиткә әңгәмә эшләү маҡсаты барлыҡҡа килде. Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Республика башҡорт гимназия-интернатында тәрбиәсе булып эшләгән Гөлнара Ғарифйән ҡыҙы ВАХИТОВА булып сыҡты ул. Гөлнара Ейәнсура районы үҙәге Иҫәнғолда тыуған. Атаһының тамырҙары Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районы Биктимер ауылынан. Ҡыҙ урта мәктәпте әле үҙе эшләгән интернатта алтын миҙалға тамамлаған, Башҡорт дәүләт университетында юғары белем алған, математик.**

**Гөлнара Ғарифйән ҡыҙы һөнәре буйынса математик, үҙе тарих менән ҡыҙыҡһынып, шәжәрәләр төҙөп, китаптар яҙа, бер үк ваҡытта ауыр атлетика менән шөғөлләнеп, донъя, Рәсәй күләмендә еңеүҙәр яулай. Шәжәрәләр төҙөү буйынса авторлыҡ программаһы ла бар. Уны Башҡортостан Республикаһы мәғарифты үҫтереү институтының ғилми советында ҡарап раҫлағандар. Оҫталыҡ дәрестәре үткәреп, уҡыусыларҙы шәжәрә төҙөргә өйрәтә.**

**Урынлы һорау тыуа: бер үк кешелә йүнәлеше төрлө юҫыҡта булған шөғөлдәр нисек һыйышып йәшәй һуң? Бының сәбәбен милли рух тип атарға булалыр. Хәйер, быларҙың барыһы ла Гөлнара Ғарифйән ҡыҙы менән әңгәмәлә.**

**Гөлнара Ғарифйән ҡыҙы, төп һөнәрегеҙ буйынса математик булһағыҙ ҙа, тарих менән ҡыҙыҡһыныуығыҙ, спортҡа ылығыуығыҙ нисек барлыҡҡа килде?**

- Атайым менән әсәйем - уҡытыусылар. Атайым ике вуз - Ырымбурҙа ауыл хужалығы институтын, шунда уҡ пединститут тамамлаған. Күп йылдар уҡытыусы булып эшләне. Әсәйем Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлап, рус теле һәм әҙәбиәтен уҡытты. Әсәйемдең атаһы менән әсәһе дини кешеләр булған. Мулла ҡартатайым Ейәнсура районы 2-се Назар ауылында балалар мөғәллиме, өләсәйем ҡыҙҙар мөғәллимәһе булып эшләгән. Әсәйемдең ҡартатаһы инде Бөрйән-Ҡыпсаҡ улысы старшинаһы булған. Күрәһең, миңә уларҙың йоғонтоһо булғандыр. Атайым тыуған ауылы Биктимер тураһында 2004 йылда китап сығарҙы. Китабы сыҡҡан йылда уҡ баҡыйлыҡҡа күсте. Үлер алдынан: "Ҡыҙым, Өфө архивына барып, ауылыбыҙ тураһындағы документтарҙы алып, китабыма индереп булманы, өлгөрмәнем", - тип әйтте. Мин уның һүҙҙәрен үҙемә васыят итеп алдым. Уға тиклем үҙебеҙҙең нәҫелдең шәжәрәһен эшләп өлгөргәйнем. Архивҡа барып инеп киттем дә, инде бына егерме йыл унан сыға алмай йөрөйөм. Архивҡа эшкә барған һымаҡ барам, материалдар күп, эҙләнеүҙәр ваҡыт талап итә.

Артабан интернаттағы тарих уҡытыусым Дамир Күскилдиндең тәҡдиме буйынса 2005 йылда тарихи документтар нигеҙендә китап яҙа башлап, 2015 йылда уны тамамланым. Ул саҡтағы тулҡынланыуым ғүмергә онотолмаҫлыҡ, сөнки шул саҡта мин үҙ ҡулыма 1863 йылда ҡартатайым Йәғәфәр Байгилдин үҙ тамғаһын ҡуйған ҡағыҙҙы алдым. Кеше шул тойғо аша үтергә тейеш. Әлбиттә, шәжәрәне заказ буйынса ла түләп төҙөтөп алырға була, әммә үҙең тотоноуға етмәй. Уны китап итеп баҫтырыуымдың икенсе сәбәбе: ауылыбыҙ татарлашып бөтөп бара. Һуғыштан алда беҙгә бер нисә татар ғаиләһе күсеп ултыра, уҡытыусылар ҙа татар милләтенән булып, китаптар Ҡаҙандан алдырылып, балалар "Баш ҡалабыҙ Ҡаҙан" тип уҡып үҫте. Архив материалдарында ауылдаштарыбыҙ барыһы ла "башҡорт" тип яҙылған. Ауылдаштарым атайым эшләгән мәктәптә таҡтаташ астылар, шунда баҫманың исем туйын үткәреп, ауылдаштарыма китабымды тараттым.

Беҙҙең Биктимер ауылы янында, Һаҡмар йылғаһы буйлап, тағы ла бер нисә башҡорт ауылы бар: Ҡабан, Ҡолсом, Райман (ул ауыл хәҙер юҡ), Ҡарағужа ауылдары. Был ауылдар элек Ырымбур губернаһына ҡараған. Совет власы урынлаштырылғас, был 5 башҡорт ауылын тегендә-бында тартҡылап йөрөткәндәр. Бер Башҡортостанға, бер Ырымбур өлкәһенә ингән улар. Ахырҙа, беҙҙе Ырымбур өлкәһендә ҡалдырғандар. Күршелә генә Ейәнсураның Айыу, Иҫәнғол ауылдары. Иҫәнғол менән Һарыҡташ араһы 50 саҡрым.

Билдәле скульптор Салауат Щербаковтың тамырҙары беҙҙең күрше Ҡолсом ауылынан. Гәзиттә уның хаҡында мәҡәлә баҫылғас ҡына 2020 йылда сыҡҡан китабыма Щербаковтың да шәжәрәһен индереүемде белдем. Китаптың икенсе редакцияһын сығарғанда уның тураһында күләмлерәк мәҡәлә яҙырға уйлайым. Салауат ағайға был китабымды бүләк иттем, уның менән осраштыҡ.

**Үҙ тарихығыҙҙы өйрәнгәндә тағы ла ниндәй ҡыҙыҡлы табыштарға юлыҡтығыҙ?**

- 2014 йылда Америкала эшләп килгән ДНК лабораторияһына бер туған ҡустымдың материалын тапшырҙым. ДНК генеалогияһы буйынса тамырҙарымды табып бирҙеләр. Америка лабораторияһында үткән быуаттың 70-се йылдарынан бирле ошо эш менән шөғөлләнәләр. Уларҙа донъяның төрлө урындарынан ДНК анализдары тупланған. Ир-ат материалы кәрәк булған өсөн ҡустыма мөрәжәғәт иттем. Ҡустымдың материалы уларға инеп ултырғас, иң тәүҙә материалды махсус программа буйынса уҡыйҙар, артабан компьютер туғаныма яҡын булғандарҙы Ер шары буйынса эҙләй. Нимә килеп сыҡты, тиһегеҙ? 1 мең йыл элек минең 30 туған абзыйҙарым, мыртыйҙарым, һылыуҙарым, апайҙарым ошо көндә Ҡытай территорияһында йәшәйҙәр. Күсенеү тарихтары ла билдәле: Ҡытайҙағы һуғыштар һөҙөмтәһендә минең ата-бабалар Ҡырымға күсеп ултырған. 20 туған яҡындарым ошо көндә Ҡырымда йәшәй. 14-се быуатта ғына улар Көньяҡ Уралға күскән. Иң боронғо олатайым Кунь Ян Эске Монголия (Ҡытай) ерендә көн күргән. Уның улы Сымынаҡ Лоҡман Хәким 1045 йылда йәшәгән, үлгән йылы билдәһеҙ. Унан һуң Дәште Ҡыпсаҡ хан килә, шунан Сураман, артабан Акоба, Бошман... шунан ете быуын ҡартатайҙарым китә. Яҡын ҡартатайҙарым Һарыҡташ яғына хәҙерге Бөрйән яғынан күскән. Урман араһының күпләп мал тотор өсөн уңайһыҙ булыуы күсеү сәбәбе булғандыр инде.

**Дәште Ҡыпсаҡ империяһы ҡыйралғандан һуң ҡыпсаҡтарҙың ҙур өлөшө Уралға килеп һыйына. Һеҙҙең тамырҙар ошо тарихҡа тура килә, шулай бит?**

- Тап шулай. Документтарҙы үҙгәртеп, тарихты киренән яҙып була, әммә ҡанды үҙгәртеп булмай. Бында бер генә иҫкәрмә булыуы бар: әгәр ҙә һуғыштар һөҙөмтәһендә етем ҡалып, ҡарауға алынған бала булғанда ғына яңылышлыҡ килеп сығыуы бар, сөнки беҙ ундай хәлдәрҙе бер нисек тә белә алмайбыҙ.

Тимашев тигән урыҫ байы менән башҡорттар араһындағы ярты быуатлыҡ ер өсөн тартҡылаш тураһында ла яҙып үттем китабымда. Шулай уҡ көнкүреш кимәлендәге ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы ла урап үтә алманым. Мәҫәлән, 130 йыл элек теркәлгән документта яҙылыуынса, беҙҙең ауылда йәшәгән бер байҙың дүрт ҡатыны булып, үҙе үлеп киткәс, ҡатындары мөлкәтен бүлешкән. Иң йәш ҡатынына тик бер ярыҡ сынаяҡ ҡына эләккән һ.б.

**Мәктәптәребеҙҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыуҙы камиллаштырыу йәһәтенән нимәләр тәҡдим итер инегеҙ?**

- Балаларыбыҙ балалар баҡсаһына барып ҡайта ла, урыҫса һөйләшә башлай, мәктәптәрҙә лә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә генә балалар башҡортса һөйләшә лә, үҙ-ара аралашыу дөйөм аралашыу телендә бара. Нимә эшләргә була һуң бында? Ҡанда ғына булған башҡортлоҡ, ата-әсәйемдең генә башҡорт булыуы һинең башҡортлоғоңдо аңлатмай әле. Мин үҙем уҡыған һәм хәҙер эшләп йөрөгән Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт гимназияһына ҡыҙым беренсегә барған йылды эксперимент рәүешендә ҡала балаларын йыйҙылар. Ҡыҙым шул арҡала башҡорт мөхитенә барып эләгеп, башҡортса һөйләшергә өйрәнде.

Үҙем Иҫәнғол ауылында балалар баҡсаһына йөрөнөм. Баҡсанан урыҫса һөйләшеп ҡайтам, өйҙә атайым менән әсәйем башҡортса һөйләшһә лә үҙемде урыҫ ҡыҙы тип әйтәм икән. Беренсе класҡа барырға ваҡыт етте. Башҡорт мәктәбе беҙҙең өй янында, урыҫ мәктәбе район үҙәгенең ситендә урынлашҡан. Балалар баҡсаһының теле урыҫса булғас, мин ике саҡрымда ятҡан урыҫ мәктәбенә барҙым. Беренсе класты тамамлағас атайымды Күгәрсен тигән ауылға парторг итеп ебәрҙеләр. Унда дүрт йыл татарса уҡыным. Бында инде үҙемде татар тимен икән. Бала өсөн мөхиттең йоғонтоһо иҫ киткес көслө була һәм уның психикаһы быны күтәрә алмай. Минең бәхеткә, атайымды Үрге Муйнаҡ мәктәбенә директор итеп ебәрәләр. Тик шул саҡта ғына үҙемдең тыуған мөхитемә барып эләктем. 1983 йылда инде һигеҙенсе класҡа Өфөләге 1-се республика интернат-мәктәпкә уҡырға барҙым. Интернат-мәктәпте тамамлағас, артабан Башҡорт дәүләт университетының математика факультетында уҡыным.

**Шунан һуң уйламағанда-көтмәгәндә һеҙ спорт менән шөғөлләнә башлағанһығыҙ. Спорттың да ниндәйе бит әле: хатта ирҙәргә лә ауыр булып тойолғаны…**

- Мин мәктәптә уҡығанда саңғы ярыштарында ҡатнаша торғайным. Студент саҡта саңғыға, биатлонға йөрөнөм. 5-се курста диплом яҡлаған мәлдә ҡыҙым тыуҙы. Шунан бер йылдан һуң мәктәпкә эшкә инеп киттем, шуның менән спорт менән дә арам өҙөлдө.

Бер заман 89 килограмлыҡ булып киткән икәнмен. Ҡатын-ҡыҙҙа гормональ үҙгәрештәр ҙә башлана бер мәл. Ул илле йәштән һуң бала таба алмай, уның ғаилә, эш мәшәҡәттәренән тыш, артабанғы роле нимәлә булыуы мөмкин? Әсәйемде ҡарар өсөн уҡытыусылыҡтан тәрбиә эшенә күскәйнем, уны ауылдан алып килеп, ун йыл ҡараным. Ул ике йыл элек баҡыйлыҡҡа күсте.

Шул саҡта телевизорҙан "Ҡатын-ҡыҙ 50 йәштән һуң ҡулланыуҙа булған материал" тигән күңелгә ятмаған һүҙ ишеттем. Йәнәһе, бала таба алмағас, уның ғаилә, йәмғиәт, тәбиғәт өсөн кәрәге лә юҡ һымаҡ. Быны аңлауҙан ҡатын-ҡыҙ шундуҡ бирешә башлай. Был уйҙар мине лә ялмап алды, шул тиклем ҡыйын булды. "Мин әле ҡарт түгелмен, күп нәмә ҡулымдан килә әле", тигәнде иҫбатлағым килде шул ваҡыт. Быны мин кешегә түгел, үҙемә иҫбатлағым килде. Ғөмүмән алғанда, 50 йәш әле хәҙерге ҡатын-ҡыҙҙар өсөн бешкән еләк мәле. Элегерәк ҡырҡ йәшлек апайҙарҙы әбей итеп күрә инем. Хәҙерге ҡырҡ йәшлек ҡатындар, әгәр ҙә үҙҙәрен формала тотһалар, ҡыҙҙарға биргеһеҙҙәр. Йәш ҡыҙҙарҙың тәжрибәһе самалы, улар йәшлектәре менән алдыра. Ә беҙҙең йәштәгеләр мөмкинлектәрҙе мөғжизәгә әйләндерә ала.

Эште мин фитнес клубтан башланым, унда тәүҙә тән ауырлығын 22 килограмға кәметтем. Был бик ауыр ғәмәл. Хатта бөтөнләй ҙә мөмкин булмаған эш тип әйтергә була. Шул ваҡытта телевизорҙан бер тапшырыу күрҙем, унда Курск өлкәһенән 54 йәштәге бер ханым Рәсәй каналына интервью бирә. Ул: "50 йәшемдә улым спортзалға алып килде, 4 йыл эсендә пауэрлифтинг буйынса спорт мастеры булдым", - тип һөйләй. "Мин унан ҡайһы ерем менән кәм?" тигән сәм уянды миндә шул мәл. Ул саҡта фигуралы шыуыу, еңел атлетика өсөн ярамай инем инде, былар өсөн ҡаҡса булырға кәрәк. Быларға минең кәүҙә конституциям мөмкинлек бирмәй. Марафонсы ла була алмайым, ғөмүмән, йүгерергә яратмайым. Тренерыма барҙым да: "Константин Александрович, миңә штанга менән шөғөлләнергә кәрәк", - тинем.

Шунан ныҡлап шөғөлләнә башлап, өс йыл эсендә өлкәндәр өсөн 1-се разрядты, артабан дүрт төр буйынса спорт мастерлығына кандидат нормативын үтәнем. Былтыр 22 октябрҙә спорт мастеры булдым. Минең йәштәге ҡатынға спорт мастеры булыр өсөн 37,5 килограмды көсәнмәйенсә генә, арҡа менән ярҙам итмәйенсә, ҡул ярҙамында ғына күтәрергә кәрәк. Күҙ алдына килтерегеҙ әле - 37,5 килорамм ауырлыҡ ул һыу менән тултырылған 12 өс литрлыҡ банка! Өс рекордыма "Рәсәй рекорды" тигән сертификат бирҙеләр. Екатеринбургта йыл һайын Халыҡ-ара ярыштар үтә. Унда ла ҡатнашып еңеп сыҡтым. Үкенескә күрә, штанга күтәреү ҡатын-ҡыҙ өсөн еңел булмаған спорт. Былтыр февралдә травма алып, был спортты ташларға тура килде. Тренерыма һауыҡҡас кире килермен, тинем. Әле ял итәм.

**Был спорт менән шөғөлләнеү һеҙгә үҙегеҙҙе ҡатын-ҡыҙ итеп тойорға ҡамасауламаймы? Нимә генә тимә, ҡатын-ҡыҙ нескә зат булып яратылған.**

- Ирҙәр барыбер көслөрәк. Бына минең ирем ғүмерҙә лә штанганы күргәне лә, тотҡаны ла юҡ, әммә ул минән көслөрәк. Мин бит өйҙә бөтөнләй икенсе, спорт бит минең өйҙән тыш шөғөлөм. Ирем менән ҡыҙым минең был спортҡа килеүемә ҡаршы булдылар. Штанга янына тренерһыҙ

**✓ Ҡатын-ҡыҙҙың донъяһы ире менән генә сикләнмәй. Ул ҡайҙалыр үҙен икенсе төрлө итеп тойғоһо ла килә. Бер төрлө генә булыу ҡатын-ҡыҙға күңелһеҙ. Кемдер руль артына ултыра, кемдер минең һымаҡ спорт менән шөғөлләнә.**



# ЙӨРӘККӘ ЛӘ ҠАРА

барырға бөтөнләй ярамай. Саҡ ҡына техника ҡағиҙәһен үтәмәһәң, травма көтөп кенә тора. Штанга ул еңел атлетикалағы һымаҡ тота килеп йүгереп сығып китеү түгел. Ошо спорт тураһында гимназияла бер уҡыусыға һөйләгәйнем, ул ылығып китте. Егет аграр университетҡа уҡырға инеп, үҙе һымаҡ егеттәрҙе туплап, тренажерҙарҙа шөғөлләнеп, ҡышҡы ярыштарға әҙерләнә.

**▸ Һеҙҙең өсөн тормошта кем булыуығыҙ иң мөһиме: ҡатын булыуымы, әсәй булыуымы, математика уҡытыусыһымы, тәрбиәсеме, спортсымы, тарих өйрәнеүсеме?**

- Уларҙы айырып булмайҙыр ул. Улар бер-береһен тулыландырып килә. Тик спорт менән генә шөғөлләнеп булмай, башты эшләтергә кәрәк. Башты эшләтеп, китап яҙып ҡына ултырып булмай, хәрәкәт, йәғни спорт кәрәк. Хәҙер тиҙлек заманы, бөтә нәмәне лә тиҙ эшләргә, өлгөрөргә кәрәк. Кемгә генә әйтмә, һәр ваҡыт шундай яуап ишетәбеҙ: "Минең ваҡытым юҡ!" Эйе, балалар бәләкәй саҡта, ысынлап та, ваҡыт булмай. Әммә балалары үҫеп еткәс, әсә кешенең әҙерәк ҡулы бушағас, ҡатын-ҡыҙ булараҡ үҙенә ваҡытын бүлә ала. Икенсенән, ғаилә ағзаларына үҙеңдең вәкәләттәреңде еткерә белеү ҙә мөһим. Ниңә ҡатын-ҡыҙ өйҙә барлыҡ эште һәр ваҡыт үҙе башҡарырға тейеш? Ҡыҙҙар үҫһә, ярҙам итһендәр, улдарға ла эш табыла, ғөмүмән, балаларҙы өйҙә эшкә ылыҡтырыу, өйрәтеү мөһим.

**▸ Башҡорт ырыуҙары араһында ҡыпсаҡтар яугирлығы менән айырылып тора. Һеҙҙең тарих менән ҡыҙыҡһыныуығыҙҙа, спорт менән шөғөлләнеүегеҙҙә ошо ырыу вәкиле булыуығыҙ роль уйнаймы?**

- Әлбиттә. Башта әйткәнемсә, ҡан факторы һәр ваҡыт кешенән айырылғыһыҙ.

**▸ Ҡыпсаҡ ҡатын-ҡыҙҙары башҡа ырыу ҡатын-ҡыҙҙарынан ниндәйҙер сифаты менән айырыламы?**

- Әйтә алмайым, быны билдәләр өсөн махсус күҙәтеүҙәр алып барырға кәрәк булыр ине. Үткер ҡатын-ҡыҙҙар һәр ырыуҙа ла барҙыр ул. Тарихи документтар өйрәнгәндә мин бер нәмәгә иғтибар иттем: никах ваҡытында кәләш яғынан вәкил булып ир-аттар ултырған. Хәҙер генә ул никах ваҡытында кәләштең шаһиҙәһе булып әхирәте йә башҡа нескә зат вәкиле ҡатнаша. Бынан шундай һығымта яһарға булалыр: халҡыбыҙ ир-ат менән көслө булған. Тик бер осраҡта ғына никахҡа ҡатын-ҡыҙҙы ир урынына саҡырғандар, әгәр ҙә ул ҡатын-ҡыҙ абруйы менән башҡорт йәмғиәтендә статусҡа эйә булһа. Шәжәрәнең дә ирҙәр яҡлап төҙөлөүе юҡтан килмәгән, тимәк. Шулай ҙа ғалимдар фекеренсә, балалар тышҡы яҡтан 80 процент әсәһенә оҡшай.

**▸ Һуңғы ваҡытта шул күҙгә ташлана: ҡатын-ҡыҙ ирҙәрҙең күп кенә позицияларын яулай бара. Башҡорт ауылдарында ағинәйҙәрҙең әүҙемләшеүе шуның бер күренеше. Улар ауылдарға төҫ бирә, төрлө иҗтимағи эштәрҙең башында ла улар тора, уларҙың өҫтөндәге милли кейем менән бергә милли рух тергеҙелә. Ғөмүмән, ғаиләлә, йәмғиәттә нескә заттың ирҙәр урынын яулай барыуының сәбәптәрен нимәлә тип уйлайһығыҙ?**

- Беренсенән, тыуған ваҡытта ир заттарының һаны күберәк була. Бала табыу йорттарында шундай һандар килтерелә. Шунан һуң ул һандар кәмей башлай. Әрмегә барала, юл-транспорт һәләкәтенә күп осрайҙар, ғөмүмән, ирҙәрҙең һаны 30-35 йәшкә барып еткәндән һуң кәмеүгә китә. Ирҙәр һаны кәмей, ә ҡатын-ҡыҙға ғаилә ҡорорға кәрәк. Әммә кейәүгә сығырға ирҙәр етмәй. Шуға күрә лә ҡайһы бер ир заттары ике ғаилә араһында йөрөй. Ундай миҫалдарҙы мин бик күп беләм. Математик булараҡ, мин был хәлдең үҙемсә логик сынйырын төҙөйөм. Беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, күп осраҡта ирҙәр эшләй торған эштәрҙе үҙебеҙ башҡарып, уларҙы анһатҡа һалындырып өйрәтәбеҙ. Был осраҡта үҙебеҙ - ҡатын-ҡыҙҙар ғәйепле. Ирҙәрҙең ҡулынан күп кенә вазифаларын тартып алдыҡ. Хәҙер инде улар беҙгә һалынып өйрәнгәс, элекке хәләнә ҡапыл ғына кире ҡайтарыуы ла ҡыйын.

Икенсенән, ҡатын-ҡыҙ бөтә мәсьәләләргә лә тиерлек үтә ныҡ үтеп инә. Ә ирҙәр иһә ҡатын-ҡыҙҙар кеүек мәсьәләләрҙән нескәлектәренә үтеп инмәй. Ирҙәр был осраҡта ҡатын-ҡыҙҙан күпкә артта ҡала. Әлбиттә, эшҡыуарлыҡ өлкәһендә ҡатын-ҡыҙҙар бик аҙ, унда ир аҡылы кәрәк. Швецияла уҡытыусы ҡатын-ҡыҙҙар һаны 5 проценттан артып китһә, тревога иғлан итәләр. Унда уҡытыусы ир кеше булырға тейеш тип баралар. Ә беҙҙең мәктәптәрҙә тәрбиә ҡатын-ҡыҙҙыҡы. Бала мәктәптән ҡайтҡас та ҡатын-ҡыҙ тәрбиәһе дауам итә. Балаға бит ир кеше тәрбиәһен күрергә, унан ир сифаттары алырға кәрәк.

**▸ Ҡатын-ҡыҙ руль артына ултырһа, уның ире икенсе, өсөнсө планға күсә. Көслө ҡатын-ҡыҙ булараҡ, ошо хәлде нисек аңлатыр инегеҙ?**

- Ҡатын-ҡыҙҙың иренән башҡа шәхси мөхите, территорияһы булырға тейеш. Уның донъяһы ире менән генә сикләнмәй. Ул ҡайҙалыр үҙен икенсе төрлө итеп тойғоһо ла килә. Бер төрлө генә булыу ҡатын-ҡыҙға күңелһеҙ. Кемдер руль артына ултыра, кемдер минең һымаҡ спорт менән шөғөлләнә, кемдер фитнесҡа бара. Мин ҡайҙалар барып штанга күтәрһәм дә, өйҙә мебель күсереп йөрөмәйем, бының өсөн минең ирем бар. Шәхси мөхит миңә яңы эмоциялар өсөн кәрәк.

**▸ Бынан бер нисә йыл элек бер аҡһаҡал Рәсәйҙә ҡатын-ҡыҙ президент булғас ҡына илебеҙ сәскә атасаҡ тигәйне. Был фекергә нисек ҡарайһығыҙ?**



- Юҡ, президент булыр өсөн ир-ат аҡылы кәрәк. Ҡатын-ҡыҙ юғары урында ултырһа, бөтәһен дә белергә теләп, үҙен ҡырылмаһа ҡырҡ өлөшкә бүлеп бөтөрәсәк. Әсә булараҡ ҡатын-ҡыҙҙың тәбиғәте шундай. Ил менән етәкселек итер өсөн глобаль фекерләргә, масштаблы уйлай белергә кәрәк. Ҡатын-ҡыҙға ул етмәй, тәбиғәт тарафынан был һәләт уға бирелмәгән.

**▸ Үҙ-үҙегеҙгә ҡаршы килмәйһегеҙме: һеҙ көслө ҡатын-ҡыҙ, шул уҡ ваҡытта наҙланыуға ла мохтажһығыҙмы?**

- Юҡ, ологайһаң да, барыбер наҙланғы килә. Әсәйем мине 40 йәшендә тапҡан. Әсәйем 90 йәшендә мине, 50 йәшлек ҡыҙын, арҡаһынан һыйпаһа ла, рәхәт була ине. Беҙ барыбер ҙә бала булып ҡалабыҙ. Сөнки гел генә көслө булып йөрөп булмай.

**▸ Һуңғы ваҡытта йәштәр ғаилә ҡорорға ашығып бармай. Сәбәптәре нимәлә тип уйлайһығыҙ?**

- Кеше башҡа кеше өсөн яуаплы булғыһы килмәй, кеше яҙмышын үҙ ҡулына алырға баҙнат итмәй. Элек 23 йәштә клубҡа сыҡҡан ҡыҙ ултырған ҡыҙ һанала ине, хәҙер ултырған ҡыҙҙарҙың да йәше артты. Көнбайыш стереотиптар беҙгә үтеп инде: тәүҙә һөнәр алыу, фатирлы, машиналы булыу, карьера эшләү, шунан һуң ғына ғаилә ҡороу. Ошо ҡалыптар беҙҙә тамыр йәйҙе. Һуңғы ваҡытта шундай күренеш йыш осрай, мәҫәлән, кафе-ресторандарҙа 35-50 йәштәгеләр парлап-парлап түгел, ә ирҙәр айырым, ҡатындар айырым аралаша.

**▸ Тормошоғоҙҙа кемде остазым тип атай алаһығыҙ?**

- Ысын мәғәнәһендәге остазым - ул минең атайым. Ысын ир-ат тә атайым. Атайым 71 йәшендә вафат булды. Ауылыбыҙ тураһындағы китабын ҡулына тотоп йән бирҙе. Ҡулыма кемдәргә китапты бүләк итергә икәнлекте белдереп исемлек тотторҙо. Әсәйем 92 йәшкә етте. Әммә мин атай ҡыҙы.

**▸ Беренсе донъя һуғышында ҡатнашыусыларҙың исемлеген табып китап сығарыу идеяһы нисек тыуҙы?**

- Атайымдың атаһы Вахитов Ибраһим Мәжит улы Беренсе донъя һуғышында ҡатнашҡан. Һуғыштан алда ул Мәстүрә исемле йәш ҡыҙҙы, минең ҡәрсәйҙе, кәләш итеп алып, ошо һуғышҡа сығып киткән. Аҙағына тиклем унда ҡатнашып, контузия алып ҡайтҡан. Ҡәрсәйем 4 йыл буйына иптәшенең өйөндә ирен көтөп йәшәгән. Ҡартатайым гусар полкында хеҙмәт иткән, Ржев янында уларҙың полктары торған саҡта Рәсәй батшаһы Николай Икенсе полкҡа килгән. Һалдаттарҙы теҙеп ҡуйғандар. Николай Икенсе каретаһы улар янынан туҡтамайса үтеп киткән. Батшаның ярандары һалдаттарға "Герцеговина Флор" сигареттарын ташлап үткән. Был хәлде ул атайыма һөйләп ҡалдырған. Мин ҡартатайым хаҡында архивта документтар эҙләй башланым. Тик таба алманым. Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда ҡартатайыма 54 йәш булған. Уны һуғышҡа алмайҙар. Шулай ҙа ул трудармияға китә, Магнитогорск ҡалаһында ҡорос ҡойоу заводы эшселәре йәшәгән барактарҙы йылытыусы булып эшләй. Ашау яғы бик наҡыҫ була, картуф ҡабыҡтарын бешереп ашап тамаҡ ялғайҙар. Һуғыштан һуң ҡаҡ һөйәккә ҡалған ҡартатайым трудармиянан Магнитогорск ҡалаһынан Биктимергә тиклем йәйәү ҡайтҡан. Ҡайтҡас, йәшелсә-емеш баҡсаһына ҡарауылсы итеп ҡуйғандар, шунда ғына ныҡлап аяҡҡа баҫа алған.

**▸ Китаптарға нисә кешенең исемен индерә алдығыҙ?**

- Ике китапта йәмғеһе 38 мең кеше. Ырымбур, Өфө губерналарынан Беренсе донъя һуғышында 500 меңдән ашыу кеше ҡатнашыуы билдәле. Башҡорттар ҙа ул исемлектәрҙә ҙур урынды биләй. Урыҫ булмағандарҙы документтарҙа "мосолман" тип кенә теркәгәндәр.

**▸ Шул уҡ ваҡытта 1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡытында ҡатнашыусыларҙың милләте яҙылған, ә быныһында юҡ. Ниңә икән?**

- Мин был исемдәрҙе Беренсе донъя һуғышынан һуң Петроградта төҙәлгән исемлектән алдым. Унда ла кем һуғышта һәләк булған, кем ятып ҡалған, кем хәбәрһеҙ юғалған, тик шулар ғына индерелгән. Ә интернетта табылған мәғлүмәттәр госпиталдарҙа һәм лазареттарҙа тултырылған карточкалар ғына. Был һуғышта Рәсәй армияһы еңелә, шуның өсөн дә документтар тулыһынса төҙәлмәгәндер тип уйлайым.

**▸ "Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә" тигән мәҡәлде нисек аңлайһығыҙ?**

- Спорт менән шөғөлләнгәс, мин был мәҡәл-әйтемде әҙерәк үҙгәрттем: беләккә лә ҡара, йөрәккә лә ҡара. Беләһегеҙме, ни өсөн? Сөнки беләк ул мускул ғына түгел, ул - һаулыҡ. Әгәр ҙә һинең һаулығың юҡ икән, йөрәгең бер кемгә лә кәрәк түгел.

**▸ Ҡыҙыҡлы һәм фәһемле әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт, Гөлнара Ғарифйән ҡыҙы!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***Ул саҡтағы тулҡынланыуым ғүмергә онотолмаҫлыҡ, сөнки шул саҡта мин үҙ ҡулыма 1863 йылда ҡартатайым Йәғәфәр Байгилдин үҙ тамғаһын ҡуйған ҡағыҙҙы алдым. Кеше шул тойғо аша үтергә тейеш. Әлбиттә, шәжәрәне заказ буйынса ла түләп төҙәтеп алырға була, әммә үҙең тотоноуға етмәй. Уны китап итеп баҫтырыуымдың икенсе сәбәбе: ауылыбыҙ татарлашып бөтөп бара. Һуғыштан алда беҙгә бер нисә татар ғаиләһе күсеп ултыра, уҡытыусылар ҙа татар милләтенән булып, китаптар Ҡаҙандан алдырылып, балалар "Баш ҡалабыҙ Ҡаҙан" тип уҡып үҫте. Архив материалдарында ауылдаштарыбыҙ барыһы ла "башҡорт" тип яҙылған.***

✓ Ысынлап та, ҡаршыһында - тос алмаларҙан ботаҡтары эйелгән ҡупшы алмағас!.. Ҡырағай тиер инең, емештәре хәтәр эре. Әҙәм ышанмаҫлыҡ күренеш... Ярай әле фотоаппаратын алған.





Сәлимйән Бәҙретдинов

# Аҙашҡан алмағас

(хикәйә)

Ниңәлер эсе бошто Юлайҙың. Хатта күҙҙәре йәшләнде. Ниҙер етмәгән кеүек тойола, яманһыулай. Әллә әле башына ла инмәгән хәл-ваҡиғалар көтәме уны?.. Әллә көҙ, һарысай айы, күңеленә һағыш һаламы?.. Ҡаланан бигүк алыҫ та түгел ятҡан тыуып-үҫкән ауылына күптәнән ҡайтҡаны юҡ. Ата-инәһе олоғайып, әхирәткә күсте. Зыярат ҡылғанына ла инде байтаҡ. Хәҙер улар һымаҡ бер кем дә зарығып, өҙөлөп көтөп тормай. Шулай... Иҫән саҡтарында ата-инә - алтын һөйәк, тартып торған йылы төйәк шул. Йәнтөйәгенә ҡайтып йөрөп килһә, бәлки, һағыштары таралыр...

Юлай, күрше-күлән менән иҫәнләшеп, һөйләшеп торҙо ла, үҫмер саҡ, йәшлек эҙҙәре ҡалған тауҙарға ынтылды. Ашҡынып, үрләне лә үрләне. Кәбән, эҫкерт дәүмәлендәй тораташтарға баҫып, тирә-яҡты ҡарай-ҡарай, иң бейек түбәгә артылды. Иҫ китмәле хозурлыҡ! Бындай йәмде тәү күргәндәй һоҡланып ҡарап торҙо ир-уҙаман. Йәннәт бит, йәннәт!.. Сәхрә ер тере һыу һымаҡ йәнен йәнләндереп ебәрҙе. Хистәре урғып, күңеленән йыр ағылды:

*Тыуған ерем, һай, бигерәк йәмле,*
*Һулар һауалары сихәтле.*
*Тауҙарына менеп, ҡарап торһаң,*
*Йөрәккенәң итер һиммәтле.*

Арыу уҡ ерһәп ҡайтҡан Юлай, ҡош һымаҡ талпынып, уралып та ятҡан теҙемдәр, арҡалыҡтар буйлап атланы. Ҡалҡыулыҡтарҙа - ҡарағас, итәктәрендә - ҡайын, уҫаҡ, сейә, селек... Ләззәт табып, кинәнеп бара торғас, бер түбәнең ожмахтай сағылына килеп сыҡты. Хайран урын, әйтерһең, ғашиҡтар осрашыр, серләшер өсөн хасил ителгән ғәжәйеп аулаҡ урын! Балаҫтай сирәме лә, урындыҡҡа оҡшаш яҫы таштары ла, сусайып ҡалҡып торған ҡая ташының ышыҡланырлыҡ өңөрөһө лә бар. Йәнә... Көнгә ҡараған битләүҙән аҙ ғына аҫтараҡ һарыға мансылған ағастар араһында - ҡыҙарып бешкән алмалар!.. Был - монар, сағым ғыналыр?.. Тәьҫораттарҙан иҫ-аңы томаланып, күҙенә күренәләр, күңеле иләҫ-миләҫ киләләр... Бейек тау ҡуйынындағы шыр ҡайын, уҫаҡ араһында ниндәй алмағас үҫһен?.. Юлай, һушыма киләйем тип, биттәрен сәпәкәйләп алды ла, түбәнгәрәк төштө. Үәт мөғжизә!.. Ысынлап та, ҡаршыһында - тос алмаларҙан ботаҡтары эйелгән ҡупшы алмағас!.. Ҡырағай тиер инең, емештәре хәтәр эре. Әҙәм ышанмаҫлыҡ күренеш... Ярай әле фотоаппаратын алған. Уңдан да, һулдан да тороп, "һылыуҡай"ҙы фотоға төшөрҙө. Тамам аптырап, тирә-йүнде байҡаны, әммә башҡа алмағасты тапманы.

Ғәжәп ҡылырлыҡ хәл!.. Ауылдан өс саҡырымдай ергә, бейек тау битләүендәге ағастар араһына кем алмағас алып барып ултыртһын?.. Әллә берәй иҫәүән булдымы икән?.. Ауылда бер нисә кеше генә баҡсаларында алмағас үҫтерә. Ҡырыҫ тәбиғәтле Уралда, ҡырау һуғып, йыл һайын емешфәлән дә булмай. Ә һис кем уйламаған урында... Әллә Хоҙай Тәғәләнең хикмәте тигәндәре шулмы икән?.. Уйҙарының осона сыға алманы Юлай. Был ғиллә тамам мейеһен сорнап алды. Белһә, серҙең асылын күпте күргән Динмөхәмәт аҡһаҡал ғына беләлер.

Юлай, йәһәтләп, ауылға ыңғайланы. Бирәм тигән ҡолона сығарып ҡуйған юлына, тигәндәй, Динмөхәмәт ағай йорто алдындағы эскәмйәлә ултыра ине. Олоғайып киткән, әммә төҫ ташламаған. Ҡаланан ҡайтҡан ырыуҙашын, яҡын затын аяғүрә баҫып, ай-һайлап ҡаршыланы. Йәшәйеш хәлдәрен белешкәс, Юлай Йәмтауҙа күргәнен хайран итеп һөйләне. Ә Динмөхәмәт ағай бер тына шым ҡалды, тәрән уйға сумды. Йөҙө берсә балҡыны, берсә болоҡһоно. Ниндәйҙер сетерекле ваҡиғаларҙы иҫенә төшөрҙө, күрәһең.

- Ҡәрҙәшем, - тине ул ниһайәт, - Йәмтауҙа һин юлыҡҡан, хатта ауылдаштарҙан бер кем дә күрмәгән, белмәгән алмағас бер-береһен үлеп яратҡан ике йән, Һөйәрғол менән Һөйөмбикә осрашып йөрөгән һәм фани донъя менән хушлашҡан урын. Һөйөмбикәнең күргәне-кисергәне, тәҡдире, аҙашҡан һөйөүе ғәйәт аяныслы.

- Шулаймы ни?.. - Юлай тетрәнде. - Был фажиғәле мөхәббәт тураһында инәйем әхирәттәре менән кис ултырып мамыҡ шәл, ойоҡ бәйләгәндәрендә ишеткеләп ҡалғайным. Ләкин нескәлектәрен белмәйем.

- Тормош ул, ҡустым, үтә лә ҡатмарлы. Уны аңлап бөтөп тә булмай. Ир-егет, ҡатын-ҡыҙ, ғаилә мөнәсәбәттәрен дә. Һөйөмбикә яҙмышын уйлаһаң, уйылып китерлек. Быны төшөнөр өсөн тәү ата Әҙәм менән тәү инә Һауа тарихын хәтерләү кәрәктер. Уны миңә бик тә диндар олатайым әллә нисә мәртәбә һөйләгәйне. Тыңла, туғаным...

***

"Һауа бик матур ине. Буйы Әҙәм ғәләйһиссәләмдеке кеүек. Күҙҙәре ҡара, саф тауышлы, Әҙәмдекенән нескәрәк. Сәсе йөҙ толом, уларға ожмах ынйылары һәм яҡуттары үрелгән. Хаҡ Тәғәлә йөҙ өлөш матурлыҡтың туҡһан өлөшөн Һауаға биргән.

Әҙәм иҫ китмәле гүзәл Һауаны күргәс, күңеленә мөхәббәт төштө. Ул уға яҡынларға теләп, ҡулын һуҙҙы. Шул саҡ Ябраил ғәләйһиссәләм: "Әй Әҙәм, ҡулыңды һуҙма, Һауа һинең өсөн яратылһа ла, никахһыҙ йоғоноу ярамай! Хаҡ Тәғәләнән уны хәләл ефетлеккә һора", - тине. Әҙәм тыңлап, һораны һәм Хаҡ Тәғәлә никах хөтбәһен уҡыны, хитап та ҡылды:

- Эй Әҙәм, һине ҡөҙрәтем менән яралттым, һиңә рухымдан йән бирҙем, бөтә нәмәнең исемен белдерҙем, иптәш өсөн Һауаны бар ҡылдым, ожмахыма килтерҙем... Әммә бер аманатымды һаҡла.

- Аманатың ни, әйт, мотлаҡ һаҡлармын, - тине Әҙәм.

- Ожмахымдағы төрлө ниғмәттәремде аша, шишмәләренән һыу эс, тик ошо ағасҡа яҡын барма, дошман һүҙенә һис ҡарама...

Бынан һуң ожмахта торҙолар, төрлө ләззәтле емештәр менән ризыҡландылар. Алмағас емешенән генә һаҡландылар. Әммә ожмахтың ҡайһы тарафына ғына барһалар ҙа, Аллаһы Тәғәлә тыйған ағас ҡаршыларында торҙо.

Иблис Хоҙайҙың рәхмәтенән яҙғандан һуң, Әҙәм ғәләйһиссәләмгә дошманлығын шайтанлыҡ үә хәйлә аша бойомлаштырырға маҡсат ҡуйҙы. Хаҡ Тәғәләнең Әҙәмде бер емеште ауыҙ итеүҙән тыйғанын белеп, ғәйәт шатланды, ерҙән күккә осоп, ожмахҡа керергә теләне, ләкин керетмәнеләр. Унан бер мәхлүк сыҡһа, уға хәйлә ҡороп, инермен, тип уйланы. Ниһайәт Тауис сыҡты. Иблис уға өндәште:

- Э-эй матур ҡош, һин кем?

- Мин - Тауис, ә һин кем?

- Мин Аллаһыға яҡын фәрештәләрҙән бер фәрештәмен. Һәр ваҡыт ғибәҙәт ҡыламын. Ғибәҙәткә әүәҫлегем артһын өсөн Хаҡ Тәғәләнең дуҫтарына әҙерләгән ниғмәттәрен күрәһем килә. Мине ожмахҡа керет, әжеренә һиңә тылсым өйрәтермен, уны белһәң, ауырымаҫһың, ҡартаймаҫһың, мәңге ожмахта ҡалырһың.

- Быға минең көсөм етмәй шул. Йылан исемле ҡәрҙәшем бар, һине ожмахҡа индерергә уның көсө етер.

Алданған Тауис Йыланға барып, ҡыуанып әйтте:

- Һөйөнөс, Аллаһыға яҡын бер фәрештә килде. Өс һүҙ өйрәтермен, мәңге ожмахта ҡалырһығыҙ, ҡартаймаҫһығыҙ, тине. Беҙҙең менән туғанлашырға теләй.

Йылан ашығып ожмахтан сыҡты, Иблис вәсвәсәһенә бирелеп:

- Ожмах һаҡсылары бик һаҡ, нисек кенә алып керәйем? - тине.

- Ауыҙыңды ас, шунда боҫоп, инермен.

Иблис уның ауыҙына кереп йәшеренде. Әммә ожмах һаҡсылары Иблистең Йылан ауыҙында икәнен һиҙҙе һәм ҡыуып сығарырға ниәтләнде. Шул мәл Хаҡ Тәғәләнән фарман булды:

- Ҡыумағыҙ! Минең бер серем үә хикмәтем бар...

Иблис Әҙәм менән Һауа янына күҙ йәштәрен түгеп килде. Икеһе лә уны танышманы.

- Ни булды, ниңә илайһың? - тип, бер ауыҙҙан һоранылар.

- Һеҙҙе уйлап илайым, - тине Иблис. - Был донъяла матурлыҡта һеҙгә тиңдәш юҡ, әммә үтер ваҡыт, бер көн килеп, үлерһегеҙ.

- Үлем нәмә ул? - Әҙәм аптырап һораны.

- Тәнегеҙҙән йәндәрегеҙ сығып осор, күҙҙәрегеҙ күрмәҫ, ҡолаҡтарығыҙ тотмаҫ, аяҡтарығыҙ йөрөмәҫ...

Әҙәм ғәләйһиссәләм оло ҡайғыға батты... Иблис Һауаға:

- Хаҡ Тәғәлә тыйған ағастың емешен ашаһағыҙ, мәңге ожмахта ҡалырһығыҙ, үлмәҫһегеҙ. Мин һеҙгә быны нәсихәт итеп әйтәмен, - тип, ант итте.

Был һүҙҙәр Һауаның күңеленә хуш килде. Ул тыйылған ағастың бер ботағын һындырып килтерҙе.

- Эй Әҙәм, был ағастың емеше бик тәмле үә ләззәтле икән дә, мин уны ашап ҡараным, мә, һин дә татып ҡара, - тип, йәнәшенә һуҙҙы.

Әҙәм бер емеште ауыҙына ҡабып сәйнәне. Шул саҡ Хаҡ Тәғәләнең: "Тыйылған ағасҡа яҡын бармағыҙ! - тигән әмерен иҫенә төшөрөп, муйынын ҡыҫты, орлоҡто эскә ебәрмәне, әммә тышҡа ла сығара алманы, ул боғаҙында төйөн булып ҡалды.

Шул саҡ Әҙәм менән Һауаның баштарынан таждары, өҫтәренән хөлләләре төштө, күҙҙәренә бер-береһенең яланғас ғәүрәттәре күренде. Оятҡарынан уфтанып, ғәүрәттәрен ҡаплар өсөн япраҡ эҙләп йүгерҙеләр. Үтенеп һораһалар ҙа, бер ағас та япрағын бирмәне. Йөҙөм ағасы Әҙәмдең сәсенән тотто. Ул өҙгөләнеп:

- Ебәр инде, ебәр, - тип үтенде.

- Юҡ, ебәрмәйем, - тине йөҙөм ағасы. - Мин Аллаһы Тәғәләнең әмере менән һине эләктерҙем. Әгәр ебәрһәм, һинең кеүек гонаһлы булырмын.

Шул саҡ Хаҡ Тәғәләнән хитап ҡылынды:

- Йә, Әҙәм, минән ҡасаһыңмы?

- Әй Раббым, Һинән оялыуымдан ҡасамын.

- Һин ҡайҙа?

- Ағас ботағында бәләгә ҡалдым, тотҡонмон, яланғасмын. Йә Раббым, ҡотҡар мине, ҡотҡар!

- Әй Әҙәм, ҡайғы-хәсрәтеңә гонаһың сәбәптер... Бойороғомдо үтәмәгәнең өсөн һиңә ун бәлә бирәмен. Беренсе - шелтә; икенсе - тажың һәм хөлләң төшөп, яланғасланыу; өсөнсө - йөҙөң үә тәнең ҡаралыр; дүртенсе - ожмахтан сығарылаһың; бишенсе - Һауанан йөҙ йыл айырылып торорһоң; алтынсы - шайтан менән дошманлығың көсәйер; етенсе - гонаһлы исемен күтәрерһең; һигеҙенсе - шайтан балаларына үә малдарына ҡатышыр; туғыҙынсы - донъя зинданына ябылып, һыуыҡ, эҫелек үә төрлө ауырыуҙар менән һыналырһың; унынсы - тормошонда күп мәшәҡәт кисерерһең.

Бынан һуң Хаҡ Тәғәлә:

- Йә Һауа! Ҡайҙа һин? - тип һораны.

- Йә Раббым, мин яланғас, ғәүрәтемде ҡапларға бер нәмәм дә юҡ.

- Яҙыҡ эш ҡылдың, шул сәбәпле яланғас ҡалдың, Әҙәмде лә ҡайғылы, яланғас иттең. Йәннәттән сыҡ! Һин ун биш бәлә менән һыналасаҡһың. Ошо гонаһың өсөн Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр ҡыҙҙарыңа хәйез ҡаны (айлыҡ күрем) аманаттыр. Икенсе - ҡатын-ҡыҙ заттарың ҡорһаҡтарында туғыҙ ай бәпәй йөрөтөр; өсөнсө - бәпес тапҡанда үлем әсеһен татыр; дүртенсе - ғиҙҙәт михнәтен кисерер; бишенсе - ирҙәре хөкөмөндә һәм ирегендә ғүмер итер; алтынсы - талаҡ ирҙәр ҡарамағында булыр; етенсе - мираҫты яртылаш кәм алыр; һигеҙенсе - шәһәҙәт биреүҙә, туғыҙынсы - аҡылда, унынсы - диндә кәм, ун беренсе - сәләм биргәндә, ун икенсе - йома, йәмәғәт менән уҡылған намаҙҙарҙан, ун өсөнсө - бәйғәмбәрлектән, ун дүртенсе - хәлифәлектән үә батшалыҡтан мәхрүм ҡалыр; ун бишенсе - уларға мәхрәмәһеҙ сәфәр ҡылыу хәрәм һаналыр.

Гонаһтары өсөн башҡалар ҙа яҙаһын алды. Ғазраил ғәләйһиссәләм Тауистың башынан тотоп, уны ожмахтан сығарҙы. Фәрештәләр, йолҡоп алып, уның алты йөҙ ҡанатының икеһен генә ҡалдырҙы... Шунан йыланды килтерҙеләр. Аяғы - дүртәү, тәне йәшел зөбәржәттән биҙәкле, муйыны ла - зөбәржәттән, башы - ҡыҙыл яҡуттан, тештәре ынйы һымаҡ теҙелгән, ҡорһағы ҡыҙыл гөл кеүек. Ауыҙына шайтан кергәне өсөн бөтә тән ағзалары үҙгәртелде, теш төптәренә ағыу һалынды, ожмахтан сығарылды. Хаҡ Тәғәләнән хитап ҡылынды:

- Әй Йылан, был ҙур гонаһҡа һин булышлыҡ иттең. Шуға ла хур бул, түшең менән йөрө, урының - ер, ризығың тупраҡ булһын.

Шунан Илаһ фәрештәләргә өндәште:

- Әҙәмдең сәсен ботаҡтарҙан ысҡындырығыҙ!

Әҙәм был яҡшы һүҙҙе ишетеп, Хаҡ Тәғәләнең бер шәфәғәте бар икән тиеп, ҡулы менән ағасҡа йәбешеп, ялбарҙы:

- Илаһым, хаталыҡ менән ҡылған гонаһым өсөн әүәлге хөрмәтеңде, зинһар, алма!

- Ҡоломдо сығарығыҙ!

Әҙәм икенсе ағасҡа сат йәбешеп, түбәнселек менән үтенде:

- Мине йәннәттән ҡыума, Һинеҙ минең ҡеүәтем юҡ.

Йәнә әмер ҡылынды:

- Әй фәрештәләр, Әҙәмде ожмахтан йолоғоҙ!

Фәрештәләр уны тартып алды, әммә ул тағы ла бер ағасҡа тотоноп:

- Йә Рабби! Һин минең нәҫелемдән бәйғәмбәрҙәр килеренә вәғәҙә иттең. Иҙрис, Нух, Ибраһим... Әгәр бер хата ҡылһаң, Мөхәммәт Мостафа итәгенә йәбеш, ҡотолорһоң, тигәйнең. Шул һуңғы бәйғәмбәребеҙ хөрмәтенә рәхимлек ҡыл!.. - тип инәлде. - Хөкөмөң дә, тәҡдир ҙә Һинеке. Һин ғәфү итеүсе, мине ярлыҡа!..

**(Дауамы бар).**

СӘХНӘ СЕРЕ

# ТАМАШАСЫМЫ?

## Ул тамаша ҡылыусы ғына түгел!

**Элек, совет осоронда, ауыл клубтарында көн һайын кинофильмдар ҡуя торғайнылар. Беҙ, балалар, "кина килгән", тип, ҡыуанышып, афишаһын ҡарап, унда булған наҡыҫ ҡына мәғлүмәттәрҙе уҡый торғайныҡ. Ауылдың иң әүҙем тамашасылары шул беҙ булғанбыҙҙыр инде. Бер ағай һөйләгәне хәтерҙә. Клубтың уты һүнгәнен күргәс, был, ашығып, кино ҡарарға йүгергән. Киномеханиктан билет алып эскә үтһә, унда бер генә тамашасы экранға тексәйеп ултыра икән. "Ҡасан башланды?" - тип, шыбырлап ҡына һораған баяғы ағай. "Әллә, мин килгәндә уже башланғайны", - ти икән тәүге тамашасы. Тимәк, ниндәйҙер ҡунаҡка ашыҡҡан киномеханик, тамашасылар тиҙерәк йыйылһын, тип, буш клубҡа кино күрһәтә башлаған. Нинә, бик тә булыуы мөмкин хәл. Шулай ҙа сәнғәт бер яҡлы булмай, уның һәр ваҡытта ла тамаша ҡылыусыһы, баһалаусыһы булырға тейеш. Был - аксиома. Тамашасыларға иң мохтажы театрҙыр ул, сөнки ҡүҙмә-күҙ тере аралашыу тик театр залында ғына була. Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрының тамашасылар ойоштороу буйынса директор урынбаҫары Айгөл Альберт ҡыҙы ҒӘЙНУЛЛИНА менән һөйләшкәндә театрҙың тамашасылары тураһында күберәк белге килде.**



- Тамашасылар ойоштороу буйынса директор урынбаҫары булараҡ, минә һуңғы йылдарҙа Яңы йыл байрамдарында бер юлы ике бригада эшләүе оҡшай, - тип башлап китте Айгөл Альберт ҡыҙы. - Уларҙың береһе гастролдәрҙә сығыш яһаһа, икенсеһе спектаклдәрҙе театрҙа күрһәтә. Элек был эш тәртибе системаға һалынмағайны. Быйыл да байрам спектаклен күрһәтеүҙе уңышлы башлап, тамашасыларыбыҙҙың абруйын яулап өлгөрҙөк. Ауылдарҙа беҙҙе хәҙер көтөп торалар. Гастролдәргә ҡыуанып йөрөйбөҙ, сөнки урындарҙа шатланып ҡаршы алалар, тағы килеүебеҙҙе һорайҙар. Беҙҙең өсөн был ҙур мәртәбә. Артистарыбыҙ ҙа һис зарланмайынса балаларға байрам кәйефе бүләк итәләр, сөнки балалар ҡыуаныусы уртаҡ байрамға әйләнә, спектаклдәр шыршы тирәләй ойошторолған уйынкөлкө менән тамамлана. Уҡытыусылар ҙа бындай уртаҡ тәрбиәүи сараны ихлас ҡабул итәләр. Күберәге мәктәп спортзалдарында үткән тамашалар ҡай саҡ театр сәхнәһендәгенән дә ихласыраҡ килеп сыға.

Быйылғы "Карамбули-Карамбаба! Так велит Ягуля-Баба!" исемле яңы йыл спектакленең сценарий авторы һәм ҡуйыусы режиссеры Денис Нурғәлин. Был уның драма театрында балалар өсөн әҙерләгән тәүге спектакле. Баш режиссерҙың яңыса ҡарашын, заманса һулышын ҡыуанып ҡабул иттек, сөнки тамашаларҙың уңышы иң тәүҙә спектаклде ҡуйыусыға бәйле. Электән дә мөбәрәковсыларҙың балалар өсөн әҙерләгән яңы йыл тамашалары дан ҡазана ине, Дамир Мәжит улы Ғәлимов осоронда ҡуйылған тамашалар ҙа тылсымлы әкиәтҡә әйләнә торғайны. Был йола дауам итә, яңы йыл спектаклдәренә театрыбыҙ ҙур иғтибар бүлә. Әлбиттә, Яңы йыл әкиәттәренең ғүмере оҙон түгел, улар ҡыҫҡа бер осорҙа ғына сәхнәлә йәшәп ҡала, әммә был уларҙың әһәмиәтен кәметмәй. Тамашасыларыбыҙҙың баһаламаларын уҡыһаң, күңелгә май булып яғыла - бигерәк тә, әкиәттәргә йән өрәһегеҙ, тиһәләр. Шуғалыр ҙа беҙҙең балалар өсөн әҙерләгән спектаклдәргә бик теләп йөрөйҙәр. Денис Сәлим улының эшендә лә ана шул йәнле әкиәт тойола. Был шатлыҡлы күренеш.

Әлегә ижади миҙгелебеҙҙең уртаһы булһа ла, артистарыбыҙ физик яҡтан да, психологик яҡтан да арыйҙар, сөнки тәүге ярты йылда улар бик ҡеүәтле эшләйҙәр. Рәхмәт уларға, декабрь айында ғына 50 спектакль ҡуйыу ҡатмарлы ла, ауыр ҙа. Әммә беҙҙекеләр бирешмәй, зарланмайҙар, көстәрен бер йөҙҙөрҡка туплап, дәртләнеп эшләйҙәр. Ике-өс көн ял итеп ҡалабыҙ, шунан килеһе йылдың планлаштырылған спектаклдәре башлана, сөнки яңы йыл каникулдарына төрлө яҡтан ялға ҡайтҡан тамашасыларыбыҙҙы көтәбеҙ.

Ғинуар башында театрҙы ситтә йөрөп һағынған яҡташтарыбыҙ килә. Беҙ ҙә уларҙы, әлбиттә, ҡыуанып ҡаршы алабыҙ. Киске спектаклдәр менән бер рәттән, көндөҙ балалар өсөн тамашалар ҙа дауам итә - улар ҙа ялда бит. Ошондай мәлдә дәртле, теремек булырға кәрәк. Беҙ генә түгел, башҡа театрҙар ҙа шундай темпта эшләй, сөнки беҙ байрам кәйефе булдырыусылар!

Үткән йылда күрше Силәбе өлкәһенең беҙгә яҡын булған районларын да хеҙмәтләндерә башланыҡ. Әлегә Яңы йыл байрамы спектаклдәре менән уларҙы "ҡулға эйәләштерәбеҙ". Былтыр бик йылы ҡабул иткәйнеләр, быйыл үҙҙәре саҡырҙылар. Яйлап өлкәндәр өсөн ҡуйылған спектаклдәр менән барасаҡбыҙ, күрше генә ятҡан урыҫ ауылдарында башҡорт телмәре ишетеләсәк, улар ҙа белергә тейеш Сибай драма театры тураһында. Балалар өсөн тамашалар рус телендә барһа, өлкәндәр синхрон тәржемә аша ҡараясаҡ. Әлегә улар беҙҙең артистарҙы күреп танышты, юғары профессиональ кимәлдә оҫта уйнауҙарын күрҙе. Саҡырыуҙарына бик шатбыҙ, яйлап дуҫлашырбыҙ, сөнки сәнғәт өсөн сиктәр юҡ. Театрҙың үҫеше өсөн дә был ҙур әтәргес.

Сибай тамашаһыһына килгәндә, ундайҙар башҡа бер ҡайҙа ла юҡ! Улар аҡыллы, иғтибарлы, итәғәтле, рәхмәтле, театрҙы яратҡан кешеләр. Бындай сифаттар оҙаҡ йылдар буйына тәрбиәләнгән. Беҙ ҙә яратабыҙ тамашасыларыбыҙҙы, рәхмәтлебеҙ уларға. Ғәҙәттә, спектаклдәр ваҡытында буш урындар булмай, кереһенсә, уларҙы нисек һыйҙырырға тип баш ватабыҙ. Мөбәрәков театрын халыҡ электән яратып ҡарай, шул осорҙа әллә нисә быуын тамашасылар алмашынған. Ҡасандыр бала сағында ауыл клубында күргән спектаклдәрҙе, Сибайға килеп төпләнеп, яңынан ҡарауын дауам итә күп кенә театр һөйөүселәребеҙ. Театрҙың тарихы менән бергә шулай матур йолалар дауам итә. Театр үҙе лә йүнәлешен үҙгәртмәй, саф башҡорт телле театр булып ҡала. Беҙҙең иң ҙур ҡиммәтебеҙ - туған телебеҙ, әҙәби башҡорт теле театрҙың нигеҙе. Күптәр, әгәр ысын башҡорт телмәрен ишеткең килһә, Сибай театрына бар, тиҙәр.

Пушкин картаһы эшләй башлағаны бирле йәш тамашасыларыбыҙ һаны артты. Саф башҡорт телмәрен ишетеп, күңелдәренә һендерәләр, улар ҙа туған телдең ҡәҙерен аңлаясаҡтар. Был яҡтан беҙҙең театр бик тә уникаль күренеш, шуға күрә тамашасыларыбыҙ ҙа үҙенсәлекле. Урал арьяғында театр сәнғәтенең берҙән-бер сығанағы булғас, беҙ туған халҡыбыҙға хеҙмәт итәбеҙ. Бушҡамы ни, беҙҙе тәғәрмәс өҫтөндәге театр, тиҙәр. Быуындан-быуынға шундай изге йолаларҙы һаҡлап килгән артистарыбыҙға рәхмәт. Гастролдәрҙә йөрөүсе театрға бөгөнгө көндә лә еңел түгел, уның үҙ ҡатмарлыҡтары бар. Ауылдарҙа йәшәүселәр һаны кәмеүенә ҡарамайынса, беҙ һаман да уларҙы иғтибар үҙәгендә тотабыҙ, гастролдәргә йөрөүҙән туҡтамайбыҙ. Рәсәй регионында булғанда ла башҡорт мәҙәниәтен һағынған милләттәштәребеҙҙе күтәрмәләйбеҙ. Улар беҙҙе күҙ йәштәре менән ҡаршы алып, оҙатып ҡалалар.

Бына шуға ла театр йәшәй, хеҙмәт итә, ул кәрәк, тамашасыларҙың ихтыяжы кәмемәй. Быны белеү беҙгә көс өҫтәй. Етәксебеҙ ҙә эшен бик аҡыллы алып бара. Ул үҙе бала сағынан ошо театр эсендә үҫкән, шәхес буларак үҫеш этаптары ла театрҙан айырылғыһыҙ булған. Мәктәп йылдарында уҡ декоратор булып эшләһә, аҙаҡ театрҙың водителе, администраторы булған, директор урынбаҫарынан директор вазифаһына тиклем күтәрелгән. Шуға күрә Сибай театрының үҙенсәлектәрен аңлай, ҡыҫҡаһы, үҙ урынын тапҡан етәксе. Илнур Риза улына киләсәктә лә уңыштар теләйем, илһам һәр саҡ юлдаш булһын, үҙ көсөнә, коллективҡа ышанып, локомотив кеүек алдан барһын.

Театр 93-сө миҙгелен аса икән, был бит уның күпме тарихи ваҡиғалары булыуы тураһында һөйләй. Ауыр, ҡатмарлы йылдары ла булған, әммә театр йәшәгән, эшләгән, сәскә атҡан, тимәк, ул киләсәктә лә гөрләйәсәк. Шәхсән үҙем театрҙың киләсәгенә оптимизм менән ҡарайым, сөнки нимә генә булмаһын, беҙҙә дуҫ коллектив эшләй, кәрәк мәлдә бер-беребеҙгә таяна, ойоша беләбеҙ. Яратам мин үҙебеҙҙең театрыбыҙҙы!

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ**
**яҙып алды.**

УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР

# ОТКРЫТКА

Медпунктта эшләп йөрөгәнемдә минә даими килеп йөрөгән ике пациентым булды - һуғыш ветераны Нурфәйез бабай һәм ғүмер баҡый яңғыҙы көн иткән Фатима ҡарсыҡ. Бабай әбейле һәм туғанлы ине, ә бына ҡарсыҡ, әйтеп үткәнемсә, бер кемдән дә тыумайынса, елдән яралып, ҡуҡтән килеп төшкән дә, бына ошолай өҙләкһеҙ дауахана юлын тапап, сирләп-сырхап йөрөп ята төҫлө. Нурфәйезде фалиж һуҡҡанлыҡтан ярты кәүҙәһен көскә ҡыймылдатып атлай, ә Фатиманың ҡан баҫымы юғары. Ике ауырыуым үҙ ғүмерҙәрендә ҡүтән һурпаһын саманан аштырып эскәнлектән, күп татыған лыҡтан, тормош ауырлыҡтарына, сирҙәренә бирешә һалып бармай, ҡайҙа ла мөләйем ҡалдылар, хәлдәренә шөкөрана ҡыла белделәр.

Иртәнсәк амбулаторияға киләм дә, эш араһында тәҙрә аша тыш яҡҡа күҙ атҡылап алам. Бер ни тиклем ваҡыттан хужаларына эйәреп килгән Фатима әбейҙең Нәҙлыбай исемле бохар бесәйе ҡойма бағанаһына дәрәжәле генә менеп урынлаша, ә ҡуләгәгә Нурфәйез ҡарттың телдәрен һәлберәткән Аҡтырнағы һуйҙая. Эттең - бесәйҙә, бесәйҙең эттә эше юҡ, уларҙың бар ғәме бына-бына ишектән күренер яҡын кешеләрен көтөү. Ошо ерҙә шуны ла өҫтәмәксемен, хәҙер әҙәм балаһы эт менән бесәйҙәй тырнашып, йөҙ йыртышып йәшәй, әүәле ул йән эйәләре урынын, дәрәжәһен, тәғәйенләнештәрен белеп, үҙҙәрен тыныс, ипле тотоп ерле юҡҡа талашмайҙар ине.

Уңарсы көтөү булмәһендә ғыжылдаҡ тауыш ишетелә:

- Бар башта һин ин, юғиһә, мин ҡасан аяҡты һөйрәп ҡыймылдағансы, төш етер! - Тимәк Нурфәйез ҡарт беренсе ингән дә хөрмәт йөҙөнән Фатиманы алдан үткәреп ултырыуы.

Онотоп ебәргәнмен, әйтерем открыткалар хаҡында бит әле. Берәй байрам яҡынлашһа, Нурфәйез ҡарт процедураға үҙе менән открытка тотоп килеп инә лә ҡулындағын алдыма ырғыта:

- Мә, ошоға яҙып ал, үҙенде байрам менән ҡотлап. Минең ҡулдың эшкинмәгәнлеген беләһең! - Иртәгеһен ошо мөшәкәтенең һөҙөмтәһен талап итә. - Нимәләр сыймаҡлап таштаның, уҡып ишеттер!

Үҙемде байрам менән ысын күңелдән ҡотлайым, ихлас һүҙҙәр теҙәм, кәйеф килгәндә шиғыр юлдарын да өҫтәп ебәрәм ҡайһы саҡ. Нурфәйез ҡарт диҡҡәт менән тыңлай ҙа баһаһын ҡуя:

- Уй-теләктәремде уҡығандай арыу яҙғанһың! - Ҡәнәғәт ҡиәфәттә һалпыш мыйығын һыпыра.

Шулай итеп, байрам һайын открыткаһыҙ ҡалмай торғайным.

Фатима ҡарсыҡ иһә йылына бер тапҡыр ғына борсой. Укол ҡаҙата ла йомошо барлығын белдереп, эргәмдәге ултырғыҫҡа сукая, шунан унайһыҙланғандай, тартылғандай өнһөҙ ҡала.

- Инәй, тағы берәй әйтерең бармы әллә? - тим, гел бер осорҙа ҡабатлана килгән теләктең эстәлеген алдан һиҙемләп.

- Әйтерем, тип, үтенес инде... Ошо аҙнаның аҙағында тыуған көнөм бит, балам, открытка яҙып, мине ҡотлаһаң арыу булыр ине, юғиһә, пушты йәшнигем буп-буш, ҡотлаусы ла юҡ...

Тағы ла открытка яҙырға ултырам.

...Хәҙер почта бүлексәһенә һуғылһам, кеше һатып ала һалып бармаған открыткалар өйөмөнә күҙем төшә. Хәҙер замана башҡа шул, һауа аша, виртуаль донъя аша ғына тәбриклəйҙәр. Ҡотлауҙы ҡулына алмаған, уның хәҡәте лә, ҡыҙығы ла, ҡәҙере лә юҡ. Ә минең гел генә ике открытка һатып алғым килә. Береһен үҙемдә үҙем ҡотларға, икенсеһен Фатима ҡарсыҡтың тыуған көнөнә тәғәйенләп...

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

*✓ Күптәр, полилингваль мәктәптәрҙә сит ил телдәрен өйрәтәләр, тип яңылыша. Һис тә улай түгел, был мәктәптәр туған телде һаҡлау өсөн барлыҡҡа килә. Республикала башта шундай ун биш мәктәп юл башлай.*

ИНТЕРНЕТТАН



## МАЙЛЫ АШАМА

■ Төнөн йоҡо туймағанда, шул сәбәпле нервылар ҡуҙғып торғанда көндөҙгө йоҡо сәләмәтлек өсөн файҙалы, тип билдәләй табиптар. Шулай ҙа көндөҙ йоҡлауҙың кире яҡтары ла бар. Быны бер нисә эре эпидемиологик тикшеренеүҙәр күрһәткән. Мәҫәлән, көндөҙ йоҡларға яратҡандар араһында диабет, йөрәк сирҙәре йышыраҡ осрай, депрессия ла улар өсөн ят түгел. Көндөҙ йоҡо килә икән, тимәк, төндә насар йоҡлайһығыҙ, был хроник сирҙәрҙе аҙҙырып ебәреүе ихтимал. Төнөн насар йоҡлау шулай уҡ йоҡо менән бәйле төрлө тайпылыштар тураһында һөйләй. Көндөҙ ятып алғандан һуң, кисен йоҡлап китә алмаусылар ҙа бар.

■ Табип-терапевт, "Медси" үҙәге етәксеһе Александра Григорьевская билдәләүенсә, байрам ваҡытында артыҡ ауырлыҡ йыйып өлгөрһәгеҙ ҙә, ғәҙәти йәшәү рәүешенә ҡайтҡас та ябығырға тырышырға кәрәкмәй. Мәғлүмәттәргә ярашлы, кеше ошондай оҙайлы ялдарҙа яҡынса 500 грамм артыҡ ауырлыҡ йыя. Был бөтөн донъя буйынса шулай. Шуға ла үҙегеҙҙе әрләүҙән туҡтарға кәрәк, ғәйеп тойғоһо, киреһенсә, артабан да ауырлыҡ артыуға килтереүе бар. Ашар алдынан уйлағыҙ, ысынлап та ашағығыҙ киләме? Сөнки байрамдарҙа беҙ туҡ ашҡаҙанға ла ашап өйрәндек. Ризыҡты быуҙа, духовкала бешерегеҙ, артыҡ май ҡулланмағаҙ. Фастфуд, магазин соустары, ярымфабрикаттар һатып алмағыҙ. Таҙа һыуҙы күберәк эсегеҙ. Булгур, ҡырағай дөгө, киноа кеүек ярмаларҙы ашап ҡарағыҙ. Шулай уҡ тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡларға кәрәк.

■ Ҡышын калориялы туҡланыу кәрәк, тиҙәр. Мифтарға ярашлы, ҡышҡы туҡланыу йәйгеһенән айырылмай. Йылынам тип калориялы туҡланмағыҙ. Һыуыҡтар менән апатия ла башлана, кеше спорт залына барыу урынына диванға менеп ятыуҙы хуп күрә. Шуға ла ҡышын артыҡ ауырлыҡ йыйып, яҙын унан ҡотолорға тырышыу күптәргә таныш. Организмға май ҙа, аҡһым да, углевод та кәрәк. Ә ҡыш майлы ашағас, аҡһым етмәй. Уны балыҡтан, диңгеҙ ризыҡтарынан, майһыҙ иттән, эремсектән, йомортҡанан, сырҙан алырға була. Һоло ботҡаһы, борсаҡ, нут аштары файҙалы. Туңдырылған емеш-еләк, уларҙы ботҡаларға өҫтәү кәрәк. Киптерелгән емештәрҙә витамин, минераль матдәләр күп.

■ Рәсәй табиптары билдәләүенсә, хәҙерге медицина әүҙем көрәшһә лә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре арта ғына. 40 йәштән йәшерәк пациенттар ҙа йылдан-йыл күбәйә. Быйың сәбәптәре күп, әммә ҡан тамырҙары атеросклерозына килтереүсе ғәҙәттәргә бәйле. Уларҙың беренсеһе - тәмәке тартыу. Хатта үҙе тартмайынса, йыш ҡына тәмәке төтөнө һуларға мәжбүр булыусылар ҙа атеросклероздан зыян күрә. Шул уҡ ваҡытта, был насар ғәҙәттән баш тартыу инфаркт һәм инсульт хәүефен 30 процентҡа түбәнәйтә. Икенсе ғәҙәт - бөгөнгө заманда кешенең үҙен төрлө мәғлүмәттән азат була алмауы менән бәйле. Беҙҙе уратып алған мәғлүмәттең гел генә ыңғай булмауы ла бар, беҙ үҙебеҙ, яҡындарыбыҙ, сериалдар геройҙары, ил, планетаның киләсәге һ.б өсөн гел борсолоп йәшәйбеҙ. Былар иһә яйлап хроник стресҡа килтерә. Тәүтормош кешеләре стресты хәүеф менә көрәшеүҙә ҡулланған, адреналин ҡырағай йәнлектәрҙән ҡасып ҡоторорға, дошмандарҙы еңергә ярҙам иткән. Бөгөн адреналин тышҡа сыҡмай, ә үҙенең тәьҫирен организмға, эскә йүнәлтә - ҡан баҫымын күтәрә, атеросклероз хәүефен арттыра.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ИҢ ТӘҮҘӘ БАШҠОРТ ТЕЛЕ,

## шунан - инглиз, ҡытай телдәре...

**Һәр белем усағының үҙ тарихы, яҙмышы бар. Мәктәп булһынмы ул, юғары уҡыу йортомо - барлыҡҡа килә, йәшәй, үҙ кимәленән сығып, ғилем тарата. Олпаттары бар уҡыу йорттарының, йәштәре, яңы нығынып килгәндәре, ҡыҙғанысҡа күрә, ябылғандары, юҡҡа сыҡҡандары ла бар. Кем йәшәтә, нимә бар итә уҡыу йорттарын? Өҫтән төшөрөлгән пландар, уҡыу программаларымы, бюджет аҡсаһымы? Әллә уҡытыусылар коллективымы? Бәлки, етәкселәлер бар ғиллә? Быйылғы уҡыу йылында полилингваль статусында асылған Сибай гимназия-интернаты директоры Роза Хаммат ҡыҙы Бикбова менән әңгәмә ҡорғанда мәктәп тарихы, уҡыу йортоноң йәшәйеше нығыраҡ ҡыҙыҡһындырҙы.**

### Яңы йүнәлеш



2019 йылдың апрелендә үткән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының Беренсе Бөтә Рәсәй съезында Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Фәрит улы Хәбиров "Башҡорт теле популяр булырға тейеш, туған телдәрҙе үҫтереү маҡсатында республикала полилингваль мәктәптәр асыласаҡ", тигән ҡыуанyслы хәбәр менән сығыш яһаны. Бындай иғтибарҙы күптән көтә инек, сөнки туған телде юғары кимәлдә ҡурсалағанда ғына үҫеш буласаҡ. Күптәр, полилингваль мәктәптәрҙә сит ил телдәрен өйрәтәләр, тип яңылыша. Һис тә улай түгел, был мәктәптәр туған телде һаҡлау өсөн барлыҡҡа килә. Республикала башта шундай ун биш мәктәп юл башлай. Улар бөтөн яҡтан: йыһазландырыу яғынан да, төҙөклөгө менән дә, көслө педагогтар коллективы менән дә башҡаларға үрнәк булырға тейеш. Яңы программалар буйынса эш башлар алдынан уҡытыусыларға өҫтәмә рәүештә махсус квалификация күтәреү курстары үткәрелә, мәктәптәр яңы китаптар менән байытыла - ҡыҫҡаһы, яңы мәктәптәргә ҙур иғтибар бүленә, улар бөтөн яҡтан алдынғы булырға тейеш. Беҙҙең мәктәптең полилингваль йүнәлешкә күсерен алдан белдек, быйың өсөн киләсәктә яңы, заманса проект буйынса гимназия-интернат бинаһы төҙөлөргә тейеш. Әлегә элекке йортобоҙҙа ҡалдыҡ, яңы бина булыр, тип өмөт итәбеҙ. Урал аръяғында быйыл бындай мәктәптәр Учалыла, Хәйбуллала асылды. Ошо көнгә республика буйынса һигеҙ мәктәп яңы йүнәлеш буйынса эшләй.

### Мәктәп тарихы

Сибай ҡалаһында мәктәп-интернат 1960 йылда төҙөлә. Таусылар менән Белов урамдары киҫешкән урындағы был уҡыу йорто хәҙер "Ирәндек" лицейы тип атала. Бөтә талаптарға яуап биргән өс ҡатлы уҡыу бинаһы, иркен ашханаһы, айырым төҙөлгән ятағы булған был интернат республика Хөкүмәте ҡарары менән асыла. Мәктәп тарихында төрлө мәлдәр була, бер осор ул атай-әсәйһеҙ ҡалған етем балалар өсөн интернатҡа әйләнә. Ниндәй генә үҙгәрештәр булмаһын, асылған көнөнән алып ул башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләүе менән башҡа мәктәптәрҙән айырылып тора. 1992 йылда гимназия статусы алғас та дауам итә был изге йола. 1984 йылдан 1998 йылға тиклем мәктәп директоры булып эшләгән Кинйәғол Хәйбулла улы Ғайсин бик күп көс һала был эштәргескә. Гимназия булғас, һәләтле балаларҙы йыйып уҡытыу мөмкинлеге барлыҡҡа килә. 2003 йылда әлеге мәктәп төҙөлөп бөткәс, бөтә уҡытыусылар коллективы, балалар менән ошонда күстек. Тураһын әйтергә кәрәк, был күсенеү бөтөнләй дөрөҫ булманы. Ни өсөн? Элекке мәктәпкә капиталь ремонт кәрәк ине, шуға күрә яңы бинаға күсерҙеләр. Ә бында бөтә кабинеттар ҙа майҙаны буйынса бәләкәй генә, 10-12 балаға иҫәпләнгән, сөнки был бина коррекцион мәктәп өсөн төҙөлгән, спорт залы ла, класс кабинеттары ла тар ғына. Яңылыҡҡа яңы ла ул, әммә беҙҙең талаптарға яуап бирмәй. Бында хәҙер 20 йыл йәшәйбеҙ, күп сығарылыш уҡыусыларыбыҙ ошо мәктәпте үҙҙәренең өйө һанай, тыуған интернатым, тип йән атып торалар.

### Уҡытыусылар

2008 йылда директор итеп тәғәйенләнгәс, әйҙәгеҙ, кире тәүге мәктәп бинаһына күсәйек, ул типовой итеп эшләнгән, кабинеттарҙың майҙаны ҙур, дөйөм ятағы бар, тип хаттар яҙҙыҡ. Тырышлығыбыҙ бушҡа булды. Шулай үкенеслерәк тарихыбыҙ бар. Хәҙер унда күсеүҙең мәғәнәһе юҡ, заманса төҙөлгән мәктәп-интернат кәрәк беҙгә. Коллективҡа килгәндә, бөгөнгө көндә өлкән уҡытыусыларыбыҙ күп, яңы мәктәптең таяныcын, нигеҙен улар тәшкил итә, 80 процент уҡытыусыларыбыҙ юғары категориялы, 15 кеше мәғариф отличнигы. Атҡаҙанған уҡытыусыларыбыҙ менән ғорурланабыҙ. Данлы, тырыш коллектив эшләй беҙҙә, күпселеге сибайҙар. Юл аша эргәбеҙҙә генә булған Сибай институтының һуңғы курс студенттарын эшкә саҡырабыҙ, аҙнаһына бер-ике сәғәт булһа ла эшләп ҡарағыҙ, тибеҙ. Ҡыҙғаныс, артыҡ теләк белдереүселәр юҡ, әле бер студент ҡына беҙҙә эшләп йөрөй. Уның тырышлығына ҡыуанабыҙ, бәлки, беҙҙә эшләргә ҡалһа, бик яҡшы булыр ине, тип өмөт итәбеҙ.

### Уҡыусылар

Уҡыусылар Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил, Ейәнсура райондарынан, Межгорьенан, Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһынан йыйыла. Иң күбеһе Баймаҡ менән Әбйәлилдән. Беҙҙә уҡырға теләгәндәрҙе төплө әңгәмә үткәреү нигеҙендә һайлап алабыҙ, яҡшы белем биреп, үҙаллы тормошҡа әҙерләйбеҙ. Коллектив һәр яҡтан тырышып эшләй, ун баланың һигеҙе юғары уҡыу йорттарына уҡырға инә. 10-11 класта ике профиль буйынса уҡытабыҙ: береһендә - тәбиғи фәндәр профилендә, химия-биология йүнәлеше, икенсеһендә - технология профиле буйынса физика-математика йүнәлеше. Икенсе йүнәлештәгеләрҙең бөтәһе лә юғары уҡыу йорттарына уҡырға инә. Химия-биологияныҡылар, ғәҙәттә, медицина институтына, йә колледжына баралар.

Полилингваль гимназия статусы алһаҡ та, профилдәр ҡалды, әлегә бөтә кластарҙы ла яңы ысулға күсермәнек. Башҡорт теленә иғтибар элекке кеүек ҡаласаҡ, дәрестәр, кластан тыш саралар, түңәрәктәр туған телебеҙҙә алып барыласаҡ. Беҙҙә башланғыс кластар юҡ, күп телдәрҙе өйрәнеүҙе гимназияға тәүбашлап аяҡ баҫҡан бишенсе кластарҙан башлайбыҙ. Улар башҡорт, инглиз, ҡытай телдәрен өйрәнәсәк. Әлеге бишенсе класыбыҙ туғыҙға барып етеүгә бөтәһе лә башҡорт телендә матур итеп һөйләшергә, фекер йөрөтә белергә өйрәнәсәк. Бынан тыш, уларҙы йыр-бейеүгә, нәфис һүҙ һөйләргә лә өйрәтәбеҙ. Рус һәм инглиз телдәре уҡыу планы кимәлендә булһа, унан тыш бер-ике тел һөйләшә алыу кимәлендә булырға тейеш. Полилингваль мәктәптәрҙә балалар көноҙоно уҡый, шулай ҡаралған, төп дәрестәрҙән тыш, төштән һуң да балалар төрлө дәрестәргә йөрөй.

Уҡыусыларыбыҙҙың ата-әсәләре беҙгә һәр саҡ ярҙамдарын күрһәтеп тора, уларға ҙур рәхмәтлебеҙ. Берәй яңылыҡ индерһәк, ихлас ҡабул итәләр. Шул уҡ полилингваль кластарҙы асҡанда иң тәүҙә ата-әсәләр менән кәңәшләштек, күп теллелектең ыңғай яҡтарын аңлаттыҡ. Риза булып ҡабул иттеләр. Шайморатовсылар класын асҡанда ла был кластарҙың ябай булмауын, төрлө мәшәҡәттәр буласағын, физик көсөргәнеш артыуын, уҡыусылар йыш ҡына төрлө яҡтарға сәфәр ҡылыуын, яңы формалар, атрибуттар эшләүгә аҡса кәрәк буласағын аңғартып торҙоҡ. Педагогик коллектив ата-әсәләр менән берҙәм булғанға әүҙем эшләйбеҙ, шуға алға китеш бар, буласаҡ!

Полилингваллек беҙҙең өсөн көтөлмәгән хәл түгел, быйың буйынса коллектив менән алдан уҡ һөйләшеүҙәр алып барҙыҡ. Мәскәү эргәһендәге "Сколково" инновацион үҙәгендә үткәрелгән курстарҙа булдыҡ, Осетиялағы полилингваль мәктәптәрҙең эшен ҡараныҡ, Үзбәкстанда булдыҡ. Мәғариф министрлығы шундай файҙалы командировкалар ойоштороп, таныштырғас, хәҙер дөрөҫ йүнәлеште аңлайбыҙ. Полилингваль мәктәптәргә, уҡытыусыларға туған телгә иғтибарҙы арттырырға рөхсәт ителгәс, таяныс булғас, эшләүе еңел булыр. Башҡорт теле уҡытыусыларының форумында булғанда

коллегаларымдан, математика, география, йәиһә башҡа предмет уҡытыусыларына форум үткәреләме, тип һораным. Юҡ бит. Хөкүмәт кимәлендә туған тел уҡытыусыларына шундай ҙур иғтибар бүленеүе ҡыуаныслы.

### Тәрбиә

Беҙҙә уҡытыу менән бер рәттән, тәрбиәүи мәсьәлә лә беренсе урында ҡала килә, шунһыҙ булмай. Уҡытыусы дәрестә тәрбиәләһә, таҙалыҡ өсөн яуаплы булған йыйыштырыусы ла тәрбиәләй, мәктәпте нисек таҙа тоторға өйрәтә. Ашнаҡсы апайҙары ла тәрбиәләй, йәғни тәрбиә һәр яҡлап була, сөнки тәрбиәле бала тәрбиәһеҙгә ҡарағанда яҡшыраҡ уҡыясаҡ. Егеттәребеҙ һәр саҡ костюм-салбарҙа йөрөй, бәләкәйҙән уҡ аҡ күлдәк кейеп, галстук тағып йөрөргә өйрәтәбеҙ, ҡыҙҙар сәстәрен матур итеп үреп, эш стилендә кейенәләр. Ата-әсәләр менән бәйләнеш яҡшы, улар бит интернаттағы матур традицияларҙы беләләр. Гимназияла кәсле белем биргәндәрен дә аңлайҙар һәм балаларын үҙ теләктәре менән алып киләләр. Ситтән ҡараһаң, бик тә зыялы атай-әсәйҙәрҙең балалары уҡый беҙҙә, тимәк, интернат үҙе лә уңышлы кешеләр тәрбиәләй.

### Йолалар

Гимназиябыҙҙың тик үҙенә генә хас йолалары бик күп. Бишенсе класҡа килеп уҡый башлағандарҙы бер айҙан матур итеп гимназист итеп алабыҙ һәм уҡыу йылында гимназистар парады үткәрәбеҙ: кем ҡайҙа, нинләй сарала ҡатнашҡан, нисек итеп үҙен матур күрһәткән, матур итеп тәбрикләйбеҙ. Йыл һайын республика кимәлендә Таңсулпан Ғарипова исемендәге ижади конкурс үткәрәбеҙ. Йомғаҡлауға Таңсулпан Хизбулла ҡыҙы шәхсән үҙе бүләктәрен тотоп килә. Балалар бик әүҙем ҡатнаша был сарала, ҡатнашыусылар һаны ике йөҙгә барып етә. Ҡасандыр мәктәп эсендә башланған конкурс, үҫә килә, республика кимәленә күтәрелде. 112-се башҡорт кавалерия дивизияһы буйынса үткәрелгән ғилми-ғәмәли конференцияларыбыҙ ҙа төбәкара кимәлдә үтә хәҙер. Йыл да сентябрь айының беренсе йылы көнөндә бөтә мәктәп менән ҡырға сығып ял итәбеҙ, төрлө ярыштар үткәреп, йырлап-бейеп, Сәләмәтлек көнө үткәрәбеҙ.

### Шайморатовсылар

Алтынсы класта тәү башлап шайморатовсыларға ҡабул ителгән уҡыусыларыбыҙ хәҙер һигеҙенсελә уҡый. Атай-әсәйҙәренең ризалығы менән уларҙы бергәләп кейендерҙек. Шайморатовсылар төрлө яҡҡа сәфәргә йөрөйҙәр, күпте күрәләр, күпте беләләр - иғтибар ҙур уларға. Быйылғы бишенселәрҙе лә алдыҡ шайморатовсылар клубына. Күрһәгеҙ ине, уларҙың күк формала баштарына пилоткалар кейеп, әллә кем булып йөрөүҙәрен! Иң тәртипле, иң аҡыллы балалар булырға тейешһегеҙ, тибеҙ уларға. Балалар үҙҙәре теләп килә беҙгә, гимназияны рекламалау ҙа кәрәкмәй, бөгөнгө көндә теләк белдергән дүрт баланың береһен алабыҙ. Ғәҙәттә, апайы уҡыһа, һеңлеһен алып килә, ағаһы уҡыһа, ҡустыһын эйәртә - алдан күреп-белеп киләләр беҙгә. Был бик яҡшы күренеш, тимәк, ғаиләһе белә. Беҙ үҙебеҙ ҙә ҙур бер ғаиләне хәтерләтәбеҙ. Сентябрҙәге тәүге линейкала уҡ, бына бәләкәй балалар килде, уларҙы үҙебеҙҙең ҙур ғаиләбеҙгә алайыҡ та, ярҙам итәйек, тибеҙ. Йыш ҡына күргәнем бар: бишенсе класс уҡыусыһы рюкзагын күтәреп китеп бара, арттан килгән өлкән класс уҡыусыһы уға ярҙам итә. Шулай йәшәйбеҙ!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәктәп тарихын һөйләгәндә Роза Хаммат ҡыҙы үҙенең ҡатнашлығы булмаған үткән ваҡиғаларға ла үҙен ҡушып һөйләй, әйтерһең дә, бында эшкә килгәнсе уҡ туған мәктәбенең эшен ситтән күҙәтеп торған, үҙен мәктәп тарихының тулы хоҡуҡлы өлөшө итеп тоя. Бәлки, шуғалыр ҙа үткән быуаттың алтмышынсы йылдар башында асылып, икенсе йортҡа күсергә мәжбүр булған мәктәптең тарихы өҙөлмәгән, үҙ йөҙөн, асылын һаҡлап ҡалған. Киләсәктә лә, полилингваль мәктәп итеп үҙгәртелгәс тә белем усағы үҙ йолаларына тоғро ҡалһын, тип теләйек.**

**Радик ӨМӨТКУЖИН**
**яҙып алды.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### "Атай, әйт әле..."

Һәр көн мине балаларым ҡыҙыҡһыныусанлыҡҡа һәм, мин уларҙан ҡасмаһам, файҙалы, ғәҙәттән тыш ҡыҙыҡлы нәмә өйрәтә. Күптән түгел биш йәшлек улым, ни өсөн ололар балаларға ярамаған ғәмәлдәрҙе эшләргә ярата, мәсәлән: тәмәке тартырға, спиртлы эсемлектәр эсергә, әрләшергә һ.б. тип һораны. Уға яуап бирергә тырышып, мин был насар ғәмәлдәрҙе аңлатыу һәм аҡлау өсөн аңлатма булмауын аңланым. Баланың үҙ ҡыҙыҡһыныуына ҡәнәғәтләндерерлек яуап алғас, уның никотин һәм алкоголдә бары тик ҡарышып ҡына ҡулланмаясағын аңланым. Ҡәнәғәтләндерелмәгән ҡыҙыҡһыныуҙың ниндәй көскә эйә булыуын һәм һауыттан тығын атылһа, уның ниндәй әҙемтәгә килтереүен күҙаллау ҡыйын түгел. Был көс аҡылдан яҙҙырырға мөмкин. Ҡыҙыҡһыныуҙы ҡәнәғәтләндерергә кәрәк, сөнки иртәме-һуңмы, ул барыбер ҡалҡып сығасаҡ. Уны ни тиклем оҙағыраҡ баҫтырып килһәгеҙ, һуңынан контролдә тотоу шул тиклем ауырыраҡ буласаҡ.

### Балыҡтар - синхрон йөҙөү буйынса донъя чемпиондары

Балыҡтарҙың йөҙгәнен күҙәткәнегеҙ бармы? Ҡыҙыҡлы бер нәмә лә күрмәнегеҙме? Балыҡ өйөрөнөң хәрәкәтендә ниндәй сәйерлек бар?

Балыҡтар барыһы ла бергә хәрәкәт итә. Әммә быны улар нисек башҡара? Нисек итеп улар бер үк ваҡытта борола, туп башлығы артабан нимә эшләргә икәнлеген хәбәр итмәй бит. Бер ниндәй ҙә шартлы билдә йәки кеше күҙе күрмәгән энергия нурын да ҡулланмайҙар. Шуға ҡарамаҫтан, улар барыһы ла бергә хәрәкәт итә. Был һеҙгә сәйер булып күренмәйме? Ҡыҙыҡһындырҙыммы? Хәҙер ошо һорауға үҙ аллы яуап табырға кәрәк, сөнки ҡыҙыҡһыныуҙы яуапһыҙ ҡалдырырға ярамай.

Әгәр бер ниндәй ҙә ым-ишара юҡ икән, тимәк, яуапты икенсе кимәлдә эҙләргә кәрәк. Күрәһең, балыҡтар тубы менән идара иткән коллектив аң бар!

Доктор Руперт Шелдрейктың тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, бер биологик төр вәкилдәре үҙ-ара морфогенетик ҡыр менән бәйләнгән. Икенсе төрлө әйткәндә, барлыҡ балыҡтар барыһы ла бер үк юғары кимәлдәге каналды файҙалана һәм үҙ-ара төпкә аң кимәлендә морфогенетик импульстар ярҙамында аралаша. Әгәр балыҡтар шундай һәләткә эйә икән, тимәк, уға кешеләр ҙә эйә. Был күренеште ҡулланыу перспективаларын күҙ алдына килтереп тә булмай.

Әгәр беҙ, барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-аттар бер коллектив аң менән тоташҡанбыҙ икән, бер үк төрлө фәнни асыштарҙың бер үк ваҡытта төрлө илдәрҙә яһалыуы аңлашыла. Был өс йәшлек баланың DVD плеерҙың 95 төймәһенең ҡайһыһы нимәгә икәнен белә, ә ололарға тоҡандырыу төймәһен иҫтә ҡалдырыу ҙа ауырлыҡ тыуыҙырыуын аңларға ярҙам итә.

Уйлап ҡараһаң, беҙгә сикһеҙ мөмкинлектәр асыла. Әгәр коллектив аңға аңлы рәүештә ҡушыла алһағыҙ, ниндәй мөғжизәләр тыуҙыра алырығыҙҙы күҙаллап ҡына ҡарағыҙ.

Бөйөк рухи остаздарға, бизнес лидерҙарына һәм һәләтле рәссамдарға белем, уныш һәм илһам осраҡлы ғына бирелә тиһегеҙме? Улар медитация менән имидж өсөн генә шөғөлләнә тип уйлайһығыҙмы? Үҙегеҙ эшләп ҡарағыҙ.

**Пьер МОРАНСИ.**

## ҺАБАҠ БИРӘ

# МАЙМЫЛ АҠЫЛЫ



**Шәрҡ илдәрендәге боронғо яҙмаларҙың береһендә һунарсы һәм маймылдар тураһында ҡисса һаҡлана.**

Маймылдарҙың тәбиғәтен, фекерләү кимәлен һунарсылар яҡшы белә икән. Улар маймылдың ҡулы һыйырлыҡ ҡына тар ауыҙлы көршәктәр алалар, шуларҙың төбөнә ашарға һалып, маймылдар йөрөгән юлға сығарып ҡуялар. Тегеләр кемуҙарҙан ҡулдарын көршәк эсенә тығалар. Буш ҡул еңел генә инһә лә, нимәнелер услағандан һуң, көршәк ауыҙынан йоҙроҡто тартып алып булмай. Тәбиғи, маймылдар ҡулдарын сығара алмайҙар. Январҙар һунарсыларҙың үҙҙәренә нисек яҡынлашҡанын күрә, әлбиттә, уларҙан ҡурҡалар, тик усты язырға ла, ризыҡты ҡалдырып ҡасып китергә тигән уй баштарына ла килмәй. Һаман йоҙроҡтарын көршәк ауыҙынан сығарып маташалар. Шулай булғас, һунарсылар уларҙы мәшәҡәтһеҙ генә эләктерәләр, артабан муйындарына бау бәйләп, бейергә өйрәтәләр. Бына шул рәүешле маймылдар һунарсыларҙың мөңгелек ҡолдарына әүереләләр.

Кешеләр араһындағы мөнәсәбәт тә ҡай саҡ шуны хәтерләтә. Беҙҙе төрлө әҙәп-әхлаҡҡа, ғилем алырға кәрәк, тип өйрәтһәләр ҙә, беҙ был донъяның алдаҡҡыс, хатта бысраҡ байлығынан баш тарта алмайбыҙ. Байлыҡ тип сат йәбешәбеҙ. Ғилем алыу байлыҡтан баш тартыу тигән һүҙ түгел бит. Беҙ фәкиргә әйләнмәйбеҙ, бөтөн эш кешенең аҡылында. Байлыҡ йәбешер өсөн түгел, ә кәрәк тиклем ҡулланыр, файҙаланыр өсөн генә бирелә. Ә бәгзеләр нәфсегә генә буйһона башлайҙар һәм уның ҡолона әүереләләр.

# МӨМКИНЛЕК ТАП!

**Бер батша үҙенең халҡын һынамаҡ булып, юлға ҙур таш һалып ҡуя. Артабан ни булыр, юлсылар ташты нимә эшләтер икән тип, үҙе ситтән күҙәтергә була.**

Байҙар, сауҙагәрҙәрҙәр таш эргәһенә килеп еткәс, уны урап үтеүҙе хуп күрәләр. Ҡайһы берәүҙәр юл уртаһында ятҡан ташты күреү менән батшаны әрләргә тотоналар: "Батша үҙенең һарайынан башҡа бүтән нәмәне ҡайғыртмай. Йөрөр юлдың рәте юҡ, бына ошонан да бит уның нисек батшалыҡ итеүен күрергә була!" Һәм әрләй-әрләй үҙ юлдары менән китәләр.

Бына бер мәл таш эргәһенә арбаһына игенен, емешйәшелсәһен тейәгән бер ярлы килеп етә. Ул атын туҡтата, башҡалар һымаҡ ташты урап үтергә ашыҡмай. Бер ағас тәрәү табып, таш аҫтына тығып, көс-хәл менән тегене юлдан ситкә шылдырып һала, унан түбәнгә тәгәрәтеүе енелләшә. Шулай итеп, ул үҙе өсөн генә түгел, бынан йөрөгән бар халыҡ өсөн дә юлды таҙарта. Кире әйләнеп килеүенә ул арбаһында бер тоҡ алтын ятҡанын күрә. Һәм батшанан яҙыу: "Был алтын - ташты алып ташлаған кешенеке".

Был ҡисса ауырлыҡтар һәм кәртәләр артында мәсьәләнең хәл ителеше ятҡаны тураһында. Күптәр ошо мөмкинлекте күрмәйҙәр. Улар ҡыл да ҡыбырлатмай, бары бүтәндәрҙе генә тәнҡитләргә, әрләргә, зарланырға, йәки үҙҙәрен генә йәлләтергә яраталар. Һөҙөмтәлә ауырлыҡ артында йәшеренгән иң шәп мөмкинлекте ҡулдан ысҡындыралар.

# АСЫЛЫН АҢЛА!

**Бер ир йылҡы малы аҫырай. Уның күк аты ла була. Бер мәл ошо ат юғала.**

Ҡайҙа булғанын берәү ҙә белмәй. Ат хужаһына күршеһе: "Атыңды урлағандар!"- ти. Ләкин ир: "Эйе, ул бында юҡ. Шулай ҙа урлағандармы-юҡмы, әле әйтеүе ҡыйын. Бер аҙ сабыр итәйек", - тип тыныс ҡына яуап бирә.

Ысынлап та, бер ни тиклем ваҡыттан һуң күк ат ун биш ҡара атты эйәртеп алып ҡайтып инә.

Күршеһе: "Бына бит һиңә бәхет яуҙы. Тағы ла ун биш атың булды", - тип әйтә. Хужа йәнә: "Бәхетме-юҡмы, белмәйем. Эйе, хәҙер ун биш ат бар. Шулай ҙа әҙерәк сабыр итәйек", - ти. Бер мәл хужаның улы бер ҡара атты егенгә өйрәтмәк була, тик ат өҫтөнән ҡолап, аяғын имгәтә. Күршеләр хәҙер: "Ысынлап та, былар бит ҡәһәрләнгән аттар булып сыҡты!"- тип әйтәләр. Быны ишеткән хужа: "Ҡәһәр төштөмө-юҡмы, белмәйем. Ләкин әлегә минең улым атлай алмай", - ти. Шул ваҡытта ҡапыл һуғыш сығып китә һәм йәш кешеләрҙе һуғышҡа алып бөтәләр. Имгәнгән егет кенә өйөндә тороп ҡала.

Был ҡиссаның ғибрәте нимәлә? Беҙҙең тормошта күп нәмәләр булып тора, беҙ ҡай саҡ уларҙың асылын, уның артында беҙҙе нимә көткәнен аңлап та еткермәйбеҙ. Ниндәйҙер табыш төшһә, был бик шәп, тип ҡыуанабыҙ, ә ул ҡай саҡ бәхетһеҙлеккә сәбәпсе булып ҡуя. Нимәнелер насар тип көйәбеҙ, ә ул көтөлмәгән ҡыуаныс алып килә.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әҙерләне.**

*✓ Ярлының ярлылығы бөткәс тә, ярлылыҡ әҫәре ҡырҡ йылға етер; байҙың байлығы бөткәс тә, байлыҡ әҫәре ҡырҡ йылға етер. (Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# Х. ӘХМӘТОВ ИСЕМЕНДӘГЕ БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ ФИЛАРМОНИЯҺЫНА - 85 ЙЫЛ!



**Филармония Башҡорт АССР-ы Халыҡ Комиссарҙары Советының 1939 йылдың 20 ғинуарындағы ҡарары нигеҙендә асыла. Ул республика халҡының сәхнә, музыка, хореография сәнғәтенә ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында булдырыла.**

Филармонияның төп эшмәкәрлеге донъя музыка һәм әҙәби классиканы танытыуға, Башҡортостан халыҡтары музыкаһы, халыҡ сәнғәте, заман композиторҙары һәм яҙыусылары әҫәрҙәрен үҫтереүгә йүнәлтелә. Хәҙерге ваҡытта Башҡорт дәүләт филармонияһында 300 урынлыҡ Кесе (Орган) һәм 633 урынлыҡ Ҙур зал эшләп килә. Унда билдәле йырсылар, коллективтар сығыш яһай.

Бөгөнгө көндә Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында БР Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры, Тынлы оркестр, Камерный оркестр, Эстрада-джаз оркестры, Т. Сәйфуллин исемендәге БР Дәүләт академия хор капеллаһы, "ФЕСТА" вокаль ансамбле, "Philarmonica" ҡыллы музыка ҡоралдары квартеты, музыкаль-әҙәби лекторий, тиҫтәгә яҡын эстрада коллективтары эшләй.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**1-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Яуаптар: Горизонталь буйынса:** Кинйә. Салауат. Маҡан. Ҡәйнә. Сирек. Бүгәсәү. Ҡаранай. Силәк. Әрҙәнә. Зенон. Ике. Өршәк. Юлай. Уҡ. Өрләк. Әпше. Амин. Любляна. Әбдей. Марафон. Нишатыр.

**Вертикаль буйынса:** Ҡәнзәфәр. Ҡырсынташ. Наян. Саян. Юламан. Әбйәлил. Келәм. Күңел. Йайлама. Ҡиәмәт. Юшан. Манго. Әйтем. Нар. Сүс. Өйөнә. Илар. Әрйә. Күк. Күкәй.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 ғинуар "Ете быуын. Йәштәр"** спектакль-вербатим. 16+
**24 ғинуар "Урал батыр"** Башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 12+
**25 ғинуар "Килен"** (З. Мусина), драма. 16+
**26 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+
**27 ғинуар "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24 ғинуар "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев, В. Виткович), трагикомедия. 12+
**25 ғинуар "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 13.00 6+
**27 ғинуар "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 11.00 6+
**28 ғинуар "Күңелдәрҙә ҡалды моңо..."** композитор И. Яхиндың хәтер кисәһе. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**25 ғинуар "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 18.00 0+
**26 ғинуар "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 18.00 0+
**27 ғинуар "Вечно эта 345-я!"** (Ж. Кусаинова). 12.00, 15.00 6+
**28 ғинуар "Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**27 ғинуар** А. Патрушин, орган. 18.00 6+
**"FESTA-шоу"** вокаль ансамбль концерты. 18.00 6+
**28 ғинуар "Ҡомло фантазия"** арфа һәм флейта. 15.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**22 ғинуар "Правда за нами..."** әҙәби-музыкаль лекторий. 13.00 6+
**23 ғинуар "Ҡыҙҙар килде ауылға"** (Н. Ғәйетбаев), музыкаль комедия. 12+
**24 ғинуар "Һырғалаҡ"** (А. Житковский), балалар баҡсаһы хроникаһы. 16+
**25 ғинуар "Человек в футляре. О любви"** (А. Чехов), һүрәтле хикәйәләр. 13.00 12+
**27 ғинуар "Һуғышсы Аждаһа тураһында легенда"** (Р. Ғәйнуллин), Яңы йыл әкиәте. 13.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

*Учалы филармонияһы сәхнәһендә:*
**22 ғинуар "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), фантасмагория. 12+
**23 ғинуар "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбаев), музыкаль-лирик комедия. 14.00 6+
**"Әлимә, йәки Мырҙаш ҡарт туйы" (Д. Юлтый), драма. 12+**
**24 ғинуар "Фронтовичка"** (А. Батурина), драма. 12+
**25 ғинуар "Его Величество Колобок второй"** (А. Кружнов), әкиәт. 12.00, 14.00 0+
**"Һинән - фатир, минән - ир!"** (Н. Ғәйетбаев), комедия-гротеск. 16+
**"Его Величество Колобок второй"** (А. Кружнов), әкиәте менән **26 ғинуар** Учалы районы Ахун ауылында - **13.00, 28 ғинуар** Ураҙ ауылында - 15.00. 0+
**"Һинән - фатир, минән - ир!" (**Н. Ғәйетбаев), комедияһы менән **26 ғинуар** Ахун, **27 ғинуар** Комсомол, **28 ғинуар** Ураҙ ауылдарында. 16+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**25 ғинуар "Эх, күгәрсенкәйҙәрем..."** (Ф. Бүләков), комедия. 12+
**27 ғинуар "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия. 18.00 12+
**28 ғинуар "Три кита в океане музыки"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+
**"Әсәй, бына һинә килен...дәр!"** (И. Зәйниев), комедия. 18.00 12+

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ҠЫЛ ҠУМЫҘ МОҢО...

## дауалай ҙа

**Ошо көндәрҙә "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбленең солисы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, ҡыл ҡумыҙҙа уйнау оҫтаһы Зәлиә Урал ҡыҙы ҒӘНИӘТУЛЛИНА Өфөлә тамашасыларын йыясаҡ. Шул айҡанлы башҡорт халҡының ҡыл ҡумыҙлы музыкаль мираҫын тергеҙеүселәрҙең береһе булған музыкант менән әңгәмәләшергә форсат таптыҡ.**



**➔Йыр-моңға һөйөү һеҙгә ҡайҙан бирелгән һәм ҡыл ҡумыҙға ҡарата иғтибар нисек тыуҙы?**

- Тамырҙарым Ҡурған өлкәһендә минең, Сафаҡул ауылында тыуғанмын. Хәтеремдә ҡалған: ҡартатайым бик моңло кеше булды, матур итеп йырлай торғайны. Мин дә бәләкәйҙән йырларға яраттым, шуға һәләтемде күреп, Сафаҡул ауылы музыка мәктәбенең скрипка класына уҡырға бирҙеләр. Ә инде уны тамамлағас, Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға килдем. Бында ҡыл ҡумыҙ бүлеге асылып ҡына тора ине һәм абруйлы остаздарыбыҙ минә ошо янынан тергеҙеләсәк уйын ҡоралын төүгеләрҙән булып үҙләштерергә тәҡдим иткәс, баш тартманым. Ҡыл ҡумыҙҙы беренсе тапҡыр һүрәттә күрҙем, шуға ҡарап, минең өсөн төүге уйын ҡоралы эшләндe һәм уны тиҙерәк өйрәнергә, уйнай башларға теләгем ҙур ине. Шулай башланды ла инде минең ҡыл ҡумыҙлы тормошом.

Ҡыл ҡумыҙ - бик үҙенсәлекле уйын ҡоралы. Быға тиклем мин үҙләштергән скрипканан хатта ҡылдарына баҫыу ысулдары менән айырыла: скрипканы бармаҡ бите менән баҫып уйнаһаң, ҡыл ҡумыҙҙы тырнаҡ бите менән уйнайһың. Ҡыл ҡумыҙҙың тауышы ла үҙенсәлекле бит инде. Уны йыш ҡына кешенекенә оҡшаталар, төрлө тәбиғәт тауыштарын да сығарырға мөмкин. Уйын ҡоралының тарихынан унда борон баҡсылар уйнаған һәм хатта ауырыуҙарҙы дауалаған тип тә беләбеҙ. Тик, ҡыҙғанысҡа күрә, Башҡортостанда ҡыл ҡумыҙ юғалып торған. Уны тергеҙеү эше утыҙ йыллап элек башланып, хәҙер инде был инструментты мәктәптәрҙә өйрәнәләр, Өфө сәнғәт училищеһы һәм З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында профессиональ кимәлдә белем бирелә. Уны бөгөн күп кенә музыкаль ансамблдәрҙә ишетергә була, шөкөр.

Ҡыл ҡумыҙ ябай ғына һымаҡ күренһә лә, һис улай түгел. Быға "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле менән Рәсәй буйлап гастролдәргә сыҡҡанда һәр саҡ инанып ҡайтыла. Башҡортостан, башҡорт халҡы менән таныштырған сараларҙа ҡыл ҡумыҙ тураһында һөйләйем дә, уйнап ебәрһәм, төрлө кеше төрлөсә ҡабул итә: кемдер тыңлай алмай, сығып китә, кемдер, киреһенсә, айырыла алмай һәм оҙаҡҡа тирмәлә ҡала, берәүҙәр туҡтай алмай илай. Шулай ҡыл ҡумыҙ аша ағылған көймоң ярҙамында таҙарыналарҙыр, йәки ҡан хәтере тарталыр, тип фаразлайһың һәм борон, ысынлап та, был уйын ҡоралы ярҙамында дауалағандарҙыр, тигән уйҙар килә. Ҡыл ҡумыҙҙа оҙон көйҙәр, һалмаҡ көйҙәр, ҡобайырҙар бик матур яңғырай. Яратып башҡарған көйҙәрем күп, айырып береһен генә атай алмайым, шулай ҙа күбеһенсә башҡорт халҡы көйҙәрен уйнайым.

Ошо урында ҡыл ҡумыҙсыларҙы борсоған мәсьәлә тураһында ла телгә алып китмәй булдыра алмайым: йәш белгестәрҙе эш урындары менән тәьмин итеү. Был йүнәлештә былай ҙа һанаулы ғына йәштәр белем ала һәм уларға эш шарттары тағы ла яҡшыртылһа, коллективтарҙа урындар арттырылһа ине...

**➔Һеҙ быйыл ғинуар айында ла ижадығыҙҙы үҙ итеүселәрҙе һөйөндөргән инегеҙ. Быйылғы концерт ниндәйерәк буласаҡ?**

- Эйе, икенсе тапҡыр концерт ойоштором. Беренсеһен "Этно-шоу" тип атағайным, был юлы ҡыл ҡумыҙ концерты. Әлбиттә, тамашасыларым яратып ҡабул иткән сығыштарымды ҡабатлан тәҡдим итәсәкмен, шул уҡ ваҡытта өр-яңы көйҙәр ҙә әҙерләнем. Концертта "Мираҫ" ансамбленең хор коллективы һәм оркестры ҡатнашасаҡ, саҡырылған артистар ҙа киләсәк һәм улар араһында беренсегә хеҙмәттәшлек иткән коллегаларым да буласаҡ. Тамашасыларым араһында төрлө йәштәге кешеләр булыуын иҫәпкә алып, концерт программаһын балаларға ла, өлкәндәргә лә оҡшарлыҡ итеп төҙөргә тырыштыҡ. "Урал" йыры, "Ҡуңыр буға" ҡобайыры, композиторҙар Урал Иҙелбаев, Илшат Яхин ижад иткән көйҙәр яңғыраясаҡ. Барлыҡ серҙәрҙе лә асып бөтмәйем, әммә тамашасылар күңеленә ятыр, илаһи моң иленә сәйәхәт итеп ҡайтырҙар, тигән өмөт менән әҙерләнәбеҙ.

**➔Ҡыл ҡумыҙҙа уйнарға өйрәнергә теләүселәр өсөн оҫталыҡ дәрестәре ойоштороу ниәтегеҙ тураһында телгә алғанығыҙ бар. Хыялығыҙ тормошҡа аштымы?**

- Был оҫталыҡ дәрестәре айырым төркөмдәрҙә үтә ул, әммә киң йәмәғәтселеккә иғлан итеп, бар теләүселәр өсөн ойошторолғаны юҡ. Ҡыҙғанысҡа күрә, былтырғы йыл дауамында ла быны атҡарып булманы. Әммә вәғәҙә биргәс, мотлаҡ үтәргә кәрәк: яҡын киләсәктә дәрестәр буласаҡ. Тағы бер ҡыл ҡумыҙ ҙа һатып алдым һәм оҫталыҡ дәрестәрен Өфөләге В.И. Ленин йорт-музейы биләмәһендәге тирмәлә үткәрергә ҡыҙҙаллап торам, ә инде теүәл ваҡытын иғлан итәсәкмен. Халыҡтың ихтыяжы бар, ҡыл ҡумыҙ менән ҡыҙыҡһыныусылар байтаҡ икәнен беләм.

**➔Йәштәр халыҡ көйҙәрен һирәк тыңлай һәм быны эҙемтәһе булып, көйҙәр боҙола...**

- Эйе, был мәсьәлә күптәрҙе борсоуға һала. Ысынлап та, халыҡ йырын боҙоп, бөтөнләй башҡаса яңғырашлы итеп үҙгәрткән осраҡтар булғылай. Шулай ҙа йәш быуындың тәрбиәһе, донъяны танып белеүе, уға ҡарашы башҡа бит. Уларҙың иғтибары "секундлы" тип әйтәйекме, тиҙ-тиҙ алышынып торған һәм сағыу кадрлы, һүрәтле, мәғлүмәтле нәмәләрҙә ҡарайҙар, тыңлайҙар. Уларҙы ирекһеҙләп оҙон халыҡ көйҙәрен тыңларға ҡушыуы ла ауыр, ә шулай ҙа халҡыбыҙҙың был хазинаһына иғтибарҙарын йәлеп иттерергә, таныштырырға кәрәк. Шуға ҡайны бер йырҙарҙы, көйҙәрҙе замансаға яраҡлаштырып үҙгәртеүҙең зыяны юҡ, тик быны дөрөҫ эшләү мөһим. Композиция бына нисек барлыҡҡа килергә тейеш: төүҙә нигеҙ булыр әҫәр алына, уның тарихы өйрәнелә, шунан сығып үҙгәреш индерелә. Әлбиттә, "Зөлхизә" кеүек ҡатын-ҡыҙҙың ауыр яҙмышы тураһындағы берәй йырға ритм өҫтәп, "дәртләндереп" ҡуйыу ярамай. Ә бына шаян йырҙарыбыҙ, киреһенсә, яңы һулыш алып ебәрә. Сөнки көйҙәң дә мәғәнәһе бар.

Ҡыҫҡаһы, халыҡ көйҙәрен, халыҡ уйын ҡоралдарын, халыҡтың ауыҙ-тел ижадын үҙ әсенә алған бындай һирәк концерттарға уны аңлаған, баһалаған тамашасы ғына йөрөй. Һәм шундай тамашасыларым булыуына ифрат шатмын, уларға музыкаль зауыҡына тоғро ҡалыуҙарын теләйем. Шул осраҡта бороңғо көйҙәребеҙ һәм ҡыл ҡумыҙ кеүек бороңғо уйын ҡоралдарыбыҙ мәңге йәшәйәсәк.

Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУРЫҢ БӨТҺӘ...

## кеше ҡәҙерен белерһең

Ярлының ярлылығы бөткәс тә, ярлылыҡ әҫәре ҡырҡ йылға етер; байҙың байлығы бөткәс тә, байлыҡ әҫәре ҡырҡ йылға етер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡыллы әҙәм ҡатын-ҡыҙҙы ла, бызланы ла һынауҙарға дусар итмәҫ.

**(Лопе де Вега).**

Кешелеккә хеҙмәт итмәгән аҡыл бик ҡурҡыныс.

**(Софокл).**

Был донъяла кешеләргә ҡарағанда... ахмаҡлыҡ күберәк.

**(Генрих Гейне).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер фермерҙың ишәге ҡоҙоҡ эсенә ҡолап төшә. Фермер ни эшләргә белмәйенсә йүгергеләргә тотона, шул уҡ ваҡытта ҡоҙоҡ төбөндәге ишәктең ғазаплы, йәлләткес тауышы уны ҡаушатып, ниндәйҙер сара күрергә ҡамасаулай. Шулай ҙа фермер үҙендә бер көс табып, шундай ҡарарға килә: ишәк ҡарт инде, ҡоҙоҡто ла күптән күмеп ҡуйырға йыйына ине. Шуға ла хайуанды унан һөйрәп сығарыуға көс әрәм итеп тормаҫҡа, ҡоҙоҡто ишәге-ние менән бергә күмеп ҡуйырға!**

**Фермер ярҙамға күршеләрен саҡыра. Барыһы ла дәррәү көрәккә тотоноп, ҡоҙоҡҡа тупраҡ ырғыта башлай. Ишәк эштең ниҙә икәнен шунда уҡ һиҙенеп, ҡурҡыныс итеп үкерергә тотона. Шунан ҡапыл тынып ҡала. Күпмелер тупраҡ ырғытҡандан һуң, фермер ҡоҙоҡ эсенә күҙ ташлай. Унда күргәндәренән шаҡҡата: ишәк һәр ырғытылған тупраҡты өҫтөнән һелкеп төшөрөп, тупраҡ өҫтөнә баҫа бара. Шулай итеп ул бик тиҙ ҡоҙоҡ буйлап өҫкә күтәрелә һәм һикереп сығып, сабып китә. Көрәк тотҡан кешеләр аптырап тороп ҡала...**

**Эйе, һинең тормошоңда ла бындай ауырлыҡ, кәртәләр осрар, улар әленән-әле өлөшләп ебәрелә торор.**

**Өҫтөңә ниндәйҙер "тупраҡ" ырғытылғанда, уны һелкеп ташлап, юғарыға күтәрел - шул саҡта ғына тубыҡтарыңды яҙып, турайып баҫа алырһың.**

**Барлыҡҡа килгән һәр ауырлыҡ - ул юлыңа ишелеп төшкән таш өйөмө һымаҡ. Туҡтап ҡалмағанда һәм бирешмәгәндә был таш өйөмөн дә аша сыға алырһың.**

**Өҫтөңә ишерелгән һәр "тупраҡты" һелкеп ташла һәм юғарыға күтәрел!**

**Бәхетле булыу өсөн ошо ябай ғына биш ҡағиҙәне иҫеңдә тот:**

- **Йөрәгеңде нәфрәттән арындыр һәм ғәфү ит.**
- **Йөрәгеңде борсолоуҙарҙан азат ит - уларҙың күбеһе сәбәпһеҙ һәм урынһыҙға килеп тыуа бит.**
- **Ябай ғына итеп йәшәргә тырыш, булғаныңа шөкөр ит.**
- **Үҙең кешеләргә күберәк бир.**
- **Башҡаларҙан күпте өмөт итмә.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02.
(453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
18 ғинуар 15 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905

Тиражы - 2750
Заказ - 111222